ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

24-30 сентябрь (нарысай) 2022

№38 (1028)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Кеше атына менгән...**

тиҙ төшөр



2-3

**Ысын ир-егет бурысы был...**



6

**Милли йөҙлө институт...**

йөҙ йыллығын билдәләй



8-9

**Күңел йәдкәрен...**

таш һынға күсергән



11

*Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ! Сентябрҙән 2023 йылдың беренсе яртыһы өсөн ПР905 индекслы "Киске Өфө" гәзитенә яҙылыу хаҡы 798 һум 60 тин. Өфө халҡы "Өфөматбуғат" киоскыларында - 600 һумға, коллектив менән редакцияның үҙендә (кәмендә 5 дана) 372-шәр һумға яҙыла ала. Гәзитебеҙгә яҙылып, квитанцияларын редакцияға ебәргәндәр араһынан кемдәрҙер бүләккә бик шәп китаптар аласағы тураһында ла онотмағыҙ. Бергә булайыҡ!*

***МӨХӘРРИРИӘТ.***

ӘЙТЕР ҺҮҘЕМ БАР!

# АЙЫҒАБЫҘМЫ, ТИҺӘК...



**Ошо көндәрҙә Урал аръяғы районларының бер ауылында булырға тура килде. Был ауылда иң күп оҙон ғүмерле кешеләр йәшәй. Ауылдың йылғаһы бар, уның һыуын төрлө лабораторияларҙа тикшереү үткәреп, сифаты яғынан Башҡортостанда иң яҡшы һыу сығанаҡтарының береһе тип билдәләгәндәр. Тауҙар араһында урынлашҡан был ауылдан күп кенә юғары белемле белгестәр, ғалимдар, профессорҙар сыҡҡан, унда йәшәүсе кешеләр бик эшсән һәм уңғандар, шәхси хужалыҡтарында тырышып эшләйҙәр, күбеһенсә мал аҫрау менән шөғөлләнәләр.**

Шулай ауылда йөрөп ятҡанда күптәнге дуҫымды осраттым, зыяратҡа, ҡәбер ҡаҙырға китергә йыйыналар ине. Ул әсенеп һөйләп алды: "Беҙҙең ауылды ла, башҡа күп ауылдарҙағы кеүек, эскелек баҫты. Бөтөн булған үлем хәлдәре тап ана шул сәбәптән. Бына быйыл ғына егермеләгән кеше яҡты донъя менән хушлашты", - тип һанап китте ул. "Ниндәй сәбәп табып эсәләр һуң?" - тип һорай ҡуйҙым. "Һәййй... Сәбәп кәрәкме ни уның өсөн! Бына әле бесән әҙерләп бөттөләр, шуның ҡыуанысынан ярты ауыл эсә..."

Ә бит уйлап ҡараһаң, сағыштырмаса алдынғы, билдәле генә ауыл. Әммә дуҫымдың һөйләүе буйынса, был афәт бөтөн ауылды тиерлек баҫып алған. Уйланырға урын бар. Ҡотолоу юлдарын эҙләп ҡарарға кәрәк. Булырға тейеш ундай юл, һис шикһеҙ, булырға тейеш. Бына, мәҫәлән, бында мәсет бар, диндә булған, намаҙға баҫҡан кешеләр был үлемесле яман ғәҙәттән үҙҙәре ҡотолоп ҡалған бит. Улар ҙа эскелеккә ҡаршы вәғәздәрен мөмкин булған һәр ерҙә һөйләп, аңлата йөрөй ала.

Тыйыу һәм штраф ысулдарынан, билдәле, бер ниндәй ҙә фәтүә булмаясаҡ. Бер генә ысул, сәләмәт йәшәү рәүеше - спорт уйындары һәм физкультураға ылыҡтырыу юлы ғына ҡала. Элегерәк ауылдарҙа волейбол, футбол майҙансыҡтары була торғайны. Кистәрен шунда бик күп халыҡ йыйылыр ине. Ауылдарҙа ла заманса йыһазландырылған спорт майҙансыҡтары булдырырға кәрәк, тип уйлайым. Ул парк рәүешендә лә эшләнгән булырға мөмкин. Уртала волейбол йә хоккей ҡумтаһы, теннис өҫтәле, шулай уҡ шахмат-шашка уйнау урындары булдырып, майҙан ситенән йүгереү өсөн һуҡмаҡ һалырға була. Ҡыҫҡаһы, быны асыҡ һауалағы клуб тиергә лә мөмкин, тик ул саҡта йәштәргә бейеү өсөн майҙансыҡ та кәрәк булыр ине, тием. Был ауыл халҡының яратҡан урынына әйләнергә тейеш. Мотлак асфальтланған йүгереү, велосипедта йөрөү юлдары булырға тейеш. Әлбиттә, заманса мускул үҫтереү ҡорамалдары ла артыҡ булмаҫ ине.

Ауылдарҙа хәҙер хәлле, бай кешеләр ҙә юҡ түгел. Улар ҙа, моғайын, ярҙам итеүҙән, баш тартмаҫ ине. Аллаға шөкөр, халыҡ та бөтөнләй үк аҡсаһыҙ түгел. Аңлатыу кәрәк буласаҡ инде. Был эште, әйткәндәй, ауыл хакимиәте башлап йөрөргә тейеш, әлбиттә. Минеңсә, ошо ысул менән халыҡтың байтағын айыҡтырыу яғына ауҙарырға булыр ине. Кешеләргә бөгөн йәнле аралашыу етмәй. Күмәкләшеп, өймәкләшеп эсеп йөрөү ана шул аралашыу булмағандың көнөнән бит инде, тик бындай аралашыуҙан йолоп ҡалырға кәрәк ине уларҙы, сөнки бының ахыры фажиғәгә генә илтәсәген беләбеҙ. Ни булһа ла, айыҡлыҡ өсөн көрәшергә кәрәк. Хәҙер илдә ирекмәндәр хәрәкәте алға сыҡты, ауыл ерендә лә унлап кешенән торған шундай уҡ төркөмдәр ойоштороу ҡамасауламаҫ ине. Әлбиттә, йәмәғәтселек, ауыл советы депутаттары менән бергәләп, күмәкләп ултырып уйлашыу кәрәк.

**Фәтих ҒИМРАНОВ.**
**Ҡырмыҫҡалы районы.**

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# БАШҠОРТ ТЕЛЕ УҠЫТЫУСЫҺЫ...

## Рәсәй конкурсы еңеүсеһе



**Ошо көндәрҙә Ставрополь крайында уҙғарылған "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы-2022" Бөтә Рәсәй конкурсын тотош ил ҡыҙыҡһынып күҙәтте. Тәүге тапҡыр үткәрелгән был ярышта Рәсәйҙең 68 субъектынан утыҙҙан ашыу төр телде йөш быуынға туған тел буларак өйрәтеүсе 69 уҡытыусы ҡатнашты. Башҡортостан данын яҡлаған Өфө ҡалаһының 107-се лицейы башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Мирас Ишдәүләтов "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында еңеү яулаНы һәм конкурста маҡтаулы бишенсе урынды алды. Конкурс барышы һәм һөҙөмтәләре тураһында педагогтың үҙенән һораштыҡ.**

(Дауамы 5-се биттә).

@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

12+

✓ ***Был "алтын стандарт" тип аталған программаларҙы РФ Мәғариф министрлығы 1 ғинуарға тиклем эшләргә һәм раҫларға, ә киләһе уҡыу йылынан барлыҡ мәктәптәр улар буйынса уҡый башларға тейеш.***



*ИШАРА*

# РӘХМӘТЛЕ БУЛА БЕЛМӘЙБЕҘ...



**Беҙ балалар йортонда үҫкән һуғыш осоро етемдәре. Мин ауылда йәшәгән сағымды, өйөмдө хәтерләмәйем. Берҙән-бер хәтирәм шул: тоноҡ тәҙрә быялаһында эленеп торған бәләкәй генә һауа бөртөгөн алам тип тырнап та, һуҡҡылап та, ялап та ҡарауым. Алып булманы ул бөртөктө. Һауа бөртөгөмө, һыу бөртөгө ине микән ул, тик хәҙер күҙ йәше бөртөгөләй иҫкә төшә. Кипмәй ҙә, ағып та төшмәй, юйылмай ҙа...**

Үҙ аңым менән донъяны ҡабул иткәндә балалар йортонда үҫә инем инде. Беҙҙе Бөрйәндән Өфөгә алып килделәр. Беҙҙең эргәгә алып килгән һәр баланы ҡыҙыҡһынып күҙәтә торғайным. Иң тәүҙә Роза исемле ҡыҙыҡайҙы килтереп ҡалдырып киттеләр. Ул тәҙрәнән урамға ҡарап: "Мама, мама!" - тип ҡысҡырып иланы. Балалар Розаны аптырап күҙәтте. Беҙҙең арала быға тиклем илаҡ балалар булмағайны шул.

Күпмелер ваҡыт үтте. Бер көндө "Бәләкәй баҡсала" уйнап йөрөгәндә Фаина исемле ҡыҙыҡайҙы алып килделәр. Роза менән мин уның янына йүгерҙек. Фаина эскәмйәгә ултырҙы. Беҙ йылмайышып ике яҡлап уның янына ултырҙыҡ. Фаина эскәмйәгә менеп баҫты. Беҙ ҙә менеп баҫтыҡ. Ул һикереп төшкәйне, беҙ ҙә һикереп төштөк. Ерән сәсле, түп-түңәрәк һипкелле битле Фаинаны "Илап ҡуймаһын!" тип ҡурсалап ҡына йөрөттөк. Ә һуңынан, мәктәп йылдарында, Санияны алып килделәр. Ул, бәлки, төндәрен илағандыр ҙа, әммә көндөҙ бойоғоп йөрөмәне. Сөнки ФЗУ-ла уҡып йөрөгән ағаһы йыш килә ине. Ағаһы, моғайын, Санияға "Ныҡ бул, бирешмә!" тип өйрәтәлер, тип уйланым. Аҙаҡ беҙгә Надя, Катя исемле ҡыҙҙарҙы алып килделәр. Уларҙың да илап ултырғанын күрмәнем. Беҙ, һуғыш осоро балалары, тормошто нисек бар, шул көйө тыныс ҡабул иттек. Беҙҙең арала һәр саҡ изгелекле мөнәсәбәт булыуы иҫемдә ҡалған.

Йылдар ашығып үттеләр, мәктәпте тамамлап, төрлө яҡтарға таралыштыҡ. Күпмелер йылдар үткәс, бер саҡ балалар йортоноң юбилейында осраштыҡ. Мине аптыратҡаны шул булды: бергә үҫкән, бергә уҡыған һабаҡташтарым араһында Сания менән мин генә башҡорт балаһы икәнбеҙ ҙә. Сания - Сибайҙан, ә мин - Бөрйәндән. Ҡалғандары йә сыуаш, йә мари, йә рус, йә татар. Балалар йортонда тәрбиәләнгәндә барыбыҙ ҙа башҡортса һөйләштек, башҡорт телендә уҡып белем алдыҡ, шуға ла кемдең ниндәй милләт балаһы икәнен дә айырмағанбыҙ. Ә осрашыуға килгәс, уларҙың береһе лә башҡортса һөйләшмәгәнен шәйләп ҡалдым. Башҡортса өндәшәм, әммә береһе лә миңә башҡортса яуап бирмәй. Һәм күңелем кителеп: "Йәмәғәт, башҡорт илендә йәшәйһегеҙ, башҡорт телен һәйбәт беләһегеҙ, ә ниңә башҡортса һөйләшмәйһегеҙ?" - тип әйтмәй булдыра алманым. Минең һүҙҙәремә ҡаршы яуап таба алманылар. Ә минең башыма: "Юҡҡа ғына халыҡ "Бүре балаһын бүреккә һалһаң да урманға ҡарай" тип әйтмәгәндер", - тигән уй килде...

Ә шулай ҙа мин рус йә татар телендә һөйләшеүгә күскән һабаҡташтарым урынында булһам, "Беҙҙе үҫтергән, тәрбиәләгән, белем биргән башҡорт теленә һәм еренә рәхмәт!" тигән һүҙҙәрҙе булһа ла әйтер инем. Рәхмәтле булыу етешмәй шул кешеләргә.

**Фәүзиә ЯХИНА.**

*КӨНАУАЗ*

# БЕР ӘСБАП,

## берҙәм программа буйынса уҡыясаҡтар



**Белем биреү программалары берҙәм буласаҡ. РФ Дәүләт Думаһы шундай ҡанун ҡабул итте. Был "алтын стандарт" тип аталған программаларҙы РФ Мәғариф министрлығы 1 ғинуарға тиклем эшләргә һәм раҫларға, ә киләһе уҡыу йылынан барлыҡ мәктәптәр улар буйынса уҡый башларға тейеш. Программаларҙы эшләгәндә төбәк, милли һәм этномәҙәни үҙенсәлектәр иҫәпкә алынасаҡ һәм бының өсөн төбәк властары ылыҡтырыласаҡ.**

Бынан тыш, дәреслектәр эшләүҙең яңы тәртибе булдырыласаҡ, йәғни дәреслектәр һәм уҡыу әсбаптарын Мәғариф министрлығы сығарасаҡ, ведомство шулай уҡ авторҙар коллективын раҫлаясаҡ. Федераль дөйөм белем биреү программалары барлыҡ предметтар буйынса эшләнәсәк, әммә уларҙың ҡайһы берҙәре мотлаҡ буласаҡ, мәҫәлән, башланғыс мәктәптә рус теле һәм тирә-яҡ мөхит, урта звенола - рус теле, рус әҙәбиәте, тарих, йәмғиәтте өйрәнеү, география һәм тормош хәүефһеҙлеге нигеҙҙәре. Шулай уҡ федераль эш программаһы һәм тәрбиә эше буйынса федераль календарь план да мотлаҡ буласаҡ.

**Темаға аңлатма:**

***Эльвира АЙЫТҠОЛОВА, РФ Дәүләт Думаһы депутаты, мәғариф буйынса комитет ағзаһы:*** Берҙәм программа булыуы бик уңайлы, сөнки бала ниндәй мәктәптә уҡыһа ла, шул уҡ рус телеме, математика, тирә-яҡ мөхитте өйрәнеүме, башҡа предметтармы - улар барыһына ла бер программа, бер

*МӘҠӘЛ НИ ТИ?*

# КЕШЕ АТЫНА МЕНГӘН...

## тиҙ төшөр



**Был әйтемдә һүҙ, ысынлап та, сит кеше атына менеү хаҡында барамы, әллә башҡа төрлө ярамаған ғәмәл башҡарыу тураһындамы? Ғөмүмән, "кеше атына менеү" һүҙбәйләнешен нисек аңларға була һуң? Бында дүрт аяҡлы атҡа менеү генә күҙ уңында тотоламы? Ошо хаҡта ентекләберәк фекер йөрөтөп ҡарайыҡ.**

Ленин исемендәге колхоздың беҙҙең 4-се һанлы Буранбай ауылы бригадаһында оҙаҡ йылдар һуғыш һәм хеҙмәт ветераны Мәһәҙей олатай Ҡотоев (йәш йырсылар Марсель һәм Нух Ҡотоевтарҙың ҡартатаһы) бригадир булып эшләне. Унан һуң бригадир дилбегәһен атайым үҙ ҡулына алды. Йола буйынса яңы бригадирға хужалыҡ дилбегәһе генә түгел, хужаның төп транспорты булған екке атының да дилбегәһе, арбасанаһы, ҡамыт-ыңғырсағы күсә. Тап ошо көндәрҙә беҙ, яңы бригадир балалары, бер башҡа үҫеп киткән һымаҡ булдыҡ. Шулай булмай һуң: ауылыбыҙҙың ғына түгел, беҙҙең төбәктә йәшәүсе һәммә йәше-ҡартының күҙе ҡыҙып, көнләшеүҙән эсе янған туры юрға хәҙер беҙҙең ихатаға боролоп инә бит. Ғорурлығы ни тора! Башҡорт тоҡомло аттар үҙенең бауыр аҫтынан ғына булған был мөһабәт туры юрғаны ҡайҙандыр ситтән, Дон яғынанмы, Орел яғынанмы ҙур хаҡҡа һатып алып килтергәйнеләр.

Беҙҙең кеүек танау аҫты кипмәгән малайҙар өсөн туры юрға, үәт, ат ине, исмаһам! Аттың да ниндәйе бит әле! Үҙен ҡыш санаға, йәй арбаға егеп алаһың да, дилбегәне бер генә ҡағыуың була, доҡойтоп сығып та китә. Туры юрға егелгән арба ауылдың башҡа барлыҡ ат-арбаларын ғына түгел, машина-тракторҙарын да үтеп китә, үҙебеҙсә әйткәндә, "тапап" үтә хатта. Соҡор-һарҡыуҙар ҙа, һикертмәләр ҙә юҡ уның өсөн, һәр урында ла бер тигеҙ юрта ғына бирә. Юрғаның һыбай йөрөүҙәге бер уңайһыҙлығы бар: ул да булһа, яйҙаҡ атланып алдыңмы, осаңдың йәне ҡалмай, шуға күрә юрғаларға эйәр һалып менеп, өҙәңгеһенә баҫып, эйәр ҡашағаһына тотоноп, баҫып ҡына йөрөйһөң. Әгәр ҙә дилбегәне йомшағыраҡ ҡуллы берәрһе, бигерәк тә ҡатын-ҡыҙ тотһа, туры юрға менән йөрөү оло хәүефкә әүерелә.

Бер мәл турыны егеп, урманға бесәнгә барҙыҡ. Ҡайтыр саҡ еткәс, атайыбыҙ арбаға бесән, башҡа әйберҙәр һалып, дилбегә артына әсәйебеҙҙең бер үҙен ултыртып, ауылға ҡайтарып ебәрҙе. Беҙ атайҙың мотоциклына ултырып, һуңғараҡ ҡайттыҡ. Өйгә ҡайты-

**Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?**

✓Махсус операцияла һәләк булған ирекмәндәрҙең ғаилә ағзалары 2 миллион һум күләмендә төбәк түләүҙәре алырға мөмкин. Хөкүмәттең "Һәләк булған (үлгән) хәрбиҙәрҙең ғаилә ағзаларына бер тапҡыр бирелә торған матди ярҙам тәғәйенләү һәм түләү тәртибенә үҙгәрештәр индереү тураһында" ҡарар проекты йәмәғәтселек тикшереүенә сығарылды. Документ буйынса тәҡдимдәрҙе 19 сентябргә тиклем ебәрергә була, тип хәбәр итәлә Башҡортостандың Хеҙмәт министрлығы сайтында.

✓Яҡын арала республикала махсус хәрби операция геройҙарына арналған һәйкәл тураһында фекер алышыу башлана. Был хаҡта Башҡортостан Башлығы Хакимиәте етәксеһенең беренсе урынбаҫары Урал Килсенбаев хәбәр итте. Әле һәйкәл өсөн майҙансыҡ һайлау эштәре башланырға тора. Һәйкәл Өфөлә урынлашыр, моғайын, шуға күрә ҡала халҡының фекере ҙур әһәмиәткә эйә. Тиҙҙән скульпторҙар араһында конкурс иғлан ителергә тейеш. Башҡортостан Республикаһы Башлығы Хакимиәте етәксеһе урынбаҫары Урал Килсенбаев халыҡтар дуҫлығы идеяһы менән һуғарылған скульптура булдырыу тәҡдимен хуплауын белдерҙе.

✓2022 йылда Башҡортостан Ростуризмдан 552 млн һум ярҙам алған. Был турала Республика менән идара итеү үҙәгендә төбәктә туризмды үҫтереүгә арналған кәңәшмә барышында Башҡортостандың Башлығы Радий Хәбиров хәбәр итте. "Республикала туризмды үҫтереүгә һеҙҙең менән бергә шарттар булдырабыҙ. Был иҡтисадыбыҙҙың мөһим тармағы", - тип билдәләне етәксе.

✓Башҡортостанда йыл аҙағына тиклем халыҡ сәнғәте кәсептәренә ярҙамға 10 млн һум тирәһе аҡса йүнәлтелә. Был турала республика Финанс министрлығына һылтанма менән Хөкүмәттең матбуғат үҙәгенән хәбәр иттеләр. Аҡса һөнәрселек һәм халыҡ сәнғәте кәсептәре өлкәһендәге проекттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ субъекттары менән үҙмәшғүл граждандарға субсидия бүлеүгә, шулай уҡ Башҡортостан халыҡтарының Халыҡ сәнғәте кәсептәре үҙәктәре эшмәкәрлеген тәьмин итеүгә йүнәлтеләсәк. Уны кәрәкле ҡорамалдар, һөнәрселек изделиеларын эшләүгә сеймал һәм тотонолған материалдар алыуға сарыф итергә мөмкин. Әммә ярҙам алыусы етештереү һәм һатыу күләмен арттырырға тейеш.

✔ *Беҙҙең ил халҡына Европа прагматизмы, Америка индивидуализмы көсләп тағыла, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй, прагматизм милли рухты үлтерә, индивидуализм милләтте, кешелекте эске яҡтан тарҡата...*



үк әсбаптар буйынса алып барыласаҡ. Икенсенән, был финанс йәһәттән отошло, сөнки китаптар сығарыу арзанырак̒ка төшәсәк. Быға тиклем төрлө авторҙар коллективтары яҙған бер нисә төрлө китап булып, уларҙың һәр береһенә аҡса түләнә һәм был бик бәкәлгә һуға ине. Өсөнсөнән, берҙәм белем биреү мөхите тигән төшөнсә бар. Йәғни, әсбаптар ҙа бер төрлө булырға тейеш. Ә совет заманын алып ҡараһаҡ, Мәғариф министрлығы яҡынса белем биреү программаларын эшләй ине. Яҡынса булғас, һәр бер мәктәп, автономиялы булараҡ, һәр дәрес буйынса үҙенең ҡарарын ҡабул итте.

Тағы ла бер мөһим мәл: бөгөн контроль-баһалау материалдары (контрольно-измерительные материалы) - ОГЭ, ЕГЭ һорауҙары, йәғни элеккесә әйтһәк - билеттар, ошо программа нигеҙендә бер төрлө буласаҡ. Был бик мөһим, сөнки быға тиклем ЕГЭ, ОГЭ һорауҙары төрлө әсбаптар буйынса төҙөлөп, ҡайһы ваҡыт балалар уҡымаған китаптағы һорау эләгеүе мөмкин, йәғни ғәҙеллек юҡ ине.

Берҙәм китаптар тураһында һүҙ йөрөткәндә, улар нигеҙ стандарты булып тора, унда бирелгәндән кәмерәк уҡытырға ярамай. Ә бына уҡытыусы өҫтәп нимәлер өйрәтергә теләй, ваҡыты ҡала, балалар өлгөрә, хеҙмәт юлы осоронда барлыҡҡа килгән авторлыҡ методикалары бар икән, ул, әлбиттә, өҫтәп ошо үҙенең мәғлүмәтен бирә ала. Йәғни ижади ҡарашлы уҡытыусылар бер сиккә индерелмәй, уларға ижади эшләү өсөн мөмкинлек тә бирелә.

Туған телдәрҙе уҡытыуға килгәндә, комитет ултырышында министр урынбаҫарынан мин был мәсьәләне күтәреп, шәхсән һораным һәм бында бер ниндәй үҙгәрештәр булмаясаҡ, тигән яуап алдым. Туған телдәр бығаса нисек уҡытылып килгән, шулай ҡаласаҡ. Милли мәктәптәрҙә булған әсбаптар ҙа элек нисек булған, шулай уҡ төҙөләсәк. Әле, Аллаға шөкөр, был эш юлға һалынды, яйлап федераль исемлеккә индерелә башланылар. Был эш артабан да дауам итәсәк.

Мәғлүм булыуынса, белем биреү системаһында яңы ФГОС-тар ҡулланыла башланы. Республикала бер нисә милли ойошма БР Мәғариф министрлығына мөрәжәғәт итеп, алты варианттан, милли республика булараҡ, икенсе вариантты һайларға тәҡдим иттек. Башҡа варианттарҙа туған телдәр юҡ. Һәм туған тел мотлаҡ уҡытылырға тейешле предмет. Әммә уларҙың ҡайһыһын һайлауҙы ата-әсәләр хәл итә һәм уларҙың ғаризаһына ярашлы төркөмдәр туплана.

Ғөмүмән, был программаны бик ыңғай үҙгәреш тип һанайым, шуны ла әйтеп үтер инем: был уҡыу йылын беҙ бик уңышлы башлайбыҙ, сөнки тағы ике ҙур эш эшләнде. Беренсеһе, "РФ Мәғариф тураһында" федераль закондан "хеҙмәт күрһәтеү" тигән төшөнсәне алып ташланыҡ, һәм уҡытыусылар тултырған документтар һанын кәметеп, уларҙы 5 кенә итеп ҡалдырҙыҡ. Былар барыһы ла уҡытыусының тормошон еңеләйтеү маҡсатында эшләнгән аҙымдар.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ яҙып алды.**

уыбыҙға күҙебеҙ дүрт булды: әсәйебеҙҙең ҡото алынған, арбанан барлыҡ әйберҙәр төшөп ҡалған, хатта һыңар бөртөк бесән дә ҡалмаған. Туры юрға дилбегә артында гүзәл заттың ултырыуын тойған да, ауыҙлығын тешләп тороп алып, машина тиҙлегендә ауылға табан елдергән.

Бригадир еккеһе туры юрға хаҡында оҙон тәфсиргә төшөп яҙыуымдың әтнәкәһе шунда: беҙҙең ауылға, беҙҙең ерлеккә өйрәнә алманы ул сит мал. Әллә күпме арбабыҙҙы ҡыйратты, ҡамыт-ыңғырсаҡты эшлектән сығарҙы туры юрға. Уны бер мәл хаттта һабантуйҙа бәйгегә сығарып ҡараныҡ. Юҡ, тәүге әйләнешкә тиклем башҡа аттарҙы күпкә артта ҡалдырып юртып килде лә, һыртындағы малайға баш бирмәй, туранан-тураға елдерҙе туры юрға. Уны көтөүселәр ҙә көтөүгә менеп ҡараны. Ҡыҙыҡ итеп һөйләнеләр көтөүселәр. Туры юрғаны менеп сыҡтыңмы, көтөү ҡайғыһы китә, сөнки барлыҡ иғтибарыңды һәм иждиһатыңды туры юрғаның үҙенә бирергә кәрәк. Йә баш бирмәй, йә ҡасып китә, йә алып ҡаса, йә булмаһа, бер көн ныҡлы ҡулда тотоп көтөүҙә йөрөһәң, иртәгеһенә бөтөнләй йөрөргә эшкинмәй. Етмәһә, үҙенең буйы бейек булғас, атланыуы ҡыйын. Үҙенең һыртына тиҙ генә эйәр һуғып бара, арҡаһы әҙәм ҡарағыһыҙ булып сейләнеп бөтә. Мал ҡараусылар туры юрғаны ҡыш силос, сенаж, бесән ташыу өсөн дә егеп ҡараны. Кәүҙәһе ғифриттәй булһа ла, йөк тартыуға бөтөнләй яраҡһыҙ булып сыҡты туры юрға.

Беҙҙең башҡорт ысынбарлығы, ауыл тормошо өсөн яратылмағайны шул ул ат. Шуға күрәлерме, беҙ ул туры юрғаның мәнфәғәтен күрә алманыҡ, уға кем генә менмәһен, һыртынан тиҙ төштө, кем генә екмәһен, тиҙ туғарҙы. Ә бит ситтән ҡарап тороуға ниндәй күркәм, мөһабәт, һоҡланғыс, үҙенә ҡарап туйғыһыҙ мал ине туры юрға. Әкиәттәге арғымаҡ, дөлдөл кеүек үҙе, гүйә. Әммә туры юрға ситтән ҡарағанда ғына шулай күркәм һәм үҙенә ылыҡтырғыс ине. Ҡыҫҡаһы, хандар, батшалар кырандастарға егеп, юрғалатып, кәлеп һалып йөрөр өсөн генә яратылған туры юрға беҙҙең милли тормошто, йәшәү рәүешебеҙҙе ҡабул итә алманы. Һыйырға эйәр нисек килешмәһә, беҙҙең тормош туры юрғаға ла яраманы.

Уны иң тәүҙә ҡырға һыпырып ебәрҙеләр. Тибенгә өйрәнмәгән меҫкен мал Уралтауҙың ҡырыҫ тәбиғәтен бик ауыр кисерҙе, буғай. Һуңынан ҡороҡлап тотоп, үҙен Сибайҙағы ит комбинатына тапшырҙылар. Туры юрғаның тәржемәи хәле ҡыҫҡаса ошолай булды.

Юғарыла бригадир еккеһе туры юрға, мал хаҡында һүҙ барһа ла, уның хаҡында барған әңгәмәнән сығып, шундай фәлсәфәүи һығымталар яһарға булалыр:

- сит кеше атына менгән, ысынлап та, тиҙ төшә, сөнки һәр кемдең үҙ аты, үҙ хәрәкәт сараһы булыуы мөһим, кеше аты һинең көнкүрешеңә, йолаларыңа яраҡлашмаған һәм һабан һөрә торған ат менән бәйгелә сапмайҙар, йәки - киреһенсә;

- ат һүҙенең икенсе бер мәғәнәһе "исем"де аңлата, шуға күрә башҡа кеше өлгәшкән уңыш, хеҙмәт емеше менән оҙаҡ йәшәп булмай, һәр кешенең үҙ атына, үҙ исеменә бәйле үҙенсәлекле тормош үҙәне, яҙмышы бар, башҡа кешенең яҙмышы менән дә йәшәп булмай, һәр ваҡыт кеше елкәһендә йәшәү ҙә мөмкин түгел, ҡасан да булһа, үҙеңсә йәшәй башларға мәжбүр булаһың;

- беҙҙең ил халҡына Европа прагматизмы, Америка индивидуализмы көсләп тағыла, йәғни европалылар һәм американлылар беҙгә үҙҙәренең атын йәки йәшәү рәүешен тәҡдим итә, әммә беҙҙең тәбиғәт был нормаларҙы ҡабул итмәй, прагматизм милли рухты үлтерә, индивидуализм милләтте, кешелекте эске яҡтан тарҡата...

Донъяла глобалләшеү, милләттәр араһында интеграция барған ошо заманда был әйтем бигерәк актуаль булып ҡала. Заман һынауын үҙ аты, үҙ йәшәү рәүеше, йола-традициялары булған дәүләттәр һәм милләттәр генә имен-аман үтеп сыға аласаҡ. Беҙҙе архаиклыҡта йөҙ-мең тапҡыр ғәйепләһендәр, былар барыһы ла үҙ асылыбыҙҙы һаҡлап ҡалыу йәһәтенән эшләнә...

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

*ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!*



# ҮРМӘЛЕ БӘҮЕЛСӘК КӘРӘКМЕ?

**Мин һәләк ҡул эше менән булышырға яратам. Бәйләм, сигеү, тегеү, бисер менән үреү һәм башҡалар. Ҡул эше яратҡан мауығыуым булыу менән бер рәттән, ғаилә бюджетына килем килтереүсе сығанаҡ та.**

Бер ваҡыт халыҡ магазинда һатылған йылы ойоҡбаштарға күсеп алғайны, уның сифатһыҙ булыуын аңлап алғас, кире һарыҡ йөнөнән бәйләнгән ойоҡтарға күсте. Шуға күрә ваҡытым булғанда ҡулыма энә менән йомғағымды ала һалып, ойоҡтар һәм бейәләй-бирсәткәләр бәйләргә ултырам.

Милли кейемдәргә иғтибар артыу менән минә лә эш күбәйҙе. Районыбыҙҙың ҡатын-ҡыҙҙарына, мәктәп уҡыусыларына башҡорт милли кейемдәре тегәм. Шулай уҡ заказ биреүселәр ҙә етерлек.

Ә күптән түгел үҙем өсөн тағы ла бер килемле шөғөл таптым - гамак, үрмәле бәүелсәктәр эшләй башланым. Интернет заманында нимәнеңдер эшләү технологияһын табыу ҙа, кәрәкле материалдар алдырыу ҙа ауыр түгел, тик ваҡыт һәм теләк кәрәк.

Гамак һәм бәүелсәктәрҙе махсус, ныҡ бауҙан эшләйем, ул "гамаковый шнур" тип атала. Яҡшы сифатлы был бау ҡояшта уңмай, һыуҙан һәм һыуыҡтан ҡурҡмай. Өйҙә лә, тышта ла ҡулланырға була. Ҙур бәүелсәктәр һәм гамактар 150 килограмға тиклем ауырлыҡты күтәрә.

Был әйберҙәрҙе эшләү алымдары күп төрлө, мин макраме техникаһы менән үреп эшләйем. Ҡул был алымды белгәс, эшләүе еңел дә, тиҙ ҙә. Бауҙың бер төрлө генә төҫтәгеһенән дә эшләргә мөмкин, шулай уҡ сағыу итеп төрлө төҫтәге гамак һәм бәүелсәк үрергә була.

Гамак һәм бәүелсәктәргә өҫтәмә итеп бәләкәй мендәрҙәр ҙә тегәм. Улар өсөн мебель туҡымаһы ҡулланам, ә эсенә холофайбер тултырам.

Тулыһынса әҙер гамактарҙың һәм бәүелсәктәрҙең хаҡын ҙурлығына, күпме төҫлө бау ҡулланылғанлығына, мендәрҙең булыу-булмауына ҡарап төрлөсә ҡуям.

Ҡул эшен яратҡан һәм ваҡыты булғандар өсөн был килемле лә, күңелле лә шөғөл. Бигерәк тә оҙон ҡышҡы кистәрҙә ваҡыт үткәрергә лә ярап ҡала, килеме кеҫәне лә тишмәй.

**Мәликә АҪЫЛБАЕВА.**
**Өфө ҡалаһы.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔Башҡортостан Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Волга буйы федераль округы субъекттарының парламент етәкселәре медиарейтингында беренсе урынды алды. "Медиалогия"ның дөйөм Рәсәй рейтингында республика спикеры тәүге бишәү иҫәбенә инде. Тәүгеләр иҫәбендә төбәктәрҙең закон сығарыу йыйылыштары башлыҡтары Владимир Константинов (Ҡырым), Александр Бельский (Санкт-Петербург) һәм Игорь Брынцалов (Мәскәү өлкәһе) бар.

✔Башҡортостан шифаханалары 2022 йылда көҙгө туристик кешбэк программаһы буйынса турҙар һатыу буйынса Волга буйы федераль округында беренсе урынды биләй. Популярлыҡ буйынса тәүге бишәү иҫәбендә - Татарстан, Һамар, Ульяновск өлкәләре һәм Сыуашстан. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, кешбэклы турҙар 25 августан 10 сентябргә тиклем һатылды, ә сәйәхәткә 1 октябрҙән юлланырға мөмкин. Башҡортостан шифаханаларына юлламаның уртаса хаҡы - тәүлегенә 5120 һум.

✔РФ Президенты Владимир Путин 2 октябрҙе Урта һөнәри белем биреү көнө тип иғлан итеү тураһындағы документҡа ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, яңы байрам урта һөнәри белем биреүҙе үҫтереү һәм популярлаштырыуға йүнәлтелә. Айырым дата булдырыу тәҡдиме менән РФ Мәғрифәт министрлығы сыҡҡан. Буласаҡ һөнәр эйәләрен уҡытыуға күп көс һалған педагогтар, мастерҙарҙың абруйын күтәреү мөһим.

✔Сибай ҡалаһында сүп-сарҙы сорттарға айырыу комплексы булдырыу проекты ғәмәлгә ашырыла. Йылына 100 мең тонна самаһы ҡаты коммуналь ҡалдыҡ менән эшләйәсәктәр. Ҡорамалдар алынған, уларҙы бында килтереү менән ҡора башлаясаҡтар. Әле бинала ремонт эштәре бара. Әйткәндәй, комплекста 30 кешегә яңы эш урыны булдырыласаҡ. "Бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡ һәм шәхси башланғыстарға булышлыҡ итеү" милли проекты буйынса предприятие етәкселегенә субсидия алыуҙа ярҙам күрһәтелгән.

✔Яңы йыл байрамдары 2023 йылда туғыҙ көн - 31 декабрҙән 8 ғинуарға тиклем дауам итә, тип белдерҙе Рәсәйҙең Хеҙмәт министрлығы. "2022 йылдың 31 декабре шәмбегә тура килә, был көн дә ял була", - тиелә хәбәрҙә. Ведомствола 2023 йылдың 1 һәм 8 ғинуарындағы ял көндәрен 24 февралгә һәм 8 майға күсереү хаҡында ла белдерҙеләр.

ҠЫҪҠАСА

# "ОМИКРОН" КӨСӘЙӘ...

**Башҡортостандың Һаулыҡ һаҡлау министрлығы баш эпидемиологы Азат Мөхәмәтйәнов омикрон-штаммы йоҡтороусыларға элеккегә ҡарағанда оҙағыраҡ дауаланыу талап ителеүе хаҡында һөйләне.** "Ауырыу билдәләре шул уҡ: йүткертә, баш ауырта, тамаҡ ҡысыта, юғары температура. Әммә һуңғы арала "омикрон" тиҙ генә киткеһе килмәй. Яңынан алынған ПЦР-тестарҙың һөҙөмтәһе ыңғай, беҙ ауырыуҙарҙы вирусҡа ҡаршы дауалауҙы дауам итәбеҙ", - ти Азат Мөхәмәтйәнов. Роспотребнадзорҙың Башҡортостан буйынса эпидемиология күҙәтеүе һәм территорияларҙы санитария һаҡлау начальнигы урынбаҫары Лира Фәрүәзова әйтеүенсә, тимәк, вирус тамаҡта булғанда уның тирә-яҡ өсөн хәүефе оҙағыраҡ дауам итә. Сир башҡа ағзаларға күсеү менән ул бүтәндәр өсөн бик үк ҡурҡыныс түгел. Әммә барыбер үҙебеҙҙе һаҡларға кәрәк. Роспотребнадзорҙың төбәк етәксеһе Анна Казак фекеренсә, әлегә республикала битлек режимын индереүгә сәбәп юҡ. Шулай ҙа кеше күпләп йыйылған урында, һатыусыларға, провизорҙарға, дауахана, поликлиника хеҙмәткәрҙәренә кейергә тәҡдим ителә.

✓ **Башҡортостанда ауыл магазины төҙөү өсөн ерҙе сауҙалашыуыҙ һатып алырға мөмкин. Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы парламентарийҙары тейешле закон ҡабул итергә йыйына.** Республика Ҡоролтайы рәйесе Константин Толкачев белдереүенсә, һүҙ бында 5 меңдән аҙыраҡ кеше йәшәгән тораҡ пункттарҙа сауҙа һәм көнкүреш хеҙмәте объекттары хаҡында бара. "Хәҙер Башҡортостанда стационар сауҙа объекттары бөтөнләй булмаған 1800 тораҡ пункт иҫәпләнә, йәғни 118 меңдән ашыу кешенең уңайлы ваҡытта кәрәкле тауар һәм аҙыҡ-түлек һатып алыу мөмкинлеге юҡ. Ауыл үҫеһен, халыҡ ҡалаға күсеп китмәһен өсөн уларға уңайлы шарттар булдырыу зарур. Магазиндар һәм көнкүреш нөктәләре - төп кәрәкле инфраструктура. Закон проекты эшҡыуарҙарға яңы биләмәләргә инеүҙе еңеләйтә һәм ошо мәсьәләне хәл итеүгә булышлыҡ күрһәтә", - тине Константин Толкачев. Район административ үҙәктәре өсөн элекке шарттар һаҡлана.

✓ **Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор идаралығында эсәр һыуҙың гигиена талаптарына яуап бирмәгән районлар атап кителде.** Мәҫәлән, Раевка ауылының Яңауыл биҫтәһендә (Медиктар урамы, 39"б") эсәр һыуҙың ҡатылығы норманан 1,66 тапҡырға артыҡ булыуы, Благовар районы Языково ауылында (Ленин ур., 145) - 1,51, Ҡырмыҫҡалы ауылының Хоҙайбирҙин - Баҡса урамдары киҫелешендә - 1,17, Дәүләкәндә (Өфө урамы, 15) - 1,53, Мишкә район үҙәгендә (Казаков ур., 23) - 1,97, Шишмә ҡасабаһында (Йылға урамы, 20) - 1,7 тапҡырға артыҡ. Сульфаттар буйынса норманан артыҡ күрһәткестәр Дәүләкәндә (Өфө урамы,15) - 1,26, дөйөм минераллаштырыу буйынса Әлшәй районы Раевка ауылында - 1,05 тапҡыр, нитраттар буйынса Дәүләкәндә - 1,35, литий буйынса Мишкәлә - 4 тапҡыр артыҡ. Ә бына микробиологик һәм паразитологик күрһәткестәр буйынса гигиена нормативтарына тап килмәгән осраҡтар булмаған, тип хәбәр итә Башҡортостан буйынса Роспотребнадзор.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# КЕМДӘР САҠЫРЫЛА?



**21 сентябрҙән Рәсәй Федерацияһында өлөшләтә мобилизация иғлан ителде. Уға ярашлы, хәрби хеҙмәткә запаста тороусылар һәм, тәү сиратта, Ҡораллы Көстәр сафында хеҙмәт үтеүселәр, билдәле хәрби-иҫәп һөнәренә һәм тейешле тәжрибәгә эйә булыусылар алына.**

Хәрби хеҙмәткә саҡырылыусылар тәүҙә мотлаҡ өҫтәмә хәрби әҙерлек үтәсәк. Уларға "контракт буйынса хеҙмәт иткән хәрби" тигән статус бирелә һәм тейешле күләмдә аҡса түләнәсәк. Бынан алда төҙөлгән контракттар ҙа ғәмәлдә ҡала.

Өлөшләтә мобилизация осоронда контракт буйынса хеҙмәт иткән йәки мобилизацияланған граждандар сикке йәшкә етеү, һаулыҡ торошо буйынса йәки судтың иректән мәхрүм итеү формаһында яза тәғәйенләү тураһында ҡарары үҙ көсөнә инеүгә бәйле хәрби хеҙмәттән китергә мөмкин.

Рәсәй Федерацияһы Хөкүмәтенә өлөшләтә мобилизация үткәреү буйынса сараларҙы финанслауҙы тормошҡа ашырыу бурысы йөкмәтелде. Ил субъекттары башлыҡтары граждандарҙы Рәсәй Федерацияһының һәр субъекты өсөн Оборона министрлығы билдәләгән һанда һәм ваҡытта мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырыуҙы тәьмин итергә тейеш.

Оборона предприятиеларының матди, ресурс, финанс тәьминәт мәсьәләләре кисекмәҫтән хәл ителергә тейеш. Оборона предприятиеларында эшләгән граждандарға (был ойошмаларҙа эшләгән осорҙа) мобилизация буйынса хәрби хеҙмәткә саҡырылыуҙы кисектереү хоҡуғы бирелә.

Ил Президенты Владимир Путин билдәләүенсә, Рәсәй Луганск һәм Донецк халыҡ республикаларында, шулай уҡ Украинаның Херсон һәм Запорожье өлкәләрендә референдумдарҙы хәүефһеҙ үткәреү өсөн мөмкин булғандың барыһын да эшләйәсәк. Шулай уҡ был аҙым илебеҙҙең суверенитетын, хәүефһеҙлеген һәм территориаль бөтөнлөгөн һаҡлау өсөн кәрәк.

# БЕРҘӘМЛЕК ҺАҠЛАНҺЫН!

**Ошо көндәрҙә "Берҙәм Рәсәй"ҙең төбәк бүлексәһе ағзалары сәйәси советтың киңәйтелгән ултырышында ҡатнашып, алдағы эш планын тикшерҙе. Унда республика Башлығы Радий Хәбиров та ҡатнашты.**

Радий Фәрит улы республикала махсус хәрби операция геройҙарына халыҡтар дуҫлығы идеяһын сағылдырған һәйкәл асырға тигән тәҡдим менән сығыш яһаны. Бөйөк Ватан һуғышы осоронда ла төрлө милләт вәкилдәре тыуған илебеҙҙе дошмандан һаҡлаған, хәҙер ҙә шулай, тине Радий Хәбиров. "Беҙгә яуға киткән һәм махсус хәрби операция барышында һәләк булған егеттәрҙең иҫтәлеген мәңгеләштереү тураһында уйларға, һәйкәлдә халыҡтар дуҫлығы идеяһы менән һуғарырға кәрәк. Бөйөк Ватан һуғышындағы кеүек", - тип билдәләне Башҡортостан Башлығы.

"Берҙәм Рәсәй"ҙең киңәйтелгән ултырышында махсус хәрби операция геройҙарына һәйкәл ҡуйыуҙы осраҡлы ғына тикшермәнеләр. Партия халыҡтың тарихи хәтерен һаҡлауға йүнәлтелгән проекттарҙы хуплай. Республика ата-бабаларыбыҙҙың ҡаһарманлығы тураһында хәтерҙе ҡәҙерләп һаҡлай. 11 октябрҙә генерал Шаймуратов һәйкәлен асыу ҙа шуға дәлил. Был Башҡортостан өсөн генә түгел, илебеҙ өсөн дә мөһим ижтимағи-сәйәси ваҡиға. "Республика халҡының кәйефен күтәреү - партия вәкилдәренең бурысы, - тине Радий Хәбиров. - Улар махсус хәрби операцияның маҡсаттары һәм бурыстары тураһында халыҡҡа аңлатыу эштәре алып барырға, хәрбиҙәрҙең ғаиләләренә ярҙам күрһәтергә, халыҡтың берҙәмлеге тураһында хәстәрлек күрергә тейеш. Маҡсатыбыҙ - татыулыҡты һәм сәйәси берҙәмлекте һаҡлап ҡалыу", - тип билдәләне Радий Хәбиров.

Көн тәртибендәге икенсе мөһим мәсьәлә - Башҡортостанда 2023 йылдағы һайлауға әҙерлек. Һайлаусыларға алдағы биш йылға Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай составын һәм урындағы үҙидара органдарында депутаттар корпусын билдәләргә кәрәк. 2024 йылда Башҡортостан етәксеһен һәм ил халҡы менән Рәсәй Президентын һайлау тора. Башҡортостан Башлығы сәйәси советта һайлау кампанияһына старт бирҙе, һайлау алды штабын булдырырға ҡушты.

# ӨЛКӘН ЙӘШТӘ ЛӘ...



**Башҡортостан Хөкүмәте оло быуын вәкилдәренә танып-белеү программаларында, физкультура-һауыҡтырыу һәм ял сараларында ҡатнашыу өсөн сертификат биреүҙе ойоштороу тәртибен раҫланы. Уның төп маҡсаты - өлкән йәштәгеләрҙең мөмкинлеген киңәйтеү.**

Республика Хөкүмәте ҡарарында билдәләнгәнсә, раҫланған тәртип даими нигеҙҙә бойомға ашырыласаҡ һәм оло быуын вәкилдәренең йәшәү сифатын күтәреүгә, уларҙы интеллектуаль яҡтан үҫтереүгә, мөмкинлектәрен киңәйтеүгә булышлыҡ итәсәк. Шулай уҡ ойошмаларҙың, шул иҫәптән социаль йүнәлешле коммерция булмағандарының да эшен көйләйәсәк.

Сертификат - ул хеҙмәт күрһәтеүсегә бирелгән документ. Уның номиналы 2 мең һум тора. Ул ҡиммәтле ҡағыҙҙар рәтенә инмәй һәм уны башҡа кешегә биреп булмай. Сертификатты гражданин 30 ноябргә тиклем үҙе һайлаған сараға тотонорға тейеш, тип аңлатыла ҡарарҙа. Уның үҙенең уникаль номеры була, республика халыҡты социаль яҡлау үҙәге тарафынан бирелә. Үҙәк филиалдары танып-белеү программаһында һауыҡтырыу һәм ял сараларында ҡатнашырға теләгәндәрҙе сиратҡа ҡуя. Танып-белеү программаһы иҫәбенә һанлы белем нигеҙҙәренә, компьютерға, инглиз теленә, хоҡуҡи һәм финанс грамотаһына, күп фатирлы йорт менән идара итергә өйрәтеү инә. Физкультура-һауыҡтырыу саралары аква-аэробиканы, йоганы, хәтерҙе яҡшыртыу, дауалау гимнастикаһын, бейеү һәм башҡа күнекмәләрҙе үҙ эсенә ала. Ә ял сараларына биҙәү-ғәмәли сәнғәт, парикмахер һөнәре, визаж, интерьер дизайны, кулинария һәм уның буйынса оҫталыҡ дәресе инә.

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфөлә трамвайҙа һәм троллейбуста юл йөрөү ҡиммәтләнде, тип хәбәр иттеләр "Башинформ"ға транспорт инфраструктураһы идаралығынан. Трамвайҙа, троллейбуста ҡулаҡса йәки банк картаһы менән йөрөү хәҙер өфөләргә 25 һум урынына 30 һумға төшә. "Алға" транспорт картаһы буйынса юл хаҡы 22 һум урынына 25 һум тора. "Алға" ҡушымтаһы булған уҡыусылар картаһы менән иһә 15 һум.

✓"Өфө" индустриаль паркы территорияһында "Амкодор" Беларусь компанияһының игенде урғандан һуң эшкәртеү өсөн машиналар һәм ҡорамалдар етештереү заводын төҙөүгә капсула һалынды. Бынын өсөн 2,5 млрд һум аҡса йүнәлтеләсәк, шуның 1,25 млрд һумын Башҡортостан бүлә. 200 белгескә яңы эш урыны булдырған заводты 2023 йылда асырға ниәтләйҙәр. Ул индустриаль паркта 6,4 гектар ерҙә урынлашасаҡ. Шулай уҡ "Амкодор" холдингы Өфөнөң Октябрь районында төрлө техниканы хеҙмәтләндереү үҙәгенә инвестицияға 105 млн һум бүлергә уйлай, был 25 яңы эш урынын тәьмин итәсәк.

✓Республикала ике күп балалы әсәгә - Регина Кәлимуллина һәм Марина Сатволдиеваға "Бала табыу йортона тоғролоҡ өсөн" миҙалы тапшырылды. Уларҙың икеһенең дә сабыйҙары 3-сө бала табыу йортонда донъяға килгән. Медицина учреждениеһындағы әлеге күркәм йола бер нисә йыл йәшәп килә. Миҙалдар тапшырыу тантанаһына Башҡортостанда Бала хоҡуҡтары буйынса вәкил Ольга Панчихина һәм "Башҡортостан Республикаһы әсәләре" йәмәғәт ойошмаһының күҙәтеү советы рәйесе Диана Фарахова ла килгәйне.

✓Башҡортостанда ҡайһы бер ҡала яңы автобустарында юл хаҡы артҡан. Өфөлә (110/110-сы, 101-се, 109-сы, 111/111к, 113/113к, 122-се, 123-сө, 124-се, 125-се, 164/164т һәм башҡа), шулай уҡ Баймаҡта, Бәләбәйҙә, Бөрөлә, Дүртөйлөлә, Красноусолда, Мәсәғүттә, Нефтекамала, Октябрьскийҙа, Салауатта, Сибайҙа һәм Туймазыла маршруттарға хаҡ үҙгәргән. Мәҫәлән, хәҙер ВАЗ автоүҙәгенән баш ҡала аэропортына тиклем юл хаҡы ҡулаҡса менән иҫәпләшкәндә 65 һумға, ә "Алға" картаһы буйынса 54 һумға төшә, ә Ҡала мәҙәниәт һарайынан Таптыҡ ауылына 97 йәки 81 һумға барып етергә мөмкин.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

*✓ Бына шулай, туған тел уҡытыусыларын үҙ ҡаҙанында ҡайнауҙан арындырып, юғарыраҡ маҡсаттарға ынтылырға, һөнәри үҫешкә әйҙәргә һәм бөтә Рәсәй кимәлендә фекерҙәштәр табырға ярҙам иткән конкурс булды был.*



ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!



# БАШҠОРТ ТЕЛЕ УҠЫТЫУСЫҺЫ...

## Рәсәй конкурсы еңеүсеһе

**(Башы 1-се биттә).**

- Рәсәй халыҡтары телдәрен, уларҙың мәҙәниәттәрен иғтибар үҙәгенә алған бик үҙенсәлекле һәм сағыу конкурс үтте. Унда 68 төбәктән йыйылған һәр туған тел уҡытыусыһы үҙенең милли кейемендә килгәйне һәм шундай күҙҙең яуын алырлыҡ күренеш булды был. Тағы ла ҡатнашыусыларҙың ярыш сәме менән яныуына ҡарамаҫтан, бер-береһенә илтифатлы мөнәсәбәттә булыуы күңелгә ятты. Коллегалар менән ихлас аралаштыҡ, бер-беребеҙ өсөн янып-көйөп торҙоҡ, дәртләндереү һүҙҙәре йәлләмәнек. Ә бит башта килгән 69 конкурсант араһынан "Методик оҫтахана" һәм "Асыҡ дәрес" һынауҙарынан һуң ни бары ун етебеҙ генә киләһе турҙа ҡатнашыу хоҡуғын алды. Ә инде "Класс сәғәте"н күрһәткәндән һуң, финалға 6 кеше үттек һәм "Оҫталыҡ дәресе" бирҙек. Баһалама ағзалары тарафынан һөнәри оҫталығым юғары баһаланыуына сикһеҙ шатмын һәм мине конкурс дауамында күтәрмәләп торған коллегаларыма, айырыуса "Тамашасы һөйөүе" номинацияһында еңеү яуларға ярҙам иткән Башҡортостан халҡына рәхмәтлемен. Берҙәм һәм дәррәү булыуыбыҙ менән алдырҙыҡ, быны күреү ҡыуаныслы.

Ә инде конкурсҡа килгәндә, ул педагогтарҙың башҡа төрлө һөнәри бәйгеләренән артыҡ айырылманы. Шулай ҙа, мәҫәлән, республика кимәлендәге "Башҡорт теле һәм әҙәбиәте йыл уҡытыусыһы" менән сағыштырһаҡ, ул класс сәғәте үткәреү талап ителеүе һәм дәресте рус телендә алып барыу кәрәклеге менән үҙенсәлекле булды. Бында балалар уҡытыусыны ла, телде лә белмәй. Улар өсөн бөтөнләй ят мөхит, ят мәҙәниәт, ят тел тураһында бер генә дәрес эсендә ҡыҙыҡтырып һөйләү, мауыҡтырыу һәм яҡшы тәьҫорат ҡалдырыу тик эске тулҡынланыуҙы еңгән осраҡта ғына мөмкин. Ставрополь крайының ҡайһылыр мәктәбенән килгән бишенсе синыф уҡыусылары хәҙер башҡорт теле, халҡыбыҙ тураһында белә һәм өнхәрефтәрҙе таный, сәләм бирә, ҙурара танышырға өйрәнде. Әйткәндәй, ошо уҡ балалар менән класс сәғәтендә лә осрашырға насип булды. Унда инде "Тылсымлы сәнғәт иле" темаһына ярашлы, рухи яҡтан байытырға йүнәлтелгән 20 минутлыҡ дәрестә театрҙар һәм музейҙар тураһында әңгәмәләшеп, Башҡортостандың Милли музейына виртуаль сәйәхәт ҡылып, башҡорт милли кейемдәре, ҡомартҡыларыбыҙ менән таныштырҙым.

Мин йәрәбә буйынса һуңғыларҙан булып ярышҡас, башҡа педагогтарҙың сығыштарын ҡарарға форсат бик булманы. Әммә коллегалар менән бик күп аралаштыҡ һәм үҙебеҙҙе борсоған, ҡыҙыҡһындырған һорауҙар буйынса фекерләштек, тәжрибә уртаҡлаштыҡ, кәңәш бирештек. Конкурс ике тиҫтә йылдан ашыу балаларға белем биргән һәм яңы ғына хеҙмәт юлын башлап торған йәштәрҙе берләштерҙе. Мәҫәлән, "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы - 2022" конкурсында беренсе урын алған Төньяҡ Осетия - Алания республикаһынан Яна Бекоева бишенсе йыл ғына балаларға белем бирә. Уның асыҡ дәресен ҡарау насип булғайны, ипле генә итеп, бер тынала үткәреп ебәреүе, һис тә тулҡынланмауы, балалар менән уртаҡ тел таба алыуы хайран итте.

Шулай уҡ түңәрәк ҡорға йыйылып, борсоған мәсьәләләрҙе уртаға һалып һөйләшеү мөмкинлеге лә булды. Унда ата-әсәләр менән дөрөҫ мөнәсәбәт ҡороу, уҡыусыларҙы олимпиадаларға әҙерләү, заманса технологияларҙы ҡулланып эшләү кеүек темалар күтәрелде. Рәсәйҙең ҡайһы төбәгендә генә йәшәһәк тә, ниндәй телде уҡытһаҡ та, йәш ата-әсәләрҙең балалары менән өйҙә башҡортса аралашмауы һәм туған телдәрен өйрәнеүгә ҡайһы саҡта өҫтөнлөк бирмәүҙәре, телде онота барыуҙары уртаҡ бәләбеҙ булып сыҡты. Туған телгә ҡарата һөйөү ғаиләнән башланыуына Рәсәй мәғариф министры Сергей Кравцов менән осрашҡанда ла баҫым яһалды, ә инде Рәсәй халыҡтары телдәрен уҡытыу проблемаларын хәл итеүҙән тәүге аҙымы - был йүнәлештәге уҡытыусыларҙың абруйын күтәреү булырға тейеш, тип билдәләнде. Был маҡсаттан "Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы" Бөтә Рәсәй конкурсы йыл да үткәреләсәк.

Бына шулай, туған тел уҡытыусыларын үҙ ҡаҙанында ҡайнауҙан арындырып, юғарыраҡ маҡсаттарға ынтылырға, һөнәри үҫешкә әйҙәргә, тәжрибә туплауға һәм бөтә Рәсәй кимәлендә фекерҙәштәр табырға ярҙам иткән конкурс булды был. Әҙерләнеүе, һынауҙарҙы үтеүе еңел булмаһа ла, ҡатнашыусыларҙың һәм жюри ағзаларының үҙенә ҡарата йылы мөнәсәбәттәрен тойоп, әйткән һүҙҙәренән һәм биргән баһаларынан күңел үҫеп, дәрт-дарман туплап ҡайттым.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Иң яҡшы туған тел һәм туған әҙәбиәт уҡытыусыһы - 2022" Бөтә Рәсәй конкурсында I урынды Төньяҡ Осетиянан осетин теле уҡытыусыһы Яна Бекоева, II урынды Рязань өлкәһенән рус теле уҡытыусыһы Екатерина Агеева, III урынды Дағстандан авар теле уҡытыусыһы Рамаҙан Газимагомедов яуланы. Санкт-Петербург ҡалаһынан рус теле уҡытыусыһы Павел Саянковтан саҡ ҡына ҡалышып, Мирас Рәшит улы Ишдәүләтев бишенсе урынға сыҡты. "Лайыҡлы, намыҫлы, яуаплы, киң белемле уҡытыусыны уңышы менән ысын күңелдән ҡотлайым", - тип юғары баһаланы уның тырышлығын Башҡортостандың мәғариф министры Айбулат Хажин. Туған телдәр уҡытыуға ҙур иғтибар бүленгән республикабыҙ өсөн был "сирҡаныс алыу"ға тиң генә булып, киләсәктә тағы ла оло еңеүҙәргә өлгәшергә насип булһын, тигән телəктә ҡалабыҙ.**

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# ЙӘШЕЛ ҠАЛАБЫҘ - тағы йәшелләнә

**Тажзәхмәт темаһы тағы ла беренсе урынға сыға, сөнки белем усаҡтарында уҡыуҙар башланыу менән киҫкен респиратор сирҙәр, киҙеү, шул иҫәптән коронавирус та әүҙемләшә. Ҡала хакимиәтендәге сираттағы оператив кәңәшмәлә белдерелеүенсә, һуңғы аҙнала был сирҙе 266 кеше йоҡторған. Шул уҡ ваҡытта ОРВИ менән сирләүселәр һаны ла артҡан һәм 46,9 процентҡа еткән.**

Шулай уҡ кәңәшмәлә йылытыу миҙгеленә әҙерлек мәсьәләһе лә ҡаралды, был эш бөгөнгә тамамланған, барлығы 5675 күп фатирлы йорт һәм 600 социаль объект йылытыу миҙгеленә әҙер.

Йыл һайын ошо мәлдә республикала "Йәшел Башҡортостан" акцияһы башлана. Быйыл ул 24 сентябрҙә старт алды. Уның барышында баш ҡаланың коммуналь хеҙмәттәре ҡаланы йәшелләндереүҙе дауам итәсәк һәм ошо маҡсатта тағы ла 2900 төп эре ағас һәм 1000 төп ҡыуаҡ ултыртырға планлаштырған. Гәҙәттәгесә, ағастар йәмәғәт территорияларында, ихаталарҙа, юл буйҙарында ултыртыласаҡ. Үҙ территорияһын (ихатаһын) йәшелләндерергә теләгән граждандар (милекселәр) "Йәшел Башҡортостан" сайтына мөрәжәғәт ҡалдыра ала. Портал эшләй башлағандан алып унда 238 мөрәжәғәт килһә, һуңғы айҙа был һан 39 булған.

24 сентябрҙә яңы аллеяларға нигеҙ һалыныу менән бер рәттән элек булдырылғандарына ағастар ултыртыласаҡ. Мәҫәлән, Азатлыҡ урамындағы "Әкиәттәр аллеяһында", Ферин урамы, 26 адресы буйынса урынлашҡан "Кунаҡ бүлмәһе" аллеяһында. Геофизиктар, Әхмәтов, Комсомол, Вологда, Иван Якутов урамдарында яңы аллеялар эшләү планлаштырыла.

Ҡаланың үҙәк урамдарын төҙөкләндереү сиктәрендә Салауат Юлаев проспекты сатында Зәки Вәлиди урамын йәшелләндереү башланған. Бында 105 эре ағас һәм 9450 ҡыуаҡ ултыртыласаҡ. Шулай уҡ Пушкин урамынан Киров урамына тиклем Ленин урамын төҙөкләндереү менән бер рәттән унда йүкәләр ултыртыу күҙаллана. Әйткәндәй, быйыл яҙғыһын Башҡортостандың баш ҡалаһы урынында ҡәлғә төҙөлөүҙең 450 йыллығына 45 мең эре ағас һәм ҡыуаҡ ултыртырға, тигән бурыс ҡуйылғайны. Шуның 18882-һе быйыл ултыртылһа, 2023 йылға һәм 2024 йылдың яҙына 26118 төп ҡала.

Теге йәки был мәғлүмәт сараһында эре сауҙа комплекстары йыбыла, хеҙмәткәрҙәр эшһеҙ ҡала, тигән хәбәрҙәр күренһә лә, Өфө ҡалаһының Мәшғүллек үҙәге директоры Ридан Әхйәмов билдәләүенсә, теркәлгән эшһеҙҙәр һаны йыл башынан 0,95 проценттан 0,91 процентҡа тиклем кәмегән. Ғинуар-августа эш биреүселәр 101,4 мең хеҙмәткәргә ихтыяж барлығын белдерһә, ҡаланың вакансиялар банкыһында 19,9 мең эш урыны бар, эшсе һөнәренә ихтыяж ҙур.

Эштән ебәреү хәүефе янаған хеҙмәткәрҙәр һаны 1,7 меңгә етә. Республикала хеҙмәт баҙарындағы көсөргәнеште кәметеү буйынса эш алып барыла һәм бындай хеҙмәткәрҙәр икенсе һөнәргә уҡытыла. Бөгөнгә 12 сәнәғәт предприятиеһы менән уҡытыу ойоштороуға килешеү төҙөлгән. Сығымдар төбәк бюджетынан ҡаплана.

Шулай ҙа бөгөн иң мөһиме - һаулыҡ. Һау-сәләмәт кешегә эше лә, ашы ла табыла. Эш тип һаулыҡты бөтөрөп, һуңынан уны һатып алыуға ҡалмайыҡ. Ҡыҫҡаһы: үҙебеҙҙе һаҡлайыҡ!

**Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.**

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, анығ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Герпес

❖ Иренгә герпес сыҡһа, бәпембәнең һары һеркәлектәрен йоторға кәрәк. 7 бәпембә сәскәһен йолҡоп алып, шуларҙан һары һеркәлектәрен һайлап алып, сәйнәргә һәм йоторға. Артынан һыу эсмәҫкә. Биш көн үткәс, тағы берҙе шулай эшләргә. Герпес бөтә. Бәпембәне үт юлдарының ҡатмарлы ауырыуҙары, ашҡаҙан ауырыуҙары булғанда һаҡ ҡулланырға кәрәк. Ә тейешенән артыҡты ҡулланыу эсте йомшартыуы һәм күңелде болғандырыуы ихтимал.

## Аҙыҡ менән ағыуланыу

❖ Цикорийҙы һабағы, япрағы һәм сәскәһе менән йолҡоп алып, бер усына ярты литр ҡайнар һыу ҡойоп, 3 минут ҡайнатырға. Ҡайнатманы эсе көйөнсә аҙлап ҡына уртлап эсергә. Хәл яҡшырғансы шулай дауаланырға. Был иҫкергән, йыуылмаған ризыҡ ашап ағыуланған осраҡтарҙа ярҙам итә.

## Аҙҡанлылыҡ

❖ Бер тигеҙ күләмдә ҡырғыстан үткәрелгән кишер, ҡара торма һәм сөгөлдөрҙө ҡушырға. Шул рәүешле әҙерләнгән турамаға 1 балғалаҡ үҫемлек майы ҡушып, көн һайын төшкө аш алдынан 150-200 грамм ашарға.

❖ Халыҡ дауаһында кишер, сөгөлдөр һәм ҡара торма һутын көн дә эсеү кәңәш ителә. Был йәшелсәләрҙең 150-шәр мл һутын бергә ҡушырға һәм һәр ашарға ултырыуҙан алда 1-әр ҡалаҡ эсергә кәрәк. Һутты ҡара быяла һауытҡа ҡойоп, һыуытҡыста һаҡларға. Был рәүешле 2-3 ай дауамында дауаланырға.

❖ Ҡалған үләненең (лапчатка прямостоящая) 25 грамм тамырһабағына 0,5 литр сифатлы араҡы ҡойоп, 3 аҙна төнәтергә. Төнәтмәне көнөнә 3 тапҡыр ашарҙан ярты сәғәт алда 30-ар тамсы эсергә. Әйткәндәй, ҡалған үләне төнәтмәһе ҡан баҫымын түбәнәйтә, инсульт һәм инфаркт ауырыуҙарын иҫкәртергә ярҙам итә, йөрәк эшмәкәрлеген яҡшырта, ҡан тамырҙарының һығылмалығын арттыра, холестеринды сығара. Ә бына гипертония кризистары булғанда һәм эсе ҡатҡан кешеләргә һаҡ ҡулланырға кәрәк.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

✓ - Уның бер сере лә юҡ: легендар 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы факторы эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уның иң күп Советтар Союзы Геройы булған берҙән-бер подразделение икәнен бөтәһе лә белә бит.



ЙОЛАНДАН ЙӘН ТАП!



# АҒАС ҺАУЫТ-ҺАБА

Ырымбур, Өфө, Ҡаҙан, Санкт-Петербург ҡалалары музейҙарында бер төрлө күренгән һәм бик оҫта эшләнгән ижауҙар һаҡлана. Уларҙы Урал буйында сығарғандар, бәлки, Стәрлетамаҡ өйәҙендәләр, тип фаразларға була. Шундай ижауҙарҙың береһен В.С. Сыромятников Стәрлетамаҡ кантонында осратҡан. Был ижауҙар уғата нескә һәм еңел, һоҫаларының ҡырҙары тәпәш кенә һәм текә, төбө киңәйеп китә һәм ал яҡҡа ҡарай күтәренкерәк итеп яһалған. Баш яғын бер аҙ артҡа бөгөлгән нәҙек тотҡаһы тигеҙләй төҫлә, ул дуңғәләктәр йәки сылбыр менән биҙәлгән. Төбө тапҡырынан һәм ҡырҙары буйлап вал билдәләнгән, ижауҙың арты контурлы һырлау менән арҡыры һыҙаттар рәүешендә биҙәлгән, тотҡаһы урынына нәҙек кенә үҙәктәр, үрелештәр, кәкерсәктәр рәүешендәге орнаменталь композиция эшләнгән. Ижауҙар йыш осраҡта ҡара ҡуңыр төҫтә. Бик нәфис ҡул эше был: музейҙарҙағы күп кенә ижауҙар ватылған. Ташбүкәндәрҙән айырмалы, былар араһында бер төрләләре юҡ. Ғөмүмән алғанда, бындай әйберҙәр юғары кимәлдәге һөнәрселек мәктәптәре булыуы тураһында ғына түгел, яҡшы ижади потенциал хаҡында ла һөйләй.

Ижау оҫталары ҡайын ороһонан еңел туҫтаҡтар ҙа эшләгән. Төрлө ерҙә уларҙы төрләсә атап йөрөткәндәр: туҫтаҡ, туҫтаған, алдыр, сүгәтә һ.б. уларҙың диаметры 20 сантиметрҙан 30-ға тиклем булған, текә ситтәре 6-7 сантиметр тирәһе, ҡалҡып торған йәйенке нигеҙле йәки түңәрәк рәүешле аҫлы булған. Улар шып-шыма итеп йышылған һәм үҙенсәлекле биҙәкле булыуы менән айырылып торған. Тышҡы яғынан ситтән генә йәки саҡ ҡына аҫтараҡ мөйөштәр йәки ҡыя һыҙаттар рәүешендәге һырҙар һалынған, ул ишелгән арҡан кеүек күренгән. Ҡайһы бер осраҡтарҙа шыма ҡабарынҡы һыҙат-бүлкәттәр ике ҡатлы, өс ҡатлы булып киткән. Ашҡаҙар һәм Өршәк йылғалары буйындағы Көньяҡ-Көнбайыш районарҙағы ҙур туҫтаҡтар 2,5 литр ҡымыҙ һыйҙырышлы булған һәм уңайлылыҡ өсөн уларға ҡыҫҡа ғына тотҡа эшләгәндәр. Бындай туҫтаҡтарҙы ғәҙәттә түңәрәк буйлап ебәргәндәр: ҡымыҙҙы эсеп, эргәлә ултырған кешегә тапшырғандар.



*Ҡымыҙ өсөн туҫтаҡ. Ырымбур төбәк музейы фондынан. Рәссамы В.М. Шутова*

**Светлана ШИТОВА.**
**"Башҡорттарҙа ағас семәрләү һәм биҙәк төшөрөү" китабынан.**

ҠЫҘЫҠЛЫ ӘҢГӘМӘ

**Алик Камалетдинов - Башҡортостан Башлығының хәрби хеҙмәткәрҙәр менән йөгөнтоло эшләү мәсьәләһе буйынса советнигы, Шайморатов һәм Доставалов исемендәге башҡорт батальондарын ойоштороу инициаторы, һөнәри хәрби хеҙмәткәр. Ул махсус операцияла ҡатнашыу өсөн ирекмәндәрҙе берләштереп кенә ҡалманы, улар менән бергә иңгә-иң терәшеп, хәрби бурыстарҙы үтәйәсәк. Украинаға сығыр алдынан Алик Финзир улы "Башинформ" мәғлүмәт агентлығына интервью бирҙе.**

# ЫСЫН ИР-ЕГЕТ БУРЫСЫ БЫЛ...



**➔ Алик Финзир улы, башҡорт отряды булдырыу идеяһы ҡайҙан барлыҡҡа килде? Уның уңышлы барып сығыуына ышандығыҙмы?**

- Бөтәһе лә тиҙ генә булды. Ҡыҫҡа ғына арала бер түгел, ике батальон ойоштороҙоҡ. 1300-ҙән ашыу заявка алдыҡ. Ныҡлы һайлау аша үткәргәс, уларҙың яртыһы тороп ҡалды. Теләүселәр әле лә бар, даими яҙалар. Беҙ уларҙы резервҡа ҡуйбыҙ. Әйткәндәй, һуңынан беҙгә килер өсөн күптәр хатта хәрби хеҙмәтенән китте. Мәсәлән, минең бер иптәш күрше өлкәлә хеҙмәт итә ине. Беҙҙең батальон тураһында ишеткәс, отставкаға сыҡты. Һуңынан беҙҙең батальонға инде, хәҙер яңынан махсус хәрби операция зонаһына юлланды. Тик был юлы үҙенең яҡташтары менән бергә.

**➔ Нәк башҡорт отрядында хеҙмәт итергә теләүҙең сере нимәлә?**

- Уның бер сере лә юҡ: легендар 112-се башҡорт кавалерия дивизияһы факторы эшләй. Бөйөк Ватан һуғышы йылдарында уның иң күп Советтар Союзы Геройы булған берҙән-бер подразделение икәнен бөтәһе лә белә бит. Шул сәбәпле беҙҙең республика биләмәһендә ошо батальон барлыҡҡа килде, тип иҫәпләйем. Унда барыһы ла үҙебеҙҙеке: күршеләр, дуҫтар, туғандар. Яҡташтар бер-береһен ҡурсалай, ҡарай.

**➔ Нисек уйлайһығыҙ, ирекмәндәр ҡайҙа барғанын яҡшы беләме?**

- Беренсенән, ирекмәндәрҙең уртаса йәше 35-45. Улар - Советтар Союзында тыуған һәм тәрбиәләнгән быуын. Тыуған ил, илһөйәрлек тураһында ҡараштары ныҡлы. Икенсенән, Чечняла, Дағстанда, Сирияла, Кавказда хәрби хәрәкәттәрҙә ҡатнашыусылар бик күп. Донбаста булғандар ҙа байтаҡ. Улар ҡайҙа барғанын яҡшы аңлай. Улар быны граждандык бурысы тип ҡабул итә. Улар менән ғорурланам. Ысын ир-егеттәр, Ватан патриоттары.

**➔ Башҡортостан һәр ваҡыт үҙенең яугирҙары менән дан тотто. Ә заман ирекмән яугирының портреты ниндәй?**

- Социаль селтәрҙә, моғайын, бер хәрби белгестең видеоһын күргәнһегеҙҙер. Ул беҙҙең бер һалдатты ҡосаҡланы ла: "Башҡорт тәньяҡ амурҙары", - тине. Бына шулай. Уртаса портреты түбәндәгесә: оҙон кәүҙәле түгел, киң яурынлы, урта йәштәрҙәге, 35-45 йәшлек, янып торған күҙле, яуға ынтылыусы, төпкөл ауылда йәшәүсе.

**➔ Хәрби күнекмә осоронда беҙҙең яугирҙарға еңел булмағандыр? Сөнки бөтәһе лә физик әҙерлекле һәм хәрби тәжрибәле түгел бит.**

- Эйе, егеттәргә ауыр булды. Йәй эҫе килде, ә улар Ырымбур өлкәһендә, көньяҡтараҡ әҙерлек үтте. Ниндәйҙер сәбәптәр менән хеҙмәттән баш тартыусылар ҙа булды. Мәсәлән, 50 йәшлек ирекмән миңә мөрәжәғәт итеп, башҡа булдыра алмауын әйтте. Физик яҡтан уға ауыр булыуын аңланым. Мин уны бер нисек тә ғәйепләй алмайым. Был бурыс һинеке түгеллекте һуғыш яланында аңлағанға ҡарағанда алдан китеү яҡшыраҡ. Әммә күбеһе түҙҙе һәм ҙур тырышлыҡ менән уҡыны. Ауырлыҡҡа ҡарамай, егеттәр әҙерлек менән ҡәнәғәт. Улар менән беҙҙең легендар спецназ, махсус операция көстәре вәкилдәре һәм белгестәр шөғөлләнде. Һәр йүнәлеш буйынса махсус операция көстәре генералдары яуаплы булды. Квадрокоптерҙа эшләргә, төндә, ҡалала һуғышырға өйрәнделәр. Юғары класлы әҙерлек үттеләр, улар өсөн мин тыныс.

**➔ Ирекмәндәр ғаиләһе ниндәй ярҙам ала?**

- Республика Башлығы мине хәрби хеҙмәткәрҙәр менән йөгөнтоло эшләү мәсьәләһе буйынса үҙенең кәңәшсеһе вазифаһына тәғәйенләне. Егеттәрҙең ихтыяжы, ғаилә проблемалары менән шәхсән үҙем шөғөлләндем, 160-тан ашыу мөрәжәғәт алдым. Беҙ һәр мөрәжәғәтте реестрға индерәбеҙ. Һорауҙар, үтенестәр төрлө: утын килтереү, баланы балалар баҡсаһына урынлаштырыу, мәктәпкә йыйыу, университетҡа уҡырға индереү, оло йәштәге ата-әсәһен дауаханаға һалыу. Республика Хөкүмәте, урындағы власть, профилле ведомстволар мәсьәләне хәл итеүгә оператив тотона. Механизм яйға һалынған, ғаиләләргә ярҙам күрһәтеләсәк. Радий Фәрит улы әйтеүенсә, үҙебеҙҙекеләрҙе ташламайбыҙ! Отрядты оҙатҡанда республика Башлығы хәрби хеҙмәткәрҙәрҙең ғаиләһен шәхси яҡлауға алырға вәғәҙә итте. Уның ҡушыуы буйынса район хакимиәттәре башлыҡтары ирекмән булып киткән ир-егеттең һәр береһенең ғаиләһен белә. Шуға күрә уларҙы кәрәкле әйбер менән оператив тәьмин итәсәктәр.

**➔ Ярҙамға ҡағылышлы. Республика беҙҙең батальондарға обмундирование тегергә лә, аксалата түләү буйынса ла ҙур ярҙам күрһәтте. Быны көткәйнегеҙме?**

- Эйе, обмундирование менән шунда уҡ ярҙам иттеләр. Хәҙер бына яугирҙарҙы ҡышҡылыҡҡа кейендерәбеҙ. Федераль Оборона министрлығы түләүенән тыш, төбәк түләүе тәғәйенләнде. Дөйөм алғанда, бөтә һорау шунда уҡ хәл ителә.

**➔ Әйҙәгеҙ, аҙ ғына һеҙҙең турала һөйләшәйек. Һеҙ оҙон хәрби юл үткәнһегеҙ. Үҙегеҙҙе ысын патриот тип иҫәпләйһегеҙме, әллә һөнәри бурысын үтәгән ябай кешеме?**

- Тәү сиратта, мин - офицер, 7 йыл отставкала булһам да. Ә элекке офицерҙар булмай. Махсус операция башланыу менән минең башыма, шунда барам, тигән уй тыуҙы. Шунда уҡ китә алманым, сөнки Еңеү көнөнә дингеҙ пехотаһын парадҡа әҙерләй инем. 9 майҙан һуң барырға ныҡлы ҡарарға килдем. Быға дуҫымдың улы Максимдың Украинала һәләк булыуы ла сәбәп булды. Ул минең өсөн дуҫымдың улы ғына түгел, ә улымдың яҡын дуҫы ла ине. Уның хәтере хаҡына мин шунда булырға тейешлегемде аңланым. Ҡыҙыу нөктәләргә тиҫтәнән ашыу командировкаға барғаным, күп йылдарҙы хәрби хәрәкәт зоналарында үткәргәнем булды. Хәҙер сираттағы командировкаға барасаҡмын, тип ҡабул итәм. Мин быны ир-егет, ысын ир-егет эше тип атайым.

**➔ Тимәк, батальондар ойошторғанда уҡ улар менән хәрби хәрәкәт зонаһына барасағығыҙҙы белдегеҙ?**

- Улай ғына ла түгел, мин был подразделениеларҙы етәкләргә һәм алдынғы һыҙыҡта булырға теләнем. Әммә Оборона министрлығы подразделение командирҙары штаттағы офицерҙар булырға тейеш тип хәл итте. Улар беҙҙең республикаңыҡылар, башҡа төбәктәрҙә хеҙмәт иткән үҙебеҙҙең егеттәр. Әммә мин барыбер егеттәр эргәһендә буласаҡмын. Минең эш урыным - унда! Был баштан уҡ ҡабул иткән принципиаль ҡарар. Тыуған илде һаҡлаусы тигән һөнәр бар. Беҙҙең менән барыһы ла яҡшы буласаҡ!

**Ләйсән ЗАКИРОВА**
**әңгәмә ҡорҙо.**

*✓ Үҙенсәлекле табылдыҡтарҙан Дим буйындағы Иҫке Ябалаҡлы ҡурғанынан табып алынған сәс биҙәүесен (сәсмау йәки сәсҡап) атарға була. Ул ике ҡайышҡа теҙелгән 30-ҙан артыҡ бронза муйынсаҡтарҙан яһалған.*



*ХӘҠИҠӘТИ ҺҮҘ*

# БОРОНҒО БАШҠОРТОСТАН

## Беренсе киҫәк. Боронғо дәүер.

### Икенсе бүлек. Бронза быуаты.



### Бура мәҙәниәте ҡәбиләләре

Был мәҙәниәт атамаһы ошо ҡәбиләләргә хас булған бер үҙенсәлек менән бәйле ҡабул ителә: үлгән кешеләрҙең мәйеттәре ҡәбер төбөндәге бейек булмаған буралар эсенә һалынған була. II мең йыллыҡ башы - XIV-XIII быуаттар (б.э. тиклем) арауығында бура мәҙәниәте ҡәбиләләре Волга һәм Урал араһында, төньяҡ тарафта Кама йылғаһына тиклемге ҙур территорияла таралып йәшәй.

Бында уларҙың йылға һәм күл буйҙарындағы асыҡ тораларҙан һәм ҡурған ҡәберлектәренән хасил булған 1000-дән ашыу ҡомарткыһы булыуы билдәле.

Улар энеолит эпохаһының ям мәҙәниәте ҡәбиләләренең туранан-тура вариҫтары булып тора, әммә, тәүгеләренән айырмалы, ултыраҡ тормош алып бара. Бура ҡәбиләләренең тораҡтары дүрт мөйөшлө яртылаш ергә ҡаҙып һалынған йорттарҙан торған. Уларҙың өйҙәре бигүк тәрән булмаған соҡор төбөнә төшөрөп һалынған бураларҙан ғибәрәт. Иҙәндәре таҡта йәиһә ер булған, өй ҡыйыҡтары бер йәки ике яҡлы була. Бындай өйҙәр иҙәндәге усаҡтар менән йылытылған. Бура мәҙәниәте ҡәбиләләренең һәм уларҙың Көньяҡ Уралдағы замандаштарының ер өҫтөнә һалынған бүрәнә өйҙәре булыуы хаҡында ла фараз итеп була, әммә был фактты археологик яҡтан аныҡ ҡына раҫлап булмай. Шулай ҙа бура мәҙәниәте ҡәбиләләрендә төҙөлөш эшенең сағыштырмаса юғары кимәлдә булыуы ошолай фараз итеү мөмкинлеген бирә.

Буралыларҙың яртылаш ер өйҙәренең майҙаны 100-ҙән 400 кв. м тиклем етә, ҡайһы берҙәре бүрәнә стена менән уртаға бүленгән. Мәҫәлән, Һаҡмар йылғаһы үрендәге Таулыҡай тораһындағы ҡаҙыныу эштәре барышында ҙурлығы 19,5х22 м булған торлаҡ табыла. Ул формаһы буйынса күп мөйөшлө булып, стеналары вертикаль ултыртылған бағаналар менән нығытылған. Ошондай ҡатмарлы һәм ҙур ҡоролмаларҙың иң элгәре хужалыҡ итеү маҡсаттарында, мәҫәлән, ҡыш миҙгелендә малтыуар тотоу өсөн файҙаланылыуы ла мөмкин, тип әйтергә була.

Бура ҡәбиләләре комплекслы хужалыҡ алып бара: уларҙа ер эшкәртеү һәм малсылыҡ менән шөғөлләнеү өҫтөнлөк итә. Бында йыш табылған бронза ураҡтар, таш ашлыҡ ваҡлағыстар, йорттар янында ашлыҡ һаҡлау өсөн ҡаҙылған тәрән соҡорҙар булыуы уларҙың ер эшкәртеү менән шөғөлләнеүенә дәлил.

Тикшеренеүселәр араһында бронза эпохаһында йәшәгән Көньяҡ Урал ҡәбиләләрендә, шулай уҡ бура мәҙәниәтенә ҡарағандарында ла, ер кәтмән ҡулланып эшкәртелгән, тигән фекер таралған. Әммә, бының менән бер рәттән, ер эшкәртеү ҡоралдары, шул иҫәптән кәтмәндәр табылыуы археологтар тарафынан ғәмәлдә теркәлмәгән. Был бура мәҙәниәте ҡәбиләләренең һәм уларҙың замандаштарының хайуандар тартып йөрөткән примитив һабан ҡуллана алыуҙары хаҡында теоретик рәүештә булһа ла фараз итергә мөмкинлек бирә. Археологтар араһында ошо ҡараш яҡлылар ҙа бар. Ошо ҡәбиләләргә йорт малсылығы хас була, улар мал көтөү менән шөғөлләнә. Мал көтөүҙәрендә сусҡалар булыуы уларҙың йыраҡ араларға күсеп йөрөй алмауын күрһәтеп тора. Бында шулай уҡ эре һәм ваҡ мөгөҙлө малдар, йылҡы үрсетелә. Табылдыҡтар араһында ҡырағай хайуандарҙың һөйәктәре күп, улар һунарсылыҡ объекттары була.

Бура мәҙәниәте ҡәбиләләренә көршәк йә иһә банка формаһындағы яҫы төплө һауыт-һаба хас. Улар ҡулдан яһалған, ҡарамаҡҡа тупаҫ, ҡалын стеналы була. Орнаменттары ярлы, тешле штамп баҫып яһалған өсмөйөш, ромб һәм зигзагтарҙан тора.

Ерләү йолаһы менән бәйле материалдар шулай уҡ ошо мәҙәниәттең характерлы элементтарының береһе булып һанала. Буралылар, башлыса, мәйетте бөгөлгән рәүештә, ҡабырғаһына ятҡырып, башы менән төньяҡҡа ҡаратып ерләгәндәр. Кешеләр парлап ерләнгән ҡәберҙәр бар, күрәһең, унда ир һәм ҡатын күмелгән. Ҡағиҙә булараҡ, ир кеше уң, ҡатыны һул ҡабырғаһына һалынған. Ҡәберҙәрҙә әйберҙәр әллә ни күп түгел. Күбеһенсә көршәктәр, баҡыр йәиһә бронза биҙәүестәр (беләҙектәр, һырғалар, төрлө сулпылар), кремнийҙан яһалған әйберҙәр (уҡ башаҡтары) осрай.

Үҙенсәлекле табылдыҡтарҙан Дим буйындағы Иҫке Ябалаҡлы ҡурғанынан табып алынған сәс биҙәүесен (сәсмау йәки сәсҡап) атарға була. Ул ике ҡайышҡа теҙелгән 30-ҙан артыҡ бронза муйынсаҡтарҙан яһалған. Ҡайыш бауҙарҙың түбәнге остары өсмөйөшлө пластина менән тоташтырылған, уға йәнә ике киң пластина беркетелгән. Ул пластиналар осонан таралып киткән өсәр ҡайыштың һәр береһенә йәнә икешәр оҙонайтылған пластина-биҙәүес тағылған. Ҡайыштарҙың өҫкө остары, күрәһең, баш кейеменә беркетелеп, былар барыһы берҙәм комплект хасил иткән. Сәсмауҙың муйынсаҡ бауҙары менән бергә дөйөм оҙонлоғо 58 сантиметрға еткән. Сәсмауҙың киң күн йәиһә туҡыма киҫәгенә ҡуша тегелеүе лә бар; уның түшелдерек сифатында ҡулланылыуы ла мөмкин. Бронза эпохаһында бындай баш кейемдәре киң таралған була. Улар бура ҡәбиләләренең Көньяҡ Уралдағы башҡа байтаҡ ҡына ҡәберлектәрендә табыла; киң күн нигеҙгә беркетелгән сәсмау (йәиһә түшелдерек) ҡалдыҡтарының Көньяҡ Себерҙең синхрон ҡурғандарында ла табылыуы билдәле.

Йәнә тағы ла бер факт иғтибарға лайыҡ. Хәҙерге заман башҡорттарына һәм башҡа Урал-Волга буйы халыҡтарына (мәҫәлән, мариҙарға, сыуаштарға) үҙенсәлекле баш кейемдәре хас: уларға арҡа буйына тиклем төшөп торған киң туҡыма киҫәге беркетелә, баш кейеме лә, уның ошо туҡыманан хасил булған өлөшө (елкәлек, сәсмау) лә сәйлән һәм металл тәңкәләр менән биҙәлә. Бынан әлегә туранан-тура параллель үткәреп булмаһа ла, Иҫке Ябалаҡлы ҡурғанында табылған баш кейеме комплектының хәҙерге ҡатын-ҡыҙҙарҙың әле атап үтелгән баш кейемдәренең боронғо прототибы булыуы мөмкин. Уларҙы ошо баш кейемдәренең уртаҡ конструкциялы булыуы яҡынайта.

Ҡайһы бер бура мәҙәниәте ҡәберҙәренә баҡыр шлагы, баҡыр иретеү ҡалдыҡтары һалынған (Имәнғол, Ырымбур өлкәһе). Күрәһең, бындай ҡәберҙәрҙә боронғо металлургтар ерләнгән, ә ҡәберҙәге символик шлак киҫәге улар аңында теге донъяла ла үҙ һөнәрҙәрен дауам итә алыуға үҙенсәлекле гарантия итеп һаналғандыр. Бәлки, был табылдыҡтар металлург-профессионалдарҙың ырыу-ҡәбиләнең башҡа ағзаларынан айырылып сыға башлауын күрһәтеп торалыр.

Ҡурғандар аҫтындағы ҡәберҙәр, ҡағиҙә булараҡ, бер үҙәк ҡәбер тирәләй урынлашҡан була. Моғайын, бындай ҡурғандар ғаилә-нәҫел маҙары булғандыр. Шул уҡ ваҡытта бура ҡәбиләләре бер ер өйөмө аҫтында 40-тан 100-гә тиклем кеше ерләгән (Ульяновск өлкәһенең Кайбелы ауылы). Бындай ҡурғандарҙың диаметры 60-180 метрға етеп, бейеклеге бер нисә метр була. Бындай некрополдәр бик оҙаҡ ваҡыт арауығында (быуаттар дауамында) файҙаланылып, кешеләрҙең ҙур коллективтарының (ырыуҙың) зыярат урынына әйләнгән.



*Һигеҙенсе һүрәт. Бронза эпохаһындағы Көньяҡ Урал ҡәбиләләренең балсыҡ һауыт-һаба өлгөләре: 1 - бура мәҙәниәте ҡәбиләләре һауыты; 2,3 - абашев мәҙәниәте ҡәбиләләре һауыт-һабаһы (б.э. тиклем XVIII-XVII быуаттар).*

**Нияз МӘЖИТОВ.**
**Әлфиә СОЛТАНОВА.**

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе.**

**(Дауамы. Башы 28-се һанда).**

*БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 77*



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Днепр ярҙары - батырлыҡ майҙаны

Фронтта Навлинан (Брянск өлкәһе) Таганрогҡа тиклем совет ғәскәрҙәренә дошмандың 62 дивизиянан, шул иҫәптән 14 танк һәм моторлаштырылған частарҙан торған "Үҙәк" һәм "Көньяҡ" армия төркөмдәре ҡаршы тора. Был саҡта совет ғәскәри частары тере көстәре һәм ҡоралдары буйынса немецтарҙан бер аҙға булһа ла өҫтөнлөккә өлгәшкән була. Совет командованиеһы тиҙ арала ғәскәрҙәрен төркөмләштереп, тылдарын нығытып, һуғыш припастарын тулыландырып өлгөрә. Беҙҙең яугирҙарыбыҙ украин һәм белорус халыҡтарын фашист ҡоллоғонан тиҙерәк азат итергә ынтыла ине.

Днепр өсөн алыш Бөйөк Ватан һуғышының иң ҙур хәрби операцияларының береһе булараҡ тарихҡа инеп ҡалды. Был үтә ҡатмарлы һәм ҡан ҡойғос һөжүм алыштары совет ғәскәрҙәренең бер юлы 5 фронты тарафынан ғәмәлгә ашырылып, 1943 йылдың авгусынан декабргә тиклем барҙы. Төп маҡсат - немецтарҙың ныҡлы оборона һыҙығын емереп, уларҙың төп көстәрен тарҡатып, сигенергә мәжбүр итеү, Донбасты һәм Днепрҙың һул яғындағы Украина ерҙәрен дошмандан азат итеү, Днепрҙы аша сығып, дошманды эҙәрлекләүҙе дауам итеү ине.

Операция ике этапта уҙғарыла: беренсе этабы - август-сентябрь айҙарында, икенсеһе - октябрь-декабрҙә. 22 сентябрҙән 30 сентябргә тиклем Үҙәк, Воронеж, Дала һәм Көньяҡ-Көнбайыш фронттары армиялары Лоев ҡалаһынан Запорожьеға тиклемге 750 саҡрымлыҡ фронт һыҙығында Днепр ярҙарына килеп етеп, туҡтауһыҙ барған алыштар барышында Днепр аша сыға. Сентябрь аҙаҡтарына Днепрҙың һул яғындағы Украина ерҙәре тулыһынса тиерлек азат ителә. 7-се гвардия кавалерия корпусына (шул иҫәптән 16-сы гв. атлы дивизияһына) Чернигов ҡалаһын азат иткәндән һуң яңы боевой бурыстар йөкмәтелә.

24 сентябрҙә 61-се армия командующийы корпусҡа Мекшуновка, Неданчичи, Мнево, Видельцы тораҡ пункттарын азат итеп, Днепр аша сығырға һәм, уның уң яҡ яры буйлап һөжүм итә барып, 1 октябргә Речица ҡалаһын (хәҙер Беларусь Республикаһының Гомель өлкәһенә ҡарай) алырға бойора.

25 сентябрҙең кисенә корпус Борки ауылынан төньяҡ-көнбайыштараҡ тупланып, Днепрҙы кисеп сығырға әҙерләнә. Командарм, алдараҡ бирелгән бойороғон үҙгәртә биреп, Днепрҙың уң яҡ ярына шул уҡ көндә сығыу планын беҙҙең частарға еткерә: 14-се гв. дивизияһының 56-сы гв. кавполкы Комарин ауылы районына, 16-сы гв. дивизияһының 58-се гв. кавполкы Дымарка ауылынан көньяҡ-көнбайыштараҡ Днепр йылғаһы боролошо районында йылға аша сығырға тейеш була. 16-сы (Башҡорт) гв. атлы дивизияһы 25 сентябрҙә Ҡыҙыл Гута, Яңы Рудня, Пролетар Рудняһы тораҡ пункттары районында туплана. Беҙҙең яугирҙарға 26-сы сентябргә ҡаршы төндә Дымарка һәм Неданчичи ауылдары районында Днепрҙы кисеп сығып, уның уң яҡ ярын дошмандан таҙартып, ошо плацдармда нығынырға һәм корпустың башҡа частарына йылға аша сығыу өсөн уңайлы шарттар булдырырға бойороҡ бирелә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

*✓ Беҙҙең институттың нигеҙе йәмғиәт булараҡ, ысынлап та, 1922 йылда формалаша. Ләкин тарих, этнография, фольклор, әҙәбиәт буйынса тикшеренеүҙәр Башҡортостанда, башҡорт ерлегендә 19-сы быуат аҙағында уҡ башлана.*

# милли йөҙлө

## ЙӨҘ ЙЫЛЛЫҒЫН

**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үҙенең бер быуатлыҡ тарихын яҙҙы. Ошо ваҡыт эсендә быуын-быуын ғалимдар алмашынды, төрлө осорҙар кисерҙе, иң мөһиме, ул үҙенең төп маҡсатына тоғро ҡалды. Бөгөн шулай тип кенә әйтә алабыҙ: Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты бөгөнгө көндә донъяла танылыу яулаған ғилми учреждениеларҙың береһе. Юбилей уңайынан Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты директоры, философия фәндәре докторы Зөһрә РӘХМӘТУЛЛИНА, институттың әҙәбиәт бүлеге мөдире, филология фәндәре докторы Миңлеғәли НӘҘЕРҒОЛОВ һәм ҡулланмалы лингвистика һәм диалектология бүлеге мөдире, филология фәндәре кандидаты Зиннур СИРАЖЕТДИНОВ менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәгенең Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты үҙенең йөҙ йыллыҡ юбилейына әҙерләнә. Шулай булғас, Зөһрә Йыһанур ҡыҙы, Башҡортостандың иң өлкән ғилми учреждениеһының тарихына ла күҙ һалыу мотлаҡтыр, тимәксемен.**

**З. Рәхмәтуллина.** Буласаҡ Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының тәүге фәнни нигеҙ ташы 1922 йылдың сентябрендә һалына. Республиканың Халыҡ мәғарифы комиссариаты эргәһендә академия үҙәге ойошторола. Тап ошо ойошма эсендә башҡорт крайын, мәҙәниәтен, этнологияһын, географияһын өйрәнгән йәмғиәт булдырыла. Ул дәүерҙәге зыялыларыбыҙ - әҙиптәр, ғалимдар, мөғәллимдәр, тыуған яҡты өйрәнеүселәр ошо йәмғиәттән ағзалары булып китәләр. Д. Юлтый, М. Ғафури, М.Буранғолов, З. Шакиров һымаҡ күренекле шәхестәр әүҙем эш алып баралар. Тыуған яҡты өйрәнеү йәмғиәте баштан уҡ беҙҙең институттың структураһын булдырған йүнәлештәр буйынса эшләй. Был йәмғиәттең "Башҡорт аймағы" һәм рус телендә "Башкирский краеведческий сборник" тигән үҙенең матбуғаты ла була. Академүҙәк даирәһендә барлыҡҡа килгән йәмғиәт төрлө үҙгәрештәр кисерә, 1931 йылда Милли мәҙәниәт институты булып китә, 1932 йылда уның тәүге директоры М. Солянов ҡултамғаһы менән беренсе бойороҡ сыға. 1951 йылда СССР Фәндәр академияһының башҡорт филиалы - Өфө федераль тикшеренеүҙәр үҙәге барлыҡҡа килә һәм беҙҙең институт уның структураһына "Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты" исеме менән инеп китә. Миңә: "Институт 1932 йылда барлыҡҡа килгән түгелме?" - тип һорау биргәндәр бар. Ул йылда М. Солянов үҙенең беренсе бойороғона ҡул ҡуйһа ла, 1922 йылда ойошторолған йәмғиәт милли институтҡа нигеҙ һала ла инде.

**М. Нәҙерғолов.** Зөһрә Йыһанур ҡыҙының һүҙен ҡеүәтләп, шуны әйтәм: беҙҙең институттың нигеҙе йәмғиәт булараҡ, ысынлап та, 1922 йылда формалаша. Ләкин тарих, этнография, фольклор, әҙәбиәт буйынса тикшеренеүҙәр Башҡортостанда, башҡорт ерлегендә 19-сы быуат аҙағында уҡ башлана. Мөхәмәтсәлим Өмөтбаевтың башҡорттарҙың тарихы буйынса яҙған яҙмалары, Ғарифулла Кейековтың "Башҡорт тарихы", Мөнир Һаҙыевтың "Башҡорт тарихы" тигән хеҙмәттәре, Риза Фәхретдиновтың улы Ғәбдрахман Фәхретдиновтың башҡорт тарихы буйынса хеҙмәттәре лә совет осорона тиклем үк яҙылған. Ә бына беҙҙең әҙәбиәт ғилеме буйынса шулай уҡ совет осорона тиклем үк Риза Фәхретдинов, Ғәли Соҡорой тикшеренеүҙәр алып бара, уларҙың яҙмаларында әҙәбиәтте, әҙәби әҫәрҙе тикшереү элементтары күҙәтелә. Йәғни институт 1922 йылда ғына ла барлыҡҡа килмәгән, уның шытымдары, тамырҙары беҙҙең мәҙәниәттә революцияға тиклем үк булған.

**З. Рәхмәтуллина.** Ғөмүмән әйткәндә, 18-19-сы быуаттарҙа башҡорт төйәгенә шул хәтлем күп экспедициялар ойошторола. Лепехин, Кириллов, Никольский, Руденколар башҡорт ере, тәбиғәтенә бәйле бик күп этнографик, тарихи мәғлүмәттәр биргәндәр. Бына ошо фәнни байлыҡҡа һәм үҙебеҙҙең башҡорт тикшереүселәренең материалдарына таянып, яңы ғына тыуған совет республикаһында йәмғиәт үҙенең эшмәкәрлеген башлап ебәргән. Бөтөн иғтибарын башҡорт мәҙәниәтен, этнографияһын, телен ғилми тикшеренеүгә йүнәлтһә лә, бер үк ваҡытта ул башҡа халыҡтарҙың да үҙенсәлеген өйрәнеп, сағыштырып эшләүҙе маҡсат итеп ала. Тимәк, йәмғиәт полимилләтле тикшеренеү үҙәге була. 1922 йылда Башҡортостанда буласаҡ академик өйрәнеү структураларының бәләкәй генә майҙансығы бына шулай эш башлап ебәреп, 100 йыл эсендә ул үҫешкән, күренекле ҙур институтҡа әйләнде.

Бөгөнгө көндә институтыбыҙ бик күп сит ил фәнни ойошмалар, үҙәктәр менән хеҙмәттәшлек итә. Үҙебеҙҙең Башҡортостанды донъя кимәленә сығарған ҡаҙаныштарыбыҙ ҙа күп. 1988 йылда беҙҙең археолог Анатолий Пшеничнюк етәкләгән экспедиция Ырымбур өлкәһендә бер батша ҡурғанын соҡоп, сармат коллекцияһын таба. Этнограф-антрополог Ринат Мөхәмәт улы Йосоповтың краниологик коллекцияһын телгә алмау мөмкин түгел. Ғалим ғүмере буйы баш һөйәктәрен өйрәнеп, башҡорттоң төрлө типтарын асты. Бөгөнгө көндә беҙҙең институтта 1300-ҙән ашыу баш һөйәге һаҡлана. Антрополог Алексей Нечвалода Герасимов методикаһы буйынса ошо һөйәктәрҙән кеше йөҙөн һынландыра. Был ғалимдарыбыҙҙы сит илдәрҙә лә яҡшы беләләр. Асыштар етерлек институтта, мәҫәлән, Рәсәй кимәлендә рус теленән һуң икенсе булып башҡорт теленең Машина фонды булдырылды.

**Ысынлап та, ҡулланыусыларҙан Машина корпусының бик уңайлы булыуы тураһында йыш ҡына ишетергә тура килә. Тимәк, бөгөнгө көн талабын яҡшы белеп эшләйһегеҙ, сөнки Рәсәй кимәлендә икенсе булып фонд ойоштороу - үҙе үк юғары баһа. Зиннур Әмир улы, дөйөм эш ҡасан башланды?**

**З. Сиражетдинов.** Лаборатория 2002 йылда төҙөлһә, беҙ 2005 йылдан эшләй башланыҡ. Тап шул йылда башҡорт теле буйынса Дәүләт программаһы ҡабул ителгәйне. Унда шулай уҡ лаборатория төҙөү мәсьәләһе лә ҡаралды, йәғни, мәғлүмәти-технология өлкәһендә мөһим булған программаларҙы локалләштереү, башҡортлаштырыу бурысы ҡуйылды, был эш беҙҙең лабораторияға йөкмәтелде, һәм беҙ Файн Ридер, лексикон, клавиатура программаһы, шрифттар менән эшләй башланыҡ. Элек бит текстарҙы ҡул менән йыйып ултыра торғайныҡ, Файн Ридер программаһы сканланған тексты автоматик рәүештә компьютерға индерә. "Хэппи Хаус" тигән донъя кимәлендәге компанияның шундай Файн Ридер программаһын, "Лексикон" тигән текст мөхәррирен, аҙаҡ "Арсенал" тигән компания менән шрифттарҙы үҙебеҙгә яраҡлаштырҙыҡ. Былар бөтәһе лә башҡорт теленең мәғлүмәт технологияһына инер өсөн үҙенә күрә бер инфраструктура булды. Хәтерләйһегеҙҙер, башҡорт шрифттары ла төрлө ине бит. Бер ергә ебәрһәң, унда уҡый алмайҙар, сөнки унда икенсе төрлө башҡорт шрифты ҡуйылған ине. Клавиатурала башҡорт хәрефтәре ҡайһы баҫмаҡта, ниндәй тәртиптә ҡуйылырға тейеш? Беҙ дөйөм кодировка ҡалыптарын эшләнек. Аҙаҡтан ошо кодировканы Майкрософт ҡабул итте. Артабан башҡорт теленең мәғлүмәт базаларын төҙөү буйынса эшкә керештек. Компьютерға һүҙлектәрҙе, башҡа төрлө мәғлүмәттәрҙе индерә башланыҡ. Ана шул ваҡытта беҙҙең башта, башҡорт теленең фондын эшләргә кәрәк, тигән фекер тыуҙы. Хәҙерге көндә башҡорт теленең Машина фонды хәтәр ҙурайып китте, ул ун ике мәғлүмәт базаһынан тора. Институттың картотекаһы бар, унда ике миллион карточка тупланған, ул "Генераль фонд картотекаһы" тип атала. Әммә бөтөн һүҙҙәр ҙә әле уға инеп бөтмәгән, шул эште артабан дауам итергә кәрәк. Артабан лексикография фондын булдырҙыҡ. Беҙҙең башҡорт телендә төрлө-төрлө 58 һүҙлек бар. Ике телдәге һүҙлектәр, мәктәп өсөн тәғәйенләнгәне, аңлатма һүҙлеге, терминология һүҙлеге һ.б. Күҙ алдына килтерәһегеҙме? Хәҙер башҡорт теленең корпустарын төҙөй башланыҡ.

**"Корпус" тигәндә нисек аңларға, был термин менән һәр уҡыусы ла таныш түгел бит...**

**З. Сиражетдинов.** Компьютерҙың базаһына текстар индерелә, һәм "Анализатор" тип аталған программалар ошо текстар менән эшләп, кешегә кәрәкле мәғлүмәтте табып бирә. Беҙ эшләгән корпустың әһәмиәте нимәлә? Бында 30 миллионлыҡ база тупланған. Тикшеренеүсе унда инә лә, кәрәкле һүҙгә баҫа, һәм артабан был һүҙ тураһында мәғлүмәт, белешмә килеп тә сыға. Корпус шул яҡтан бик файҙалы. Мәктәп уҡыусыһы өсөн әсбап яҙғандарға һүҙлектәр кәрәк. Айырым темаға һөйләмдәр, теманы аңлатыр өсөн һүрәттәр талап ителһә, автор корпусҡа инә лә, кәрәкле мәғлүмәтте табып та ала.

**З. Рәхмәтуллина.** Йыл башында беҙ тел бүлеге ғилемендә "Ҡулланмалы лингвистика һәм диалектология" тигән айырым бер бүлексә булдырҙыҡ. Диалектология элек-электән беҙҙең институттың төп йүнәлештәренең береһе булған. Легендар ғалимдарыбыҙ С. Миржанова, Э. Ишбирҙин, Н. Мәҡсүтова шул тема менән шөғөлләнгәндәр. Нишләптер, һуңғараҡ был өлкәне өйрәнеү әкренләп юҡҡа сыҡҡан. Ә бөгөн ил, хатта донъя кимәлендә лә телдәргә һәм уларҙың диалекттарына иғтибар ҙур. Халыҡ-ара кимәлдә, Рәсәйҙә "Лингвоток" тигән платформа эшләй. Телдәрҙе яҡлау ниәте менән булдырылған был платформаға бөтөн телдәр, уларҙың диалекттары, хатта "үлгән" телдәр ҙә индерелгән. Икенсенән, диалекттар проблемаһы халҡыбыҙ өсөн мөһим булып ҡала. Мәҫәлән, кемдер берәү башҡорт теленең диалектында һөйләшә, ләкин ул әҙәби телдә һөйләшмәгәс, үҙен кем тип танырға ла белмәй. Башҡорт теленең көнбайыш һөйләше менән дә шулайыраҡ килеп сыҡты бит. Электән эшләп килгән диалектология өлкәһен өйрәнеүҙе яңынан тергеҙеү көнүҙәк. Милләтәшебеҙ бөгөн Ҡытайҙамы, әллә Австралиялаmы, үҙенең ниндәй диалектта һөйләгәнен белеп, үҙен милли яҡтан идентификациялап йәшәр ине.

Мәскәүҙә РФ Академияһында Системалы планлаштырыу тигән институт эшләй. 2021 йылдың октябрь айында беҙҙең Хөкүмәт ошо институт менән Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты нигеҙендә "Лингводок" платформаһында башҡорт теле һәм уның һөйләштәрен өйрәнеү буйынса лаборатория төҙөү тураһында килешеү төҙөнө. Беҙ башҡорт теле һәм уның барлыҡ һөйләштәрен дә ошо платформаға индерергә тейешбеҙ. Ғилми хеҙмәткәребеҙ Рәмилә Кәримова - проекттың етәксеһе. Яңыраҡ ҡына йәш тикшеренеүселәребеҙ "Лингводок" платформаһында Грант отто. Ул диалектология бүлексәһенә нигеҙләнә, йәштәргә айырым бүлмә биреләсәк һәм бергә эшләй башлаяҡбыҙ. Башҡорт теленең терминологик базаһы ла төҙөлгән. Был эш тә, Машина корпу-

***М. Өмөтбаевтың ниндәй ҙур шәхес булыуын халҡыбыҙға һаман да тейешенсә еткерә алғаныбыҙ юҡ. 1887 йылда Ҡырымда ҙур шау-шыу ҡуба. Ҡырым татарҙары араһында вәҡеф буйынса, йәғни кеше үҙ теләге менән мәсеткә, дини ойошмаға үҙенең байлығын мираҫ итеп тапшырһа, шуны бүлеү мәсьәләһе буйынса бик ҡаты талаш китә, һәм Рәсәй Хөкүмәте тикшереү өсөн махсус комиссия ойоштора. Уның төп белгесе, комиссияның ғилми сәркәтибе итеп М. Өмөтбаевты саҡыралар. Сөнки уның кеүек Ҡырым татарҙары һәм рус телен яҡшы белгән кешене таба алмағандар. Бына шундай шәхестәребеҙҙе һаман да баһалап еткерә алмайбыҙ. Өмөтбаевҡа бағышланған нимә бар? Тыуған ауылында ғына һәйкәле, музейы бар. Ә бит ул оҙаҡ йылдар Өфөлә йәшәгән, земствоның ағзаһы булған һәм башҡорттар араһында Рус география йәмғиәтенең берҙән-бер ағзаһы булып торған.***

✓ ***Беҙҙең иң танылған ғалимдарыбыҙ Ғайса Хөсәйенов, Зиннур Ураҡсин Башҡортостан Фәндәр академияһында мөхбир-ағза булып эшләнеләр. Дамир Жәүәт улы Вәлиевты ла телгә алмай булмай.***

# ИНСТИТУТ... билдәләй



сы ла, "Лингводок" платформаһындағы башҡорт теле һәм унын һөйләштәре - барыһы ла башҡорт телен ҡурсалауға, яҡлауға йүнәлтелгән, сөнки ЮНЕСКО мәғлүмәттәре буйынса, 140-ҡа яҡын Рәсәй халыҡтарының телдәре юғалыу хәүефендә. Беҙҙең башҡорт теле лә ошо исемлеккә ингән. Институттың матур йүнәлешле эше ыңғай һөҙөмтәләр бирер, тип уйлайбыҙ.

**Беҙҙең тормош әҙәбиәттән айырылғыһыҙ. Миңлеғәли Хөсәйен улы, һеҙ етәкләгән әҙәбиәт бүлеге иң боронғо бүлектәрҙән һанала...**

**М. Нәҙерғолов.** Эйе, йәмғиәт сағында ла беҙҙең бүлек булған. Ғ Амантай, Ә. Харисовтарҙан башлап, бик күп күренекле ғалимдар эшләп киткән. Иң ҙур ҡаҙаныштар тип шуны әйтер инем: 1990-1996 йылдарҙа Ғайса Хөсәйенов етәкселегендә башҡорт телендә "Башҡорт әҙәбиәте тарихы"ның алты томлығын әҙерләп сығарғайныҡ. Тырыштыра торғас, совет осоронан һуңғы әҙәбиәтте тикшереп, 2019 йылда 7-се томын нәшерләүгә өлгәштек. 7 том сыҡҡас, руссаһын әҙерләргә тотоноп киттек. 2012 йылда - 1-се, 2014 йылда - 2-се, 2016 йылда 3-сө томы донъя күрҙе. Ғүмерҙә булмаған хәл, тиһәк тә була, сөнки совет осоронда рус телендә "История башкирской советской литературы" тигән бер генә китап сыҡҡан булған. Бөгөн инде хәҙерге әҙәбиәтебеҙгә арналған 4-се томын эшләйбеҙ. Эш бик ҡыҙыу бара. Үҙебеҙ генә түгел, юғары уҡыу йорттары ғалимдарын, уҡытыусыларҙы йәлеп иткәнбеҙ.

**Икенсе урындарҙа эшләгән белгестәргә мөрәжәғәт итеүҙең зарурлығы нимәлә?**

**М. Нәҙерғолов.** Айырым өлкәлә төплө белгес бар икән, беҙ шуларға мөрәжәғәт итәбеҙ. Әйтәйек, проза буйынса филология фәндәре докторы, күп китаптар авторы Гөлфирә Гәрәеваны йәлеп иттек. Драматургия өлөшөн филология фәндәре докторы Риф Әхмәҙиев яҙҙы. Балалар әҙәбиәтен ғалимә Ғәҙилә Бүләкованан яҙҙырттыҡ. Төп өлөшө, әлбиттә, үҙебеҙҙең хеҙмәткәрҙәр тарафынан башҡарылды. Руссаһын әҙерләгәндә шулай уҡ ситтән ғалимдарҙы йәлеп итергә тура киләсәк.

Тағы ла бер яңылығыбыҙ менән уртаҡлашам. Зөһрә Йыһанур ҡыҙының тырышлығы менән институтҡа инглиз теле буйынса белгес алдыҡ. Айгөл Альберт ҡыҙы Ҡолоева Англияла эшләп ҡайтҡан бик төплө белгес, ул башҡорт әҙәбиәте тарихын бер томда инглиз телендә әҙерләп сығарыу эшен башлап ебәрҙе һәм инде ҡайһы бер өлөштәрен миңә тапшырып та ҡуйҙы.

Беҙҙең әҙәбиәт ғилеме бүлеге - шулай уҡ институтыбыҙҙағы археографик тикшеренеүҙәргә нигеҙ һалған бүлек. Боронғо яҙмаларҙы өйрәнә торған фән совет осорона тиклем үк башланған. Риза Фәхретдиновтың боронғо ҡулъяҙмалар буйынса яҙмалары, Ғарифулла Кейековтың ҡәбер таштарын өйрәнеүе, боронғо ҡулъяҙмаларҙы йыйып йөрөүе - был эштең шул саҡтарҙа алып барылыуын раҫлай. Археографик материалдарҙы беҙҙең институт 50-се йылдарҙа комплекслы экспедициялар мәлендә актив ҡына йыйған. СССР Фәндәр академияһының археографик комиссияһы булдырылғас, 1973 йылда был эшкә системалы рәүештә ныҡлап тотоналар. Һәм беҙҙең әҙәбиәт бүлеге ғалимдары даими рәүештә йыл да, хатта йылына бер нисә тапҡыр экспедицияла була.

Бына мин үҙем институтта 80-се йылдан бирле эшләйем. Беҙ йыл да экспедицияға сыға торғайныҡ. Аҙаҡ инде, ил емерелгәс, был эш бер ни тиклем туҡталып ҡалғайны. Гранттар иҫәбенә йәнә башлап ебәрҙек. Совет осоронан һуң, 2009 йылда, тәүге экспедицияға сыға алдыҡ. Төньяҡ-көнсығыш райондарҙы тотошлай тикшереү өсөн 4-5 экспедиция ойошторҙоҡ. Шул яҡтағы бөтөн ауылдарҙа, мәсеттәрҙә булып, зыяраттарҙағы ҡәбер таштарын уҡып, бер үк ваҡытта фольклор материалдары йыйҙыҡ. Беҙҙең иҫ китмәле бай ҡулъяҙмалар фонды бар, бүлегебеҙҙең бер төркөм ғалимдары шунда эшләй ине, һәм 2014 йылда Көнсығыш ҡулъяҙмалар бүлеге итеп, айырып сығарҙыҡ. Хәҙер унда ете меңгә яҡын боронғо ҡулъяҙмалар, баҫма китаптар һаҡлана. Уларҙы каталогҡа индереү, һанландырыу, һаҡлау эштәре бара, шулай ҙа был бүлектең көсө самалы ғына. Әгәр ҙә мөмкинлек булһа, йәш белгестәр менән көсәйтеү яҡшы булыр ине. Ғәрәп, фарсы, иҫке төрки телендәге текстарҙы тәржемә итерлек белгестәр кәрәк әле.

**З. Рәхмәтуллина.** 70-се йылдарҙа барлыҡҡа килгән фонд бөгөнгө көндә "Ғайса Хөсәйенов исемендәге көнсығыш ҡулъяҙмалары фонды" тигән исем йөрөтә. Унда хатта иҫәпкә алынмағандары менән ҡулъяҙмалар һигеҙ меңгә яҡын булып китә. Бында килгәс, мин үҙем аптыраным. Шундай тәжрибәле, үҙ эшенә бирелгән белгестәр матур итеп эшләйҙәр. Абруйлы, халыҡ-ара кимәлдә танылған фәнни журналдарҙа мәҡәләләре сығып, монографиялары баҫылып тора. Халыҡ-ара форумдар ҙа йыш уҙғарыла. Пандемияға ҡарамайынса, онлайн нигеҙҙә булһа ла, диалектология буйынса форум уҙғарҙыҡ. Унда сит ил ғалимдары теләп ҡатнашты, шундай матур сығыштар булды.

**Миңлеғәли Хөсәйен улы, һеҙ арҙаҡлы шәхестәребеҙҙең исемдәрен халыҡҡа кире ҡайтарыу өсөн шәхсән күп эшләнегеҙ. Кемдәрҙең эшмәкәрлеген өйрәнеү айырыуса ныҡ тәьҫир итте?**

**М. Нәҙерғолов.** Онотола яҙған үҙебеҙҙең күп кенә башҡорт шәхестәрен - яҙыусылары, ғалимдарының исемдәрен халыҡҡа кире ҡайтарырға насип булды. Университетта уҡығанда уҡ мин Ғәли Соҡоройҙоң ижады менән шөғөлләнә башланым, диплом эшен уның буйынса яҙҙым. 1993 йылда "Шәм яҡтыһы" тигән уның әлегә тиклем һаман да берҙән-бер булып ҡалған йыйынтығын сығарғайным. Аҙаҡ Соҡоройҙоң улы Ғарифулла Кейековтың да ижады менән ҡыҙыҡһынып киттем, уның хаҡында китап сығарҙым. Фәтхелҡадир Сөләймәновтың (Абдулҡадир Инан) әҙәби әҫәрҙәрен өйрәнеп, "Башҡорт йәйләүендә" тигән исем менән йыйынтығын, Фазыл Туйкиндың, Риза Фәхретдиновтың әҙәби әҫәрҙәре йыйынтығын сығарҙым. Башҡарған эштәр күп булды. 1993 йылда Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин саҡырып алды ла: "Беҙҙең ғилми архивта М. Өмөтбаевтың алты томлыҡ фонды ята. Шуға тасуирлама яҙ әле", - тине. 11 телдә яҙылған 532 ҡалын документ. Ғәрәп, фарсы, төрөк, Ҡырым татарҙары, иҫке төрки, татар, башҡорт, рус, хатта француз, поляк телдәрендә яҙылғандары бар, мин аптырап ҡалдым. "Бөтөн эшеңде ташлайһың, тик шуның менән генә ултыраһың, һиңә ярты йыл ваҡыт бирәм", тине етәксе. Документтарҙың күбеһе ҡулъяҙмала ине. Шул фонд менән ултырып, күҙемдең нурын юғалтаяҙҙым. Ныҡ көсәнергә тура килде. 1995 йылда "М. Өмөтбаев фондының ҡыҫҡаса тасуирламаһы" тигән китап сығарҙым. 2016 йылда бер ни тиклем төҙәтмәләр индереп, уны ҡабатлап сығарҙыҡ. М. Өмөтбаевтың мираҫы буйынса бик күп кешеләр хеҙмәттәр яҙған булһалар ҙа, уның архивын берәү ҙә ентекләп өйрәнмәгән булып сыҡты. Хәҙер шул архив буйынса байтаҡ мәҡәләләр баҫтыра башланыҡ.

Таңһылыу Кусимова апай "Башҡорт исемдәре" тигән китапты заманында ике тапҡыр сығарғайны. Халыҡҡа шул тиклем кәрәкле китап булды ул. Ләкин башҡорт исемдәрен йыйыу, өйрәнеү менән иң беренсе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев шөғөлләнә башлаған, уны берәү ҙә бер ҡасан да телгә алғаны юҡ. М. Өмөтбаевтың ниндәй ҙур шәхес булыуын халҡыбыҙға һаман да тейешенсә еткерә алғаныбыҙ юҡ. 1887 йылда Ҡырымда ҙур шау-шыу ҡуба. Ҡырым татарҙары араһында вәкеф буйынса, йәғни кеше үҙ теләге менән мәсеткә, дини ойошмаға үҙенең байлығын мираҫ итеп тапшырһа, шуны бүлеү мәсьәләһе буйынса бик ҡаты талаш китә, һәм Рәсәй Хөкүмәте тикшереү өсөн махсус комиссия ойоштора. Уның төп белгесе, комиссияның ғилми сәркәтибе итеп М. Өмөтбаевты саҡыралар. Сөнки уның кеүек Ҡырым татарҙары һәм рус телен яҡшы белгән кешене таба алмағандар. Бына шундай шәхестәребеҙҙе һаман да баһалап еткерә алмайбыҙ. Өмөтбаевҡа бағышланған нимә бар? Тыуған ауылында ғына һәйкәле, музейы бар. Ә бит ул оҙаҡ йылдар Өфөлә йәшәгән, земствоның ағзаһы булған һәм башҡорттар араһында Рус география йәмғиәтенең берҙән-бер ағзаһы булып торған.

**Институт ғалимдарының төрлө сараларҙа ҡатнашыуы, фән ҡаҙаныштары менән таныштырып барыуын яҡшы беләбеҙ. Матбуғат баҫмаларында, радиола улар менән әңгәмәләр ҡорған бар. Ысынлап та, башҡорт ғалимдары хеҙмәте донъя ҡаҙанышы булып тора.**

**З. Рәхмәтуллина.** Эйе, эштәр төрлө яҡлап алып барыла. Үҙ даирәбеҙҙә генә ҡайнамайбыҙ, фән эшмәкәрҙәребеҙ, ғалимдарыбыҙ радио-телевидениела сығыш яһайҙар. Халыҡ яратып ҡараған күп тапшырыуҙарҙа - улар эксперт.

Археологтар Шүлгәнташ мәмерйәһен ЮНЕСКО-ның халыҡ-ара теҙмәһенә индереү өсөн күп тырышлыҡ һалды. Геопарктарға беҙҙең ғалимдар экспертиза үткәреп, баһа бирә. Берәй ерҙә төҙөлөш башларға итһәләр, тарихи-археологик мираҫ өҫтөндә төҙөлмәйме, тип, беҙгә мөрәжәғәт итәләр. Ғалимдарыбыҙ тикшереп, уларға тейешле һығымталарын яһап бирә. Институттың республикаға күрһәткән ярҙамы шул хәтлем ҙур. Әҙәбиәт, тел белгестәре уҡыусылар өсөн әсбаптар яҙа, юғары уҡыу йорттарында уҡыталар, дәүләт аттестация комиссияларында, берҙәм дәүләт имтихандарын үткәреүҙә ҡатнашалар.

Беҙҙең институт федераль Фән һәм юғары белем биреү министрлығына ҡараһа ла, үҙебеҙҙең үҙенсәлекле милли йөҙөбөҙ бар - башҡорт милли йөҙлө институт. Шул уҡ ваҡытта, башҡорт тематикаһы менән генә сикләнмәйбеҙ, ошо төбәктең, Төньяҡ Уралдың тарихын, археологияһын, мәҙәниәтен бергә бәйләп тикшереүҙәр алып барабыҙ. Федераль кимәлдә маҡсатлы, системалы рәүештә башҡорт рухын, мәҙәниәтен, этнологияһын, телен, фольклорын, тарихын өйрәнәбеҙ.

**М. Нәҙерғолов.** 90-сы йылдарҙа илдә барған төрлө үҙгәрештәр мәлендә Зиннур Ғәзиз улы Ураҡсин институтты һаҡлап ҡалыуға ҙур өлөш индерҙе. Шул йылдарҙы, шул көндәрҙе бик яҡшы хәтерләйем. Зиннур Ғәзиз улы бөтөн институтты, ғилми советты йыйып, кәңәшләшеп эшләне: "Беҙ Рәсәй Фәндәр академияһы составында ҡалырға тейешбеҙ, шунда ғына беҙҙең институт үҙенең йөҙөн һаҡлап алып ҡаласаҡ, финанслау тейешле кимәлдә булырына ла ышанам", - тине. Коллектив уның тәҡдимен хупланы. Ул саҡтағы Хөкүмәттән: "Ни өсөн һеҙ республика Фәндәр академияһында түгелһегеҙ?" - тип, баҫым яһаусылар ҙа булды. Шуны асыҡ әйтеп китергә кәрәк: беҙ Рәсәй Фәндәр академияһында булһаҡ та, асылда, бөтөн эшебеҙ - республика өсөн.

Беҙҙең иң танылған ғалимдарыбыҙ Ғайса Хөсәйенов, Зиннур Ураҡсин Башҡортостан Фәндәр академияһында мөхбир-ағза булып эшләнеләр. Беҙҙең институт менән заманында бик актив хеҙмәттәшлек иткән Дамир Жәүәт улы Вәлиевты телгә алмай булмай. Улар Башҡортостан Фәндәр академияһын булдырыуға ҙур көс һалған шәхестәр.

**З. Рәхмәтуллина.** Эйе, статус ике төрлө булһа ла, маҡсаттар бер: башҡорт халҡына бәйле бөтөн тармаҡтарҙы өйрәнеү. Бөгөнгө Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты баштан уҡ бөртөкләп йыйылған фәнни традицияларҙы дауам итә, уларҙы яңы кимәлгә күтәреп, яҡлап, үҫтереп килә.

**Фәрзәнә АҠБУЛАТОВА**
**әңгәмәләште.**

**✓ Осҡон, юл айырсаһына етеү менән, ауыҙлыҡты тешләп, алға йомолдо. Ул артта йөрөп өйрәнмәгән. Мин тубыҡланған килеш ҡарап бара инем, көтөлмәгәнлектән, хатта салҡан ауып киттем.**



# БЕҘҘӘ ЛӘ ТУЙ

Иҙрис МӨҘӘРИС-НОҒМАНОВ

Хикәйә-хәтирә

* * *

Минең һиҙемләү раҫ сыҡты: ҡыҫҡа ялдан һуң Осҡондо беҙҙең еңел санаға ектеләр. Теге ике атты - арттағы ылауға. Тәртә-дуғаларға ал таҫмалар бәйләнек.

- Минә ҡарап торма, Мөҙәрис ҡустым, һебә башланыу менән ебәр Осҡондо, - тип өйрәтте Муллайән апа атайымды. Үҙе арғымаҡтың осаһынан иркәләп һөйөп ҡуйҙы. - Әйҙә, тағы бер күрһәт үҙеңде, хайуанҡай, һынатма.

Ҡуҙғалып, бәләкәй генә ҡалҡыуға күтәрелеүебеҙ булды, беҙҙе дүрт күҙ менән көтөп торған ҡаршы алыусылар күренде. Өшөгәндәрҙер инде, ихлас ҡыуанышып киттеләр. Йоланы башҡарып, алып килгән һыйҙарынан аҙ ғына ауыҙ иткәс тә:

- Давай, ҡоҙалар, әйҙәрегеҙ беҙҙең арттан, - тине егеттәрҙең береһе әллә мәрәкәләп, әллә ихлас итеп.

- Әйҙәрә алһағыҙ... - Икенсеһе ҙур ауыҙын йырҙы. Белһә икән алда нимә көткәнен.

Шулай ҙа һиҙеп торам, Осҡондо күргәс тә, күҙҙәре янып китте тегеләрҙең. Янырлыҡ та шул беҙҙең Осҡон!

Башта алдағы ылау артынан шөйлә тыныс ҡына барған Осҡон, юл айырсаһына етеү менән, ауыҙлыҡты тешләп, алға йомолдо. Ул артта йөрөп өйрәнмәгән. Мин тубыҡланған килеш ҡарап бара инем, көтөлмәгәнлектән, хатта салҡан ауып киттем. Әсәйем шунда уҡ ҡосағына алды. Шунан китте уҙыш! Саңҡ-соңҡ иткән дағалы тояҡ тауышы, сана табандарының ташҡа ышҡылып шағыр-шоғор килгәне генә ишетелә. Иҙелеп ятҡан юлдан бысраҡ сәсрәй. Атайым нисек юлға ҡарап баралыр? Ҡоҙалар ҙа күренмәй. Беҙҙең артта ла, алда ла юҡ улар, ғәжәп. Бара биргәс кенә шәйләп алдым тегеләрҙе. Үҙе бейек, үҙе текә яр аҫтынан сабалар икән. Унда әле ҡар мул, ҡышҡы юл шул килеш тиерлек. Беҙгә әйтмәгәндәр ҙә бит әле. Хәрәмләшкәндәр. Хәрәмдең төртөрөн белмәйҙәрме икән? Ҡары бөтөп барған шау ташлы юлдан быларҙың аттары саба алмаҫ, тип өмөтләнгән булғандарҙыр, күрәһең. Әммә ләкин улар нык яңылышты: Осҡон ише сәмле бәйге толпарына ҡарһыҙ юлың ни ҙә, шаулап ятҡан ташың ни. Йәтеш сананы шырпы ҡабындай йәлпелдәтеп, күҙенә аҡ-ҡара күренмәй оса ғына!

Мин ян-яғыма ҡарап алдым. Артта, оҙон ялдарын ҡаршы елгә елберләтеп, ауыр көүҙәле пар ат саба. Муллайән апа, дилбегә осон болғай-болғай һыҙғырып, уларҙы дәртләндерә. Һай сәмле ир! Аҫта, Ҡыҙыл үҙәне буйлап ҡоҙалар елә. Аттарын күпме генә ҡайыҙлап ҡыумаһындар, ҡалыша барыуҙары күренеп тора. Ә атайым, киреһенсә, Осҡондо тыйыңҡырап килә. Әсәйем, ҡурҡышынанмы, тәрәккә сат йәбешкән дә, сана мөйөшөнә боҫҡан. Мин, киреһенсә, бәйге ҡомарына бирелеүҙән ҡалҡына биреп һөрән һалдым:

- Осҡо-он! Бирешмә! - Үҙем дә абайламай ҡалдым.

- Ултыр! Хәҙер тәгәрәп ҡалаһың бит! - тине атайым асыулана биреп.

Ел ҡапҡаһы алдан асып ҡуйылған тар ихатаға беренсе булып килеп индек! Нык ярһыуҙан тынысланa алмайынса бейеп торған Осҡондоң еүеш һыртына шунда уҡ сәскәле тауар - һебә ябыуы - килтереп яптылар. Урамда тамаша ҡылып, ҡаршы алыусылар һоҡланыуҙарын йәшермәне:

- Һай, малҡа-ай!

- Арғымаҡ, тигәс тә, арғымаҡ икән!

- Ат түгел был - осҡон! - тип беҙҙең толпарҙы маҡтап бөтә алманылар.

Муллайән апа, маһая биреп:

- Уның ҡушаматы ла - Осҡон, ҡоҙалар, - тип ҡуйҙы. Маһайһа һуң. Хаҡы бар. Кем ҡарай аттарҙы - ул ҡарай.

Мәсхәрәгә ҡалған баяғы йәш ҡоҙалар, ихатаға инеп тә тормаҫтан, аҡ күбеккә төшкән аттарының башын ҡоймаға терәп, ниҙер һөйләшеп торҙолар ҙа китеп барҙылар. Уларҙы, хәрәмләшкәндәре өсөндәр, тием, өйгә саҡырыусы кеше лә булманы. Эйе, һебәлә еңелгән оятҡа ҡала. Хәрәмләшеп еңелгән бигерәк тә. Беҙҙә шулай. Бында ла шулай икән. Һебә - ҡайҙа ла һебә инде.

Ҡоҙа төшкән йорттоң тупһаһын ашатлап инеүгә, йөҙө ҡояш кеүек балҡыған атайыма һимеҙ тәкә итенән һебәлек һоғондорҙолар. Хатта үҙемә лә өләш сыҡты һебәлектән. Әнинә сыҡмаҫҡа? Һебә сапҡанда санала булдыммы? Булдым. Бәйгелә еңеүселәрҙе хөрмәт итә беләләр шул үҙебеҙҙә.

Был юлы туй ғәмәлендә минең ҡатнашлыҡ булманы тиерлек. Ят ауылдың урамын күрергә тип тәүге сыҡҡанымда ҡоҙағыйҙарҙың өйө алдынан ғына ағып үткән Ҡыҙыл әсир итте. Йылғаның әле шәре ҡаплап өлгөрмәгән урынында, гүйә быяла ише ялтырап, үҙенә тартып ятҡан өлөшөндә минән олораҡ та, кесерәк тә малайҙар менән ҡыҙҙар гөж килә. Кемдер сәмләнеп китеп сәкән һуҡһа, кемеһеләр былай ғына шыуа. Ярға яҡыныраҡ урындан мәке уйып, ҡармаҡ менән мәскәүгә балыҡ тотоусылар ҙа күренә. Быныһы инде мине бөтөнләй шаҡ ҡатырҙы. Боҙ өҫтөндә ҡармаҡ һалып ултырған кешене ошоғаса күргәнем юҡ ине әле. Бар нәмә туңып боҙға әйләнгән мәлдә селәүгә ҡайҙан алалар тиһең?..

Тиҙ арала тиҫтерҙәрем менән таныша һалдым да аралашып киттем. Бында ла шул уҡ, беҙҙәге кеүек уҡ, малайҙар икән. Аҙна буйына улар мине, ҡоҙа, тип кенә алып йөрөнөләр, һәр кеме үҙенсә хөрмәт күрһәтергә тырышып торҙо. Ни тиһәң дә төп ҡоҙағыйҙың яратҡан ейәне бит. Өҫтәүенә, ҡомарлы һебә бәйгеһендә еңеүсе.

Туй инде аҙағына яҡынлашҡанда, апайыма һыу юлы күрһәттеләр. Мин шунда юл башлап барыусы һәләк матур ҡоҙасама ғашиҡ булдым. Һылыулығы менән хайран итер ҡыҙ минән күпкә өлкән, әммә мөхәббәт йәш айырамы?.. Ул ҡоҙасам аҙаҡ оҙаҡ ваҡыт төштәремә кереп һөйөндөрәсәк әле.

Беҙ ҡайтабыҙ тигән көндөң иртәһендә, ҡапыл һыуытып ебәрҙе лә, мул ғына итеп ҡар яуып һалып ҡуйҙы. Әҙәм көлдөрөп, ҡара ерҙән сана һөйрәп ҡайтабыҙ икән, тип бошонған атайым ҡыуанып бөтә алманы.

Хушлашҡанда, һый-хөрмәт кеүек, шаян һүҙе лә, уйын-көлкөһө лә, баш әйләндергес күмәк бейеүе лә етерлек булды. Ҡоҙа-ҡоҙасаларға ҡарап, былар нисек арымайҙар икән, тип аптырап ҡуйҙым хатта. Әллә беҙҙең ҡайтып китеүгә ҡыуаныуҙары шулмы? Олатайым һымаҡ ире һуғыштан ҡайта алмаған төп ҡоҙағый, әҙәп һаҡлап, өләсәйем менән бер мөйөштә сөкөрләшеп кенә ултырҙы. Уларҙың һөйләшеп һүҙе бөтмәй ине, ахыры. Килештеләр, тип һөйөндөм мин, апайым менән еҙнәм дә шулай йәшәп китһәләр...

Мине оҙатырға, тип яңы дуҫарымдың барыһы ла йыйылды. Уларҙы тәмлекәстәр менән һыйланым. Ихлас күңелдән. Толопҡа төрөнөп, арҡаны баш ҡарамаға терәгән көйө шау-шыулы ихатанан сығып киткәс тә, йырлашып-бейешеп ҡул болғай-болғай тороп ҡалыусыларға оҙаҡ ҡарап барҙым. Көмөш тәңкәләре сыңлап торған елпелдәкле күлдәк кейеп, сәскәле яулыһын ҡайырып ябынған Фәриҙә апайым улар араһында ине. Уның янында... матур ҡоҙасам. Мине һағыш солғап алды, күҙҙәремә йәш эркелде.

Әллә ниндәй ебегәнмен инде: саҡ ҡына тулҡынландырғыс бер нәмә булдымы - хистәргә бирелә һалып, илап барам. Әле хушлашырға ла өлгөрмәгәнбеҙ, ә мин апайым менән ҡоҙасамды һағынып, юҡһына ла башланым. Күңелем - гүйә ҡыҙҙар күңеле, бигерәк нәфис, бигерәк нескә.

Күҙ йәштәремде атайыма күрһәтмәҫ өсөн толопто башым аша ябына һалдым. Төрлө уйҙарға бирелә-бирелә, тимер табандарҙың йәш ҡарға ышҡылып күңелле лә, һағышлы ла йыр һуҙғанын, аттарҙың бышҡырышҡанын, атайымдың, уларҙы дәртләндереп, һирәк-һаяҡ һыҙғырып ҡуйыуын тыңлап бара торғас, үҙем дә һиҙмәҫтән, ойоп киткәнмен. Күрәһең, арыу етеп, йонсотҡан. Уйын эшме - ҡоҙа үткәреүе.

Ошо ғүмер-ғүмерлеккә иҫтә ҡалырлыҡ матур көндәрҙән һуң күп ваҡыт та үтмәҫ, ауыр сирҙән Муллайән апа ла, атайым да мәлһеҙ вафат булырҙар, ярты көүҙәһен фалиж онтаған өләсәйемдә ахыр көндәренәсә ҡаҙер итеп, һуңғы юлға оҙатҡандан һуң, сәскәләй өс ҡыҙын етем ҡалдырып ҡырҡ йәштән саҡ уҙған Фәриҙә апайым да ҡапыл ғына донъя ҡуйыр. Әммә әлегә беҙ быларҙың береһен дә белмәйбеҙ, туй шауҡымынан һаман айный алмайса ҡайтып киләбеҙ. Беҙҙең артта, әле бер кем дә тейергә өлгөрмәгән саф аҡ ҡарҙа, борғоланып-борғоланып пар сана эҙе ярылып ҡала...

* * *

Яҙмыш шаярыуы булдымы, атайымды Ҡыҙыл түбәнендәге Мәхмүт ауылына уҡытырға күсергәс, мин биш саҡрым үргә Ишҡолға йөрөп һабаҡ алдым. Ҡар яуғансы самокатта йөрөһәм, ҡышын Фәриҙә апайымдарҙа яттым. Аҙаҡ, уҡыуҙы матур ғына тамамлағас та, Мәхмүт еҙнәм менән дуҫлығыбыҙ өҙөлмәне. Тимәк, ул - ирҙәр дуҫлығы булған.

Сыуаҡ көҙ көндәренең береһендә, әллә ҡайҙа ятып ҡалған тыуған ауылыбыҙға ҡарата һағыныу хистәре быуып алғанда, Ришат, Рәшит, Айрат ҡустыларымды әйәртеп, терәлеп ятҡан үҙе бейек, үҙе ғәләмәт текә Ҡарағастауға күтәрелдек. Шул ҡәҙәре ыҙа сигеп тау артылыуыбыҙҙың, әлбиттә, маҡсаты бар ине. Ул да булһа - тыуып-үҫкән, кендегебеҙ киҫелгән Әхмәтте күреү. Уны беҙ ысынлап та күрҙек. Мөһабәт һырттар менән уратып алынған ауыл зәңгәрһыу томанға уралған да, соҡор эсендә йоҡомһорап ята ине. Бирерәк көҙгө һоро ерлектә күҙ ҡамашырлыҡ ужым баҫыуҙары йәйелеп киткән.

- Ана беҙҙең Әхмәтебеҙ! - тинем ҡустыларыма.

- Әхмәт шул! Әхмәт!!! - Улар ҡыуаныстарынан осоп китә яҙҙылар, ауылдың... Әхмәт түгел икәнен күреп торһалар ҙа.

Эйе, алдыбыҙҙа Әхмәт түгел ине. Сөнки уның янында бөҙрә йәшеллеккә күмелеп ятҡан Һаҡмары юҡ, ҡабатланмаҫ Ҡарағайморон, сал тарихлы Тимәшәү тауҙары ла күренмәй, быуаһы ялтырап ятмай. Әхмәт, ана, тегендә, Ирәндек һыртында күккә ашҡан Таганташ ашаһында булырға тейеш. Атайым бер әйткәйне. Ошоно белгән көйө үҙебеҙҙе-үҙебеҙ алдаштырып торған булдыҡ. Ошо алдаштырыуҙан күңелемдә еңеллек тойҙом, юҡһыныуҙан ярһыған йөрәгем шөйлә баҫылып, хәсрәттәрем онотола төшкәндәй булды. Шулай ҙа, ҡайтыр яҡҡа ыңғайлап, ят ауыл тау артына ышыҡланғас та яманһыулап киттем, бар булмышымды ҡуптәнән әйәрә йөрөгән, инде ҡанға һеңешеп биҙҙерә башлаған, түҙеп торғоһоҙ һағыш солғап алды. Мин шым ғына иланым. Ҡапыл...

Тау аҫтынан ишетелгән аңлайышһыҙ шау-шыу иғтибарыбыҙҙы йәлеп итте. Аҫта, саңы борхоп ятҡан йоморо юлдан, берен-бере тапарҙай булып, арбаға егелгән аттар сабыша ине. Тәртә-дуғаларына... Һебә! Һебә бәйгеһе бара бит! Беҙ яңы өйләнешкән кәләш менән кейәүгә, уларҙың атай-әсәйенә, башҡа туғандарына иҫәнлек-һаулыҡ теләп ҡул болғаныҡ. Болоҡһоған күңелем асылып, йөрәк һыҙлауҙарым баҫыла төшкәндәй. Туйҙар булып тора, тимәк, тормош, йәшәү дауам итә.

**(Аҙағы. Башы 36-37-се һандарҙа.)**

ЙӘНӘШӘБЕҘҘӘ...

**Ҡайһы саҡ тормош юлында шундай кешеләр осрай: улар менән аралашыу күңел түрендә яҡтыртып, донъяға ҡарашыңды киңәйтеп ебәргәндәй була. Тыуған тупраҡ көсө менән донъя көтөп, ер хәстәре менән мәшғүл булыуҙары юғарыға, йондоҙҙарға ҡарап фекерләргә ҡамасаулыҡ итмәй уларға, киреһенсә, ер кешеһенә генә хас аҡыл һәм зиһен берлеге уларҙың, бер фекер әйәһе әйтмешләй, Ер шарының ҡояшлы яғында йәшәүҙәренә тағы бер ишаралыр.**

# КҮҢЕЛ ЙӘДКӘРЕН...

## таш һынға күсергән

Ошондай тойғолар ҡалдырҙы Ҡырмыҫҡалы районы Ибраһим ауылында йәшәүсе Флүзә Ғиндәлиф ҡыҙы һәм Рәмил Рауил улы Ғәлиевтар ғаиләһе менән танышыу. Билдәле ижадсылар төйәге булған Ҡырмыҫҡалы ере ошоға тиклем үҙенең бөйөк ғалим-мәғрифәтсеһе Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев һәм билдәле ғалим, яҙыусылары менән дан тотһа, улар сафында талантлы педагог һәм рәссам, скульптор, "Киске Өфө " гәзитенең тоғро дуҫы Рәмил Ғәлиевтың да лайыҡлы урыны бар. Бала саҡтан уҡ рәссам булырға хыялланған Рәмил армия сафында хеҙмәт иткәнендә лә был ниәтенән һыуынмай. Хеҙмәт итеп ҡайтҡас, Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға инә һәм уны тамамлағас, ғаиләһе менән Төмәнгә күсеп китә. Унда, әлбиттә, байтаҡ йылдар һөнәре буйынса рәссам булып эшләй, ләкин торабара тыуған яҡ барыбер үҙенә тарта. Өҫтәүенә, тыуған ауылында яңы мәктәп төҙөлгәс, уны балалар уҡытырға саҡыралар. 1992 йылдан алып, хаҡлы ялға киткәнсә, Рәсәйҙең хеҙмәт ветераны ошонда рәсем һәм технология дәрестәренән уҡыта. Уҡыусыларын матурлыҡты күрә һәм баһалай белергә өйрәтә, сәнғәт серҙәренә төшөндөрә. Ә бит һәр мәктәптә лә, һүрәт төшөрөргә, ағастан ырып һындар яһарға әүәҫ һәләтле балалар була, тик уларҙың һәләтен күреп алырға, үҫтерә белергә генә кәрәк. Рәмил Рауил улының ана шундай һәләтле һәм үҙе кеүек сәнғәт уҡыу йорттарын тамамлап, уңышлы эшләп йөрөгән уҡыусылары байтаҡ.

Рәссам йортона беҙҙе уның ижад әҫәрҙәре хаҡында күп тапҡырҙар ишеткәнсе, бер тапҡыр ҡарап киҫәнеү теләге алып килде. Ғәлиевтарҙың һырлап-семәрләп биҙәлгән мансардалы күркәм йорто әллә ҡайҙан балҡып, иғтибарҙы тартып ултыра. Юҡҡа ғынамы ни, Ғәлиевтар йорто тотош Ҡырмыҫҡалы районында иң яҡшыһы, иң матуры тип танылған. Өй эсе лә әйләнеп сыҡҡыһыҙ: Рәмил Рауил улының төрлө тематика һәм жанрҙа башҡарылған бәләкәй формалағы скульптура өлгөләре байтаҡ. Улар араһында авар халҡының бөйөк улы Рәсүл Ғамзатовтың "Торналар" шиғыры менән әҫәрләнеп башҡарылған һәм шул атамалағы скульптура, ат уйнатып алдан барған Рәсәй Геройы Миңлеғәли Шаймөратов, йөҙйәшәр уйсан аҡһаҡал һындары үҙенә йәлеп итә. Бынан тыш, башҡорт халыҡ рухындағы тематик ижад өлгөләре: ат, бөркөт, айыу, башҡорт яугиры фигураларының һәр ҡайһыһы ижадсы маһирлығынан тыш, илһөйәр һәм дә телһөйәр оҫтаның күңел даирәһенә лә яҡшы ишара.



Рәссам булһынмы ул, скульптормы, әллә яҙыусымы - ысын ижадсы өсөн халыҡ рухы, тыуған ере, уның лайыҡлы ҡаһарман һәм уңған кешеләре, тәбиғәт гүзәллектәре һәм тереклеге мәңге һайыҡмаҫ илһам сығанағы булып хеҙмәт итә. Ошо хәҡиҡәткә бәйле Рәмил Рауил улының ҡасандыр булып үткән, ләкин бөгөн дә уның бәғер итен һыҙлатып торған бер тормош эпизодын телгә алып китеүе уйландырҙы. БР Рәссамдар берлеге иғлан иткән конкурста ҡатнашып, ауылдың иҫән ҡалған иң һуңғы һуғыш ветераны портретын тәҡдим итеүен жюри ағзаһы булып ултырған Башҡортостанда билдәле генә абруйлы бер рәссамдың, танауын сирып, " Натурализм..." тип "баһалауы" бәғзе берәүҙәрҙең үҙ ерлегенән, халҡы рухынан йөҙ бороп, бер көнлөк модалы йүнәлеш ҡоло булып йәшәүҙәренә асыҡ дәлил. Былдай һай йөҙөүсе, "алыҫ булмаған" фекер йөрәтынан ғына баҙап ҡаласағы юҡ Ғәлиевтың. Ни тиһәң дә, ун дүрт быуын шәжәрәһен белгән данлыҡлы Йомран Табын ырыуы улы бит ул - тыуған ере тупрағынан йәшәү һуты алып, аяҡтарында ныҡ баҫып тора. Аҡты ҡаранан ғына айыра алырлыҡ аҡылға эйә. Кәрәк икән, көлкөләһөнән әсе итеп көлә лә белә. Ошо уңайҙан Рәмил Рауил улының әлеге конкурс жюриһы ултырышының бер мәрәкәһен дә һөйләп көлдөрөп алыуы, асылда, йор һүҙле ижадсының юҡ-бар күңелһеҙлекте юморға әйләндереп көлә белеү зирәклеген дә күрһәтеп ҡыуандырҙы. Жюри ағзалары диҡҡәт менән тағы бер картинаға баҡҡан. Оҙаҡ тынлыҡ. Шул саҡ хәлде аңғарып ҡалған автор килеп, һүрәтен баш түбән әйләндереп ҡуя: ысыны шулай булырға тейеш икән. Йәғни, ни тиклем аңлайышһыҙыраҡ - шул тиклем аҡыллыраҡ күренә, имеш... Эйе, бөгөнгө сәнғәттең ҡайһы бер модалы йүнәлештә-ре ни тиклем генә юғары булып күренергә тырышмаһын, ул "юғарыға " ынтылған һайын, ерҙән, ысынбарлыҡтан айырыла, алыҫлаша ғына бара, үкенескә. Ә ысын талант эйәләрен һәм улар әҫәрҙәрен ниндәйҙер жюри түгел, ә халыҡ таный һәм ысын баһаны ла халыҡ бирә.

Ибраһимдағы Мөхәмәтсәлим Өмөтбаев музейында Рәмил Рауил улының скульптуралары, ағастан һырлап эшләнгән көнкүреш әйберҙәре күргәҙмәһе йыш ҡуйыла, уны ҡат-ҡат килеп ҡараған сит-ят кешеләрҙән дә, ауыл халҡының да баһаһы бер: алтын ҡуллы оҫта. Рәссамдың йортона тоҫҡап килеүебеҙ сәбәбе лә эшләнеп бөтмәҫ элек халыҡ теленә күскән ана шул оҫталыҡ өлгөһөнөң сираттағы береһе - һалдатҡа һәйкәл ине. Бына ул әлегә Ғәлиевтарҙың йорт яны баҡсаһында урын алған ике метрҙан ашыу баһадир һын, тик ул яңғыҙ түгел. Яраланып, һыңар ҡулынан яҙған һалдатты башҡортсалап яулыҡ ябынған, балитәкле күлдәктәге әсәһе яуҙан ҡаршылай. Фронтовик яугир йөҙөн сырамытҡандай булдыҡ. "Дөрөҫөн әйткәндә, был минең атайым Рауил Ишназар улы менән Хәтирә нәнәйем, - тип һөйләй скульптор. - Атайым армия сафында хеҙмәт иткәндә, Бөйөк Ватан һуғышы башлана. Уларҙың хәрби часы шундуҡ фронттың алғы һыҙығына оҙатыла. Һуғыштың тәүге иң ауыр осорондағы тиңһеҙ алыштарҙа атайым ике тапҡыр пленға эләгә, ҡаса, тағы эләгә һәм икенсе тапҡырға ҡасҡанда, бәхеткә күрә, белорус партизандарына тап була һәм фашистарға ҡаршы улар сафында һуғыша. Был һәйкәлдә мин Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан бөтөн һалдаттарға: яу ҡырында баш һалғандарға ла, иҫән әйләнеп ҡайтҡандарға ла бағышлайым. Иҫән ҡайтҡандарҙың да бит күпселеге һуғышта алған ауыр яраларынан мандый алмайынса йәшләй генә вафат булып ҡалалар. Атайым да 47 йәшендә генә донъя ҡуйҙы..." Ысынында иһә был авторҙың, бөтөн һуғыш ҡаһармандары, шул иҫәптән, атаһы рухына ла, бағышланған үҙенсәлекле күңел йәдкәре буласаҡ.

...Һәйкәлдең эше, ниһайәт, тамамланған. Унан һуң ул М.Өмөтбаев музейы алдындағы парк зонаһында, яугирҙар иҫтәлегенә стела янында урын аласаҡ, бирһен Хоҙай! Тик авторға эште ослап ҡуйыу өсөн Ҡырмыҫҡалы район һәм Ибраһим ауыл хакимиәттәре тарафынан ярҙам да кәрәк буласаҡ, сөнки былдай эште яңғыҙ-ярым ғына башҡарып сығыу мөмкин түгеллеген һәр кем төшөнә һәм күҙ алдына килтерә торғандыр. Иң мөһиме, шуны аңлау фарыҙ: бөгөнгө ауылдарыбыҙ тормошона йәм һәм ҡот өҫтәргә ынтылып, ауылдаштарын матурлыҡ, камиллыҡ донъяһына әйҙәүсе бына ошондай илһамлы, нурлы кешеләрҙең хеҙмәтен таныу, ваҡытында баһалау, теләктәшлек итеү кәрәк, сөнки талант һәр саҡ уны ҡәҙерләүгә, яҡлауға, һаҡлауға мохтаж илаһи бер Аллаһ бүләгеләр...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

БАШҠОРТСА АТАМАЛАР



# ҠОШСОҠ, ИСЕМЕҢ НИСЕК?

**Ҡош исемдәренең башҡортсанан русса тәржемәһен беләһегеҙме? Был һорауға тиҙ генә яуап бирә алмаҫһығыҙ, моғайын. Беҙгә М. Г. Баяновтың һәм А.Ф. Маматовтың "Птицы Южного Урала" ("Китап", 2009й.) исемле китабы ярҙам итер. Был китапта беҙҙе ҡыҙыҡһындырған лексик берәмектәрҙең руссанан башҡортсаға тәржемәһе лә килтерелгән. Әйтергә кәрәк, китап менән танышҡан ваҡытта үҙебеҙ өсөн ҡайһы бер асыштар ҙа яһаныҡ. Мәҫәлән, "былбыл" һүҙе күп тапҡырҙар ҡолаҡҡа салынһа ла, әүҙем лексикала ҡулланылмағанғамы, уның һандуғастың икенсе исеме булыуы тураһында беленмәгән дә икән. Тағы, халыҡ ижады өлгөләрендә үҙәк урынды алып торған "һомай" ҡошон да, ниңәлер, торна образында күҙ алдына килтергәнбеҙ, әле килеп, уның өкөнөң, дөрөҫөрәге, ябалаҡтың бер төрө булыуына инандыҡ. Һеҙҙең иғтибарға ҡайһы бер ҡоштарҙың төҫө, ҙурлығы, тауышы, уларҙың башҡа төрҙәре һәм ҡайһы бер бүтән үҙенсәлектәре тураһында ҡыҫҡаса мәғлүмәттәр тәҡдим итмәксебеҙ. Тел нескәлектәрен тағы ла яҡшыраҡ белергә теләгән һәр кемгә был мәғлүмәттәр файҙалы булыр, тип ышанабыҙ.**

***Күк күгәрсен, йорт күгәрсене*** - русса "сизый голубь". Дөйөм төҫө - күк, муйыны аҡһыл-күк, ҡыҙғылт-көрән һәм йәшкелт төҫтәр менән йылҡылдап тора. Урта ҙурлыҡта, тығыҙ тулы кәүҙәле, оҫта осоусы, ерҙән һикермәйенсә, атлап йөрөүсе, сарҙаҡтарға, кәрниздәргә оя ҡороусы, ғүмере буйы парлы булып йәшәүсе ҡош. Күгәрсендәрҙең башҡа төрҙәре һәм уларҙың руссаға тәржемәләре: урман күгәрсене - "клинтух", алатүбә, ҙур күгәрсен - "вяхирь", әберсен, ҡыр күгәрсене - "обыкновенная горлица", ҙур әберсен - "большая горлица", ҡала әберсене - "кольчатая горлица".

***Һабан турғайы*** - русса "полевой жаворонок". Арҡа яғы көлһыу-һоро, буйынан-буйға һыҙылған ҡуйы һоро тимгелдәре бар. Ал яғы аҡ, түше лә һоро тимгелдәр менән сыбарланып тора. Кәүҙәһе турғайҙан ҙурыраҡ, башында ҡыҫҡа ғына түңәрәк өлпәнә бар. Бай тауыштар сығарып һайрай. Ҡайһы бер ҡоштар һайрауын ҡабатлауы ла билдәле, башҡа һабантурғайҙар менән "чрри", "трри" һымаҡ өндәр ярҙамында ла аралаша. Һабан турғайының башҡа төрҙәре һәм уларҙың руссаға тәржемәләре: аҡҡанат һабан турғайы - "белокрылый жаворонок", ҡара һабан турғайы - "черный жаворонок", йүрелек - "лесной жаворонок".

***Сыйырсыҡ*** - русса "обыкновенный скворец". Ялтыр ҡара, көҙгә ҡарай аҡ тимгелле ҡанатлы, беҙҙең яҡтарҙа йыш осрай торған йырсы ҡош. Йыры һыҙғырған, шығырҙаған тауыштарға, башҡа ҡоштар өндәренә, тәбиғәттә осраған башҡа өндәргә лә оҡшап китә. Сыйырсыҡтың тағы бер төрө - алһыу ҡош русса "розовый скворец", беҙҙең яҡтарҙа бик һирәк осрай, башлыса Рәсәйҙең көньяҡ өлөшөндә таралған.

**М.Г. Баяновтың һәм А.Ф. Маматовтың "Көньяҡ Урал ҡоштары" китабын файҙаланып,**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ әҙерләне.**

**(Дауамы бар).**

ИНТЕРНЕТТАН



## ҠАРА ШОКОЛАДМЫ?

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә яҡшы холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-шәр грамм ҡара (70 процент какао), ҡайһылары аҡ (0 процент какао) шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ашамаҫҡа кәңәш итә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ Афина университеты ғалимдары ике төркөм ҡатын-ҡыҙҙарҙы сағыштырып ҡараған. Беренсе төркөм 3 ай дауамында йүгергән, икенсеһе шәп итеп атлап йөрөгән. Һөҙөмтәлә, икенсе төркөмдәге ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ килограмдарҙы күберәк ташлаған. Тикшеренеүселәр быны шулай аңлатҡан: кем йүгергән, улар күберәк көс юғалтҡан һәм көн дауамында йышыраҡ ял иткән һәм ашаған. Ә йәйәү йөрөүселәрҙең, киреһенсә, энергияһы ташып барған һәм улар ҡалған ваҡытын да әүҙем үткәргән. Бынан тыш, йәйәү йөрөгәндә көс мускулдарға, ә йүгергәндә быуындарға төшә. Бынан тыш, йәйәү йөрөү ҡан баҫымын да яйға һала. Стэнфорд университетының физиологтары юғары ҡан баҫымы менән яфаланған ҡатын-ҡыҙҙарға көнөнә йәйәү йөрөүҙе 9700 аҙымға еткерергә ҡушҡан. Алты айҙан һуң ханымдар ябығып, ҡан баҫымдары нормаға килгән. Ошондай уҡ тәжрибәне ирҙәрҙә лә үткәреп ҡарағандар. Унда 11 мең ир-егет ҡатнашҡан һәм көнөнә 10 мең аҙым атлай башлағандан һуң уларҙа инсульт һәм инфаркт хәүефе 2 тапҡырға кәмегән.

■ Шлактар тураһында популяр әҙәбиәттә күп яҙылһа ла, ғилми әҙәбиәттә улар тураһында мәғлүмәт бөтөнләй юҡ. Таҙалыҡ "яратыусылар" әйтеүенсә, таш, лайла, ауыр металдар тоҙҙары организмда яйлап йыйыла. Һәм, был ни тиклем сәйер яңғырамаһын, организм уларҙан үҙаллы ҡотола алмай икән, шуға ла клизмалар, диеталар кәрәк, имеш. Әммә медицинала "шлак" тигән термин юҡ. Сеченев исемендәге Мәскәү Медицина академияһының гастроэнтерология клиникаһы профессоры Семен Рапопорт әйтеүенсә, "таҙартыу" тигән төшөнсә кеше организмына ҡарата ҡулланыла алмай. "Сөнки кеше - йорт түгел, унда бысраҡ йыйылмай". Ошоға тиклем УЗИ, гастро- һәм колоноскопия бер кемдә лә шлак тапҡаны юҡ.

■ Ҡарбуз еңел үҙләштерелә торған тәбиғи шәкәрҙән, башлыса фруктоза һәм глюкозанан тора. Унда шулай уҡ B1, B2, C, PP витаминдары, фолий кислотаһы, каротин, пектин полисахаридтары, калий, магний, тимер, натрий, кальций, фосфор һәм башҡа микроэлементтар күп. Файҙалы матдәләрҙең бындай бай ассортименты йөрәк-ҡан тамырҙары системаһына, ҡалҡан биҙенең эске секрецияһына, эсәк микрофлораһына яҡшы тәьҫир итә. Халыҡ медицинаһында ҡарбузды бөйөр һәм йөрәк-ҡан тамырҙары ауырыуҙары мәлендә шешенгәндә ҡулланалар. Уны урологик ауырыуҙар: цистит, нефрит, пиелонефрит ваҡытында ла ашарға кәңәш итәләр. Ҡарбузды диета ваҡытында ла ҡулланалар. Тимергә бай ҡарбуз анемиянан да ҡотҡара.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# ҮҘЕБЕҘҘЕҢ ЕРЛЕКТӘ ҮҪКӘНЕНӘ...

## үрсеү, түл йыйыу ҡеүәте лә һалынған бит



**Хәҙер халыҡ, анһатҡа, рәхәткә һалышып, магазинда һатылған сит тарафтарҙың еләк-емешен ашауға күнекте. Ә бит донъяны барлыҡҡа килтереүсе һәр халыҡҡа тәғәйенләгән ерендә еләк-емешен, үҫемлектәрен дә ҡушып яралтҡан. Ул үҫемлектәр фәҡәт шул тарафтағы тәбиғи шарттарға ҡулайлашып, көс-ҡеүәт ала, үҫә. Урындағы тәбиғәт шарттарына күнеккән хайуандар, ҡоштар һәм башҡа йән эйәләре шуларҙы ейеп көн күрә. Йәғни, әҙәм балаһы ла тереклек итеү, йәшәүгә һәләтлелекте үҙ ерендә үҫкән үҫемлектәр менән ризыҡланыуҙан ала була түгелме?**

Элек башҡорттар ҡара яҙҙан алып йәй буйына һәм ҡара көҙгәсә төрлө мәлдәрҙә өлгөрөп еткән үлән һәм тамыр аҙыҡтарын йыйып, еләк-емешен тиреп көн күргән. Уларҙы ҡышҡылыҡҡа етерлек кимәлдә киптереп әҙерләү үҙе бер кәсеп төрө булған. Һатыуға алып сығаһыңмы, алыш-биреш итәһеңме, ҡыш буйы өйөңдә ашайһыңмы - файҙаһы күп был шөғөлдөң. Һанай китһәң, ниндәй генә төрҙәре юҡ уларҙың: муйыл, ҡыр сейәһе, ер еләге, ҡыҙыл һәм ҡара бөрлөгән, ҡарағат, ағас еләге, көртмәле, һаҙ еләге, балан, мышар, әлморон (гөлйемеш), урман сәтләүеге...

"Беҙҙе насар йәшәнеләр тип әйтәләр, ҡайҙан насар булһын! Ҡыш етһә, тирмәнсе, емеш-еләк тартабыҙ, тип әйтеп ебәрә. Кипкән емештәрҙе ҡайһыһы моҡсайҙарға, ҡайһыһы зур тоҡҡа тултырып, санаға һалып барабыҙ тирмәнгә. Бер аҙна муйыл, икенсеһендә сейә, аҙаҡ еләк һәм ҡалғандарын тирмәнсе он итеп тартып бирә. Аҙаҡ майға бутапмы, балың булһа, бал өҫтәп, һеҙҙең кәнфиттәрегеҙҙән дә тәмлерәк итеп ашар инек, - тип, ошо темаға фекер алышҡанда Йомаш ауылынан 80 йәшлек Кәримә әбей Барлыбаеваның һөйләгәндәре менән бүлеште яҡшы танышым Фирүзә ханым Барлыбаева.

**➔ Ысынлап та, заманға яраҡлашып, еләк-емеште шәкәр менән ҡайнатып һаҡлауға ҡарағанда, киптерелгәненең өҫтөнлөгө нимәлә икән?**

Шәкәр һәм шәкәрле аҙыҡтарҙың кеше организмы өсөн зыянлы икәнен хәҙер һәр кем белә, тиһәк тә яңылышмаҫбыҙ. Артыҡ кәүҙә ауырлығына килтерһенме, төрлө ауырыуҙар араһында хатта "шәкәр ауырыуы"тигән махсус исемлеһе лә киң таралһынмы, тигәндәй. Ә бына онкологик сирҙәрҙең үтә йышайыуы киптерелгән еләк-емеш ашамау менән бәйле булыуын күптәр белмәйҙер әле. Бөгөнгө һөйләшеүебеҙ шул турала булыр.

Ботаника өлкәһенән бөтә төр еләк-емештәрҙең дә үҙәгендә, ҡаты ҡап эсендә, ереме-ваҡмы орлоғо булыуы мәғлүм. Бына шул орлоҡтоң составында B17 тигән витамин сығанағы булған амигдалиндың рак ауырыуына бирешмәй торған үҙенсәлектәре бар икән! Бынан тыш, витамин үҙәк нервылар системаһын көйләү, эшкә һәләтлелекте күтәреү, төрлө стрестарға бирешмәүсәнлек сығанағы ла икән.

Әммә еләк-емештәрҙе ҡайнатып, бешереп, оҙайлы һаҡлаған осраҡта амигдалин тарҡалып, һаулыҡ өсөн зарарлы булған синиль кислотаһы бүлеп сығара. Тимәк, еләк-емеште бөртөкләп, йә иҙелгәненән ҡаҡ ҡойоп киптереп, оҙон-оҙаҡ ҡыштарҙа дөрөҫ туҡланған булып сығамы боронғолар?

Киптереп тарттырылған муйыл, тау сейәһен һәм башҡа еләк-емештәр оно ашҡаҙан-эсәк буйҙарын лайланан таҙартыу, һөйәктәрҙе нығытыуға ла булышлыҡ итә. Ошо зарураттан сығып, уларҙы төрлө ризыҡтарға ҡушып ашарға була. Икмәк бешергәндә ҡамырға өҫтәп ебәрергә мөмкин. Үҙем яратып һәм йыш ҡулланған ризыҡтың рецебын ентекләп яҙып та ебәрәйем әле.

Арпа ярмаһын яҡшы итеп йыуып киптерәм һәм духовкала ҡыҙҙырып алам. Электр тирмәнемдә тарттырып алғас, барлыҡҡа килгән арпа онон ҡайнар һыу йәки һөт менән бешекләйем. Эҫе сағында уҡ самалап һыйыр майы, муйыл оно өҫтәйем, артабан бер аҙ тәмләтеү өсөн бал ҡушып, яҡшы итеп ҡамыр рәүешендә баҫам. Бөтәһе бергә ҡушылғандан һуң кәрәкле ҙурлыҡта йомарлаҡтар әүәләйем дә, туңдырғыста ҡатырып алам. Бына тигән файҙалы, туҡлыҡлы, тәмле ризыҡты иртәнге сәйгә икмәк урынына ҡулланам.

**➔ Онотола биргән был кәсепте тергеҙеп, үҙ еребеҙгә хас булған үҫемлектәрҙән әҙерләнгән ризыҡ, аш-һыу төрҙәрен эшләү ысулдары менән бүлешәйек, йәш быуынға шуны һең-**

ХУЖАБИКӘ ҠОЛАҒЫНА

## БАКЛАЖАНДАН САЛАТ



**Көҙ миҙгеле уңған хужабикәләр өсөн тынғыһыҙ осор: баҡса уңышын йыйып, ҡышҡылыҡҡа әҙерләмәләр яһау мәле. Гөлгөнә Байегетова, мәҫәлән, баклажандан салат әҙерләгән. "Минең кеүек баклажан яратыусылар барҙыр. Быйыл баҡсамда баклажандар бик уңды, был салат әле һуңғыһы булмаҫ, башҡа төрлө ысул буйынса ла әҙерләмәләр ябырға иҫәп бар", - тип яҙған ул үҙенең "Бәйләнештә"ге сәхифәһенә. Артабан һүҙ хужабикәнең үҙенә.**

- Был салаттың күләме күп килеп сыҡмай, шулай ҙа төрләндереп ашар өсөн эшләп ҡарарға мөмкин. Уны әҙерләү өсөн 2 кг баклажан, 600 грамм помидор, 600 грамм татлы борос, 3 баш һарымһаҡ, 1-3 әсе борос, 100 мл көнбағыш майы, 70 мл 9 процентлы аш һеркәһе, 150 грамм шәкәр ҡомо, 2 ҡалаҡ тоҙ кәрәк буласаҡ. Иң тәүҙә баклажандарҙы йыуып, түңәрәкләп киҫеп, өҫтөнә бер ҡалаҡ тоҙ һибеп болғап, бер сәғәткә ҡуйып торорға. Шунан һуң һалҡын һыуҙа сайып алырға. Шул арала помидор, татлы борос, әсе борос, һарымһаҡты ит үткәргес аша үткәреп, 1 ҡалаҡ тоҙ, шәкәр ҡомо, көнбағыш майы, аш һеркәһе ҡушып бешерергә ҡуйырға, ҡайнап сыҡҡас та баклажандарҙы һалырға һәм 30 минут самаһы бешерергә. Баклажандар йомшарырға, әммә иҙелергә тейеш түгел. Әҙер салатты таҙа, стериль банкаларға һалырға һәм түңкәреп, йылы әйбергә төрөп, һыуынғансы ҡуйып торорға. Әлбиттә, һәр эште башҡарғанда имен-һау ашарға яҙһын тип, яҡшы теләктәр теләп кенә эшләргә кәрәк һәм шулай булһын да!

✔ *Үҙебеҙҙең климатҡа яраҡлашып үҫкән еләк-емештәрҙән балан тураһында ентекләберәк әйтеп үтер инем. Балан - уникаль аҙыҡтарҙың бер төрө. Киптерелгән хәлдә быуат буйы ла боҙолмаясаҡ.*



**дерәйек, тигән ниәттән Бөрйән ағинәйҙәре менән ошо турала фекер алышып та алдыҡ. Һүҙ - Байназар ауылы ағинәйе, әүҙем йәмәғәт эшмәкәре Көнһылыу Ҡотлобаеваға:**

- Һәр үҫемлек кеше организмы мөхите менән берҙәм системаны тәшкил итә, үҙендә мөхит, ундағы һәр төрлө хәл-торош, үҙгәрештәр тураһында мәғлүмәт тота. Әлбиттә, ситтән килгән емеш-еләктәргә, һәр төрлө тарафтан килгән ризыҡҡа бөтөнләй икенсе мәғлүмәт һалынған. Бары үҙебеҙҙекеләр генә тәнебеҙгә, йәнебеҙгә дөрөҫ мәғлүмәт бирә ала.

Ризығыбыҙҙа көньяҡ емештәренең өҫтөнлөк итеүе организмды "Йыл әйләнәһендә мөхитең йәйҙән тора", тип алдай. Әгәр беҙҙән ағастар көҙ, ҡыш килерен белмәһә, йыл әйләнәһенә климат йәйгесә тора тип белһә, сатлама һыуыҡта туңып үлер ине.

Үҙ климатыбыҙҙа үҫкән аҙыҡ менән туҡланған беҙҙең быуын һалҡын алдырыуҙы бөтөнләй белмәй тиерлек ине. Ыжғыр елдәргә лә бирешеп барманыҡ. Тәмләп тороп ҡар ашар инек тә, боҙбармаҡ имер инек. Хәҙер саҡ иҫкән елдән тиерлек тонзиллит, ангина, бронхит, пневмонияға тарыйҙар...

Үҙебеҙҙең климатҡа яраҡлашып үҫкән еләк-емештәрҙән балан тураһында ентекләберәк әйтеп үтер инем. Балан - уникаль аҙыҡтарҙың бер төрө. Киптерелгән хәлдә быуат буйы ла боҙолмаясаҡ. Шулай уҡ, бешкән хәлдәме, бешмәгәнме - бер нәмә лә ҡушылмаған һыуҙа ла боҙолмай.Тик саҡ ҡына ла шәкәр һалынмауы шарт.

Баландан ризыҡ әҙерләгәндә, ғәҙәттә, иң ҡиммәтле өлөшө - төшө һеҙеп ташлана ла, ҡыҙыл һутлы тышы ғына ҡулланыла. Уның тышы ҡоштарҙы йәлеп итә торған итсә генә. Ә төш эсендә орлоҡ ята. Буласаҡ үҫемлек организмы хасил булһын өсөн бөтә туҡлыҡлы матдәләр тупланған унда. Күптәр белмәйҙер ҙә: баланды орлоҡтан да үрсетеп була. Тимәк, уның селекцияһы өҫтөндә кемдер сорттар барлыҡҡа килтереү эше менән шөғөлләнә ала.

Баланды итборғос аша үткәреп, йәки кипкәнен тирмәнгә һалып, онон эшләп алырға була. Оно өсөн бер ниндәй ҙә һыуытҡыс кәрәкмәй.

Бөтә төр еләк-емештәрҙән ҡаҡ эшләү ҙә онотолған шөғөлдәргә ҡалды... Ә бит ҡаҡ өсөн дә шәкәр ҙә, һыуытҡыс та кәрәкмәй.

➔ **Әңгәмәне Аҫҡар ауылы ағинәйе, хеҙмәт ветераны Ғилминур Йомағужина дауам итә:**

- Сығышым менән Иҫке Мөсәт ауылынанмын. Бала саҡта атайәсәйҙәр эштән бушамау сәбәпле, өләсәй тәрбиәһе алған быуын беҙ. Атайымдың әсәһе Ҡолбирҙина Фариза өләсәйем июндең 15-нә ҡәҙәр ҡайын, имән, саған йүкә ағастарынан миндек бәйләргә урманға йөрөтә торғайны. Миндекте шунда уҡ бәйләп, яурынға көйәнтә һымаҡ арҡыры һалған ағастың ике осона элеп алып ҡайта инек. Һуңғараҡ муйыл, мышар, балан ағастарының емештәрен дә тәлгәштәре менән бәйләп әҙерләйбеҙ. Барыһын да өй башындағы ҡыйыҡ аҫтында урҙаға элеп киптерә инек. Шунда уҡ сепрәк түшәп тә муйыл, мышар, әлморон киптерҙек. Кипкән еләкте өйөбөҙҙә булған ҙур ғына таш тирмәнебеҙҙә тарта торғайнылар. Өй башына миндек алырға менгәндә мышар, балан, муйыл емештәренән тыш, берәр ус тотам итеп бәйләп киптергән шартый еләген, бөрлөгәндә былай ҙа ашап төшә торғайныҡ. Кәнфит-шоколадтар заманы булмағас, бик тәмле ине бит улар!

Ул саҡтарҙа шәкәр етешмәү сәбәпле, еләк-емештән ҡайнатма әҙерләү урынына, ҡаҡ ҡойоу ҙа киң таралған ине әле. Ҡыш көнө ауырып китһәк, йә иһә мунсанан һуң, өләсәй марляға төрөп һаҡлаған ҡаҡты, бысаҡ тигеҙмәйенсә, ҡулы менән өҙгөләп кенә таратып бирә ине...

Өләсәйем шул тиклем тәрбиәле, аңлы булған. Бар аҙыҡҡа һаҡсыл булырға, булмағанын үҫтерергә, йыйырға, хеҙмәт һалырға өйрәткән бит беҙҙе. Мин быларҙы, йылдар үтеп, үҙем олоғайғас ҡына аңланым. Тәбиғәт беҙгә йыйып, тәрбиәләп ашарға файҙалы бөтә аҙыҡты ла бирә. Үҙебеҙгә ялҡауланмай, әҙерҙе көтөп ултырмай, экологик яҡтан таҙа, шифалы, витаминға бай емеш-еләкте йыйып алырға ғына ҡала.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Әңгәмәселәремдең фекеренән һуң башҡа бер уй-асыш килде. Хәҙерге йәш ғаиләләрҙә киң таралған түлһеҙлек күренешенә, балаға уҙа алмауға ошо факторҙың, йәғни үҙ еләк-емештәребеҙҙе ҡулланмауыбыҙҙың да ҡыҫылышы юҡмы икән? Башҡорт милли аш-һыуҙарын тик ҡаҙы, бишбармаҡ, сәк-сәк тип кенә күҙаллауҙан арынайыҡ әле. Ялпыу, артыу, күбәйеү, үрсеү, үсеү, уңыш биреүгә һәләтлелек ҡеүәте һалынған тәбиғи аҙыҡты - үҙебеҙҙең ерлектә үҫкән еләк-емеште даими ҡулланыу ир-атҡа ла, ҡатын-ҡыҙға ла түл йыйыуға булышлыҡ итә түгелме? Уйланайыҡ әле ошо юҫыҡта, милләттәштәр!**

**Рәшиҙә ҒИЗЗӘТУЛЛИНА,**
**Бөрйән районы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе.**

*БЫЛ - ҠЫҘЫҠ!*

# ИҢ ЙӘШ УЙЛАП ТАБЫУСЫЛАР



**Балалар донъяны үҙҙәренсә аса һәм уға үҙҙәренең яңылыҡтарын индерә. Күп балалар өлкәндәргә ҡарағанда зирәклеге, уйлап эш итеүе менән ғәжәпкә ҡалдыра. Нимәнелер уйлап сығарыу һәләте, фекерҙәренең ҡалыплашып, ҡатып ҡалмауы бала кешене асыштарға алып килә, тормошобоҙҙо яҡшыртыуға, камиллаштырыуға хеҙмәт итә. Күптәр файҙалана уларҙың асышы менән, бала кеше уйлап тапҡан икән, тигән уй хатта башҡа ла килмәй. Ҡайһы берҙәре менән таныштырыу бөгөн маҡсатыбыҙ. Бәлки, беҙҙең арала ла йәмғиәт үҫешен яҡшыртыуға өлөш индереүсе шундай балалар йәшәп яталыр?**

## Иң йәше

Бына 59 йыл инде донъяла иң йәш уйлап табыусы тип Роберт Патчты атайҙар.

6 йәшлек сағында ул кузовы күтәрелә торған йөк тейәгес уйынсыҡ машина яһай. Ул аяҡ кейеме һала торған ҡатырғанан, бер нисә ҡаҙау һәм шешә ҡапҡастарынан ҡорола. Атаһы патентҡа ғариза яҙа. Шулай итеп әле уҡый яҙа ла белмәгән Роберт "уйлап сығарыусы" тигән исем ала.

## Ысын гений

Танылған генетик Владимир Эфроимсон: "Талант мендән берәүгә генә бирелә, тик миллион араһынан берәүҙә генә үҫеш ала, ә ун миллион кеше араһынан бер генә ысын гений сыға",- тип яҙа. Беҙ бөйөн итәсәк ваҡиға ана шундай таланттарҙың береһе хаҡында.

1721 йылдың 6 февралендә Лебек ҡалаһында сәнғәт әйберҙәре һатыусы Катарина Елизавета һәм архитектор Пауль Хейненкен ғаиләһендә оҙаҡ көтөп алған сабыйҙары донъяға килә. Ата менән әсәнең шатлығы ҙур була, һәм был шатлыҡҡа аҙмылыр-күпмелер ваҡыттан һуң, ғәжәпләнеү ҙә өҫтәлә. Сөнки бер нисә айҙан сабый үҙенең ғәҙәти булмаған һәләтен күрһәтә башлай: йәше лә тулмаған Кристиан һәр ишеткән һүҙен отоп ала һәм дөрөҫ итеп ҡабатлай. Ун айлыҡ сағында инде Библияның тәүге биш китабынан айырым тарихтарҙы яттан һөйләй башлай. Айырым өҙөктәрҙе яттан һөйләй.

Ике йәшендә Кристиан Хейненкен Библия тарихын тотошлайы менән белә. Артабан ул география, биология, математиканы йотлоғоп өйрәнә. Өс йәшендә был фәндәрҙе үҙләштерә һәм латин һәм француз телдәрендә һөйләшә башлай. Лебек гимназияһында лекция уҡый, улар араһында ректор Йоганн Генрих фон Зеелен була. Аудитория сихырланған кеүек ауыҙ асып тыңланы, тип яҙа ул. Ғалимдар малай тураһында, ул башында тотош донъяны йөрөтә шикелле, тиҙәр. Кристиан атлы малайҙың ғәҙәти булмаған һәләте тураһында тыуған ҡалаһы Лебектан ситтә лә ишетәләр.

Хикмәтле баланы Дания короле Фридрих IV-тең күргеһе килә, һәм уның саҡырыуы буйынса Кристианды һарайға алып киләләр. Бәләкәй гений королгә тарих буйынса лекция уҡый, лекторҙы тыңлап иҫе киткән батша бары тик "Миракулум" тип кенә әйтә. Был һүҙ латин теленән "мөғжизә" тип тәржемә ителә. Дания монархы Кристианды орден менән бүләкләй. Артабан бәләкәй генийҙы Кристиан Миракулум тип йөрөтә башлайҙар. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, Миракулумдың сәләмәтлеге ныҡ булмай. Ул дүрт йәшендә ауырып китә һәм күп тә үтмәй яҡты донъяны ҡалдыра. Кристиан Миракулумдың һуңғы һүҙҙәре шулай була: "Аллам, минең йәнемде үҙеңдең янына ал".

**(Аҙағы).**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

### Дөрөҫ аҙым һәр кем өсөн төрлө

Бер ваҡыт сит илдә инглиз телен аңлаусы аудитория өсөн дәрестәр үткәрҙем. Аңдың һәләттәренә ышанысты нығытыу өсөн был һәләттәрҙе аңлатҡан ғилми асыштарға туҡталдым. Әммә шул ваҡыт семинарҙың бағыусылары алдан планлаштырылмаған ун минутлыҡ тәнәфес иғлан итте. Тәнәфестә улар мине уратып алып: "Теория кәрәкмәй, ғәмәлдә күрһәт", - тине. Улар был аудиторияны яҡшы белеүе һәм, әгәр теория ғына һөйләнелһә, уҡыу өсөн түләнгән аҡсаны кире талап итеп, ялыуҙар ағыла башлаясағын раҫланы. Минең лекцияларымдың ғәмәлдә иң һөҙөмтәле һәм тикшерелгән алымға нигеҙләнеүе уларҙы инандыра алманы. Улар планымды үҙгәртеүҙе талап итте.

Ахырҙа, хужаларға буйһоноп, уҡытыу стилен үҙгәртергә тура килде. Был көндө уҡыусыларҙың бик аҙы ғына ураһын күрергә өйрәнде, бик аҙҙары психометрияла (кешелә булған предметҡа ҡарап, уның характерын билдәләү) уңышҡа өлгәште. Бик аҙҙары ғына минең уйҙан ғына ебәргән һүҙҙәрҙе тота алды. Аңдың ҡеүәте күҙлегенән ҡарағанда, бөтөн был һәләттәр "балалар баҡсаһы" программаһына тап килә. Әммә ғәмәлдә үҙләштереү өсөн уларҙың килеп сығышын, ижад донъяһы менән хеҙмәттәшлек итеү өсөн уларҙың тәбиғәтен аңларға кәрәк.

...Бала саҡта мин хеҙмәтсенең ашарға нимәнелер ултыртырға йәки һауыт-һабаны йыйыштырырға кәрәк ваҡытта ғына килеп инеүенә аптырай инем. Бер ваҡыт туғаным менән йәшенмәк уйнанып һәм мин аш өҫтәле аҫтына йәшерендем. Ҡапыл тап әсәйем ултырған урында келәм аҫтында ниндәйҙер ҡалҡып торған нәмә күреп, уға баҫып ҡараным һәм ашнаҡсының: "Кем унда ҡыңғырау менән уйнай?" - тигән тауышын ишеттем...

Илаһ беҙҙең шылтыратыуҙарҙың һәр ҡайһыһына яуап бирмәй. Бер шылтыратыу уға барып етмәүе лә, икенсеһе барып етеүе мөмкин. Шуға ла бер тапҡыр ғына шылтыратып, ҡул һелтәп ҡуймағыҙ.

Нисек итеп Илаһ телендә һөйләшергә? Яҙмаларҙың иң башында үҙенә ярҙам итеү өсөн башҡаларға ярҙам итеү тураһында һүҙ булғайны. Был теория ғына түгел, ә факт, сөнки беҙ барыбыҙ ҙа "кеше нәҫеле" тигән бер команданың ағзалары булып торабыҙ. Әгәр тормошто дөйөм уҙышыу тип ҡарарға күнекһәгеҙ, унда енеүселәр булмай. Барыһын да тигеҙ иҫәп көтә, финишҡа беҙ барыбыҙ ҙа бер ваҡытта киләбеҙ. Яҡыныбыҙға бер аҙым алғараҡ баҫырға ярҙам итеүегеҙ арттаҡалдығыҙ тигәнде аңлатмай. Илаһ берәү ҙә артта ҡалмаһын өсөн беҙҙе күҙәтеп тора. Һеҙ алға барыу өсөн тағы ла ҡеүәтлерәк этәргес алаһығыҙ.

Ижадсының теле - булдырыу. Проблеманы хәл итеү юлын тапһағыҙ - һеҙ Илаһҡа ярҙам итәһегеҙ. Уның менән ингә-иң терәшеп алға бараһығыҙ. Бынан сығып, һәр саҡ проблема сығанағы булып торһағыҙ йәки уны ҡатмарландырырға ярҙам итһәгеҙ, һеҙ Илаһҡа ҡаршы сығаһығыҙ, унан алыҫлашаһығыҙ, тиергә мөмкин. Илаһ менән уның телендә йышыраҡ һөйләшһәгеҙ, тормошоғоҙ тағы ла яҡшырыр. Был доғаға ҡарағанда ла һәйбәтерәк. Юҡ, мин доға уҡыуҙан туҡтарға кәрәк, тимәйем. Әммә нимәлер һорап мөрәжәғәт итерҙән алда пауза эшләгеҙ һәм үтенесегеҙҙе яҡшылап уйлағыҙ. Бәлки, тап ошо ваҡытта Илаһ һеҙгә күрһәткән сығыу юлын табыуығыҙҙы, үҙ көсөгөҙ менән проблемаларҙы йырып сығыуығыҙҙы һорап мөрәжәғәт итәлер.

Яҡшыраҡ йәшәүгә ынтылғанда күптәр доғаға - ҡеүәтле алымға мөрәжәғәт итә. Әммә улар йыш ҡына бер хата ебәрә: проблеманы хәл итеү өсөн нимә эшләргә кәрәклеген һорау урынына, уны икенсе кешенең иңенә ауҙарыуҙы һорай.

**Роберт СТОУН.**
**(Дауамы бар).**



**26 СЕНТЯБРЯ**
**ПОНЕДЕЛЬНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00 Новости недели (на рус.яз).**
**11.45 Специальный репортаж. [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на башк. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Бай". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Әлләсе... [12+]**
**16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 Автограф. [12+]**
**18.00 Пофутболим? [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00 "Елкән". [6+]**
**22.00 Тайм-аут. [12+]**
**23.00 Күстәнәс. [12+]**
**23.30 Х/ф "Городские подробности (Любовь с привилегиями)". [16+]**
**3.00 Спектакль "Эх, невеста, невестушка!". [12+]**
**4.45 Честно говоря. [12+]**

**27 СЕНТЯБРЯ**
**ВТОРНИК**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!-2"[16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45 Дознание. [16+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.00 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Хазина. [0+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Городок АЮЯ". [0+]**
**15.30 "КультУра". [6+]**
**15.45 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.45 "Дорога к храму". [0+]**
**18.45 Хоккей. "Салават Юлаев" (Уфа) - "Ак Барс" (Казань). КХЛ.**
**22.00 "Это моя профессия". [12+]**
**23.00 Колесо времени. [12+]**
**0.00 Х/ф "В стреляющей глуши". [16+]**
**2.45 Спектакль "Хаджи эфэнди женится". [12+]**
**4.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [12+]**

**28 СЕНТЯБРЯ**
**СРЕДА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 Республика LIVE #дома. [12+]**
**11.45, 17.30 Д/ф "Археостан". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 Тормош. [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 "МузКәрәҙ". [0+]**
**15.30 "Сулпылар". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.45 Тайм-аут. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 "Честно говоря". [12+]**
**22.00 Историческая среда. [12+]**
**23.00 "Байык-2021". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**0.00 Х/ф "Взятки гладки". [12+]**
**3.00 Спектакль "Счастье". [12+]**
**4.45 "Алтын тирмә". [0+]**
**6.30 Новости (на рус. яз). [0+]**

**29 СЕНТЯБРЯ**
**ЧЕТВЕРГ**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.05 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.20 Т/с "Чайки". [12+]
22.20 Вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.00, 1.55 Т/с "Морозова". [16+]
2.50 Т/с "Срочно в номер!-2". [16+]
4.33 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00, 16.30 Т/с "Ланцет". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Честно говоря". [12+]**
**12.00, 5.30 Счастливый час. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30, 2.15 Бәхетнамә. [12+]**
**14.30 "Это моя профессия". [12+]**
**15.00, 18.15, 20.30 Интервью. [12+]**
**15.15 Детей много не бывает. [6+]**
**15.45 "МузКәрәҙ". [0+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**17.30 "Криминальный спектр". [16+]**
**17.45 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**19.00 Вечерний телецентр.**
**20.00 Полезные новости. [12+]**
**20.15 "Сәңгелдәк". [0+]**
**20.45 История одного села. [12+]**
**21.00, 5.00 Башкорттар. [6+]**
**22.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**23.00 "Башҡорт йыры-2022". Телевизионный конкурс среди профессиональных исполнителей башкирской песни. [12+]**
**23.45 Х/ф "Рагин". [12+]**
**3.00 Спектакль "Сваха". [12+]**

**30 СЕНТЯБРЯ**
**ПЯТНИЦА**
**РОССИЯ 1**

5.00, 5.10, 5.41, 6.10, 6.41, 7.10, 7.41, 8.10, 8.41 Утро России.
5.07, 5.35, 6.07, 6.35, 7.07, 7.35, 8.07, 8.35 Местное время. Вести-Башкортостан. Утро.
9.00, 14.30, 21.15 Местное время. Вести-Башкортостан.
9.30 Доброе утро, республика!
9.55 О самом главном. [12+]
11.00, 14.00, 16.00, 20.00 Вести.
11.30, 17.30 "60 минут". [12+]
14.55 Кто против? [12+]
16.30 "Малахов". [16+]
21.30 Ну-ка, все вместе! [12+]
23.45 Улыбка на ночь. [16+]
0.50 Х/ф "Будет светлым день". [12+]
4.06 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Сәләм".**
**10.00 "Автограф". [12+]**
**11.00, 16.00, 21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**11.15 "Йома". [0+]**
**11.45 Д/ф "Археостан". [12+]**
**12.00 Республика LIVE #дома. [12+]**
**12.30 Үткән гүмер. [12+]**
**13.00, 18.30, 22.30 Новости (на баш. яз).**
**13.30 Автограф. [12+]**
**14.00 БашГост. [6+]**
**14.30 Моя планета Башкортостан. [12+]**
**15.00, 18.15 Интервью. [12+]**
**15.15 "Алтын тирмә". [12+]**
**16.15 "Гора новостей". [6+]**
**16.30 Д/ф "Байман". [12+]**
**17.15 История признания. [12+]**
**17.30 "Аль-Фатиха". [12+]**
**18.00 "Курай даны". [12+]**
**18.50 Хоккей. "Трактор" (Челябинск) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**22.00 БашГост. [12+]**
**23.00 "Ете егет". [12+]**
**23.45 Х/ф "Завтрак на траве". [0+]**
**2.30 Спектакль "Вой волчицы". [12+]**
**4.45 Колесо времени. [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

**1 ОКТЯБРЯ**
**СУББОТА**
**РОССИЯ 1**

5.00 Утро России. Суббота.
8.00 Местное время. Вести-Башкортостан.
8.20 Местное время. Суббота.
8.35 По секрету всему свету.
9.00 Формула еды. [12+]
9.25 Пятеро на одного.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00, 20.00 Вести.
11.50 Т/с "Бомба". [12+]
18.00 Привет, Андрей! [12+]
21.00 Х/ф "Встречная полоса". [12+]
0.50 Х/ф "Крылья Пегаса". [12+]
3.55 Х/ф "Я подарю себе чудо". [12+]
5.26 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00, 18.30 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Аль-Фатиха". [12+]**
**8.45 "Это моя профессия". [12+]**
**9.15 "Ете егет". [12+]**
**10.00, 19.00 "Елкән". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "КультУра". [6+]**
**11.00 "МузКәрәҙ". [6+]**
**11.30 Д/ф "Кукушкин чай". [6+]**
**12.00 Күстәнәс. [12+]**
**12.30 Бәхетнамә. [12+]**
**13.00 Үткән гүмер. [12+]**
**13.30 Башкорттар. [6+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**16.00 Колесо времени. [12+]**
**17.00 Бенефис народной артистки РФ и РБ, заслуженной артистки РФ Флюры Кильдияровой. [12+]**
**20.30 "Байык-2022". Республиканский конкурс исполнителей башкирских танцев. [12+]**
**21.30, 6.30 Новости (на рус. яз).**
**22.00 "100 имен Башкортостана". [12+]**
**22.30, 1.15 Новости недели (на баш. яз).**
**23.15 Караоке по-башкирски. [12+]**
**23.45, 4.15 Х/ф "В стреляющей глуши". [16+]**
**2.00 Спектакль "Пустая колыбель". [12+]**
**5.45 "Млечный путь". [12+]**

**2 ОКТЯБРЯ**
**ВОСКРЕСЕНЬЕ**
**РОССИЯ 1**

5.30, 3.10 Х/ф "Работа над ошибками". [12+]
7.15 Устами младенца.
8.00 Местное время. Воскресенье.
8.35 Когда все дома с Тимуром Кизяковым.
9.25 Утренняя почта с Николаем Басковым.
10.10 Сто к одному.
11.00, 17.00 Вести.
11.50 Праздничный концерт.
13.40 Т/с "Бомба". [12+]
18.00 Песни от всей души. [12+]
20.00 Вести недели.
22.00 Москва. Кремль. Путин.
22.40 Воскресный вечер с Владимиром Соловьёвым. [12+]
1.30 Х/ф "Сердечная недостаточность". [12+]
4.58 Перерыв в вещании.

**БСТ**

**7.00 "Доброе утро!" Концерт. [12+]**
**8.00 Новости (на баш. яз).**
**8.15 "Йома". [0+]**
**8.45 "Бай". [12+]**
**9.15 "Курай даны". [12+]**
**9.30 Тормош. [12+]**
**10.00 "Книга сказок". [0+]**
**10.15 "Городок АЮЯ". [6+]**
**10.30 "Гора новостей". [6+]**
**10.45 "Сулпылар". [0+]**
**11.15 М/с "Нурбостан сәйәхәте". [6+]**
**11.30 "Кош юлы. Балалар". [6+]**
**11.45 Вопрос + Ответ = Портрет. [6+]**
**12.30 Новости недели (на баш. яз). [12+]**
**13.15 "Алтын тирмә". [0+]**
**14.00 "Дарю песню". [12+]**
**15.30 "Дорога к храму". [0+]**
**16.00, 4.45 Историческая среда. [12+]**
**16.30 Хоккей. "Автомобилист" (Екатеринбург) - "Салават Юлаев" (Уфа). КХЛ.**
**19.30 Автограф. [12+]**
**20.00 Әлләсе... [12+]**
**20.45 Дознание. [16+]**
**21.00, 22.30 Республика LIVE #дома. [12+]**
**21.30 Новости недели (на рус.яз).**
**22.15, 6.45 Специальный репортаж. [12+]**
**23.00, 3.00 Х/ф "Взятки гладки". [12+]**
**0.45 Спектакль "Кукольный дом". [12+]**
**5.15 "Млечный путь". [12+]**
**6.00 Итоги недели (на рус. яз). [0+]**

## *СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ*



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**29 сентябрь "Әсмә"** (Р. Фәхретдинов, Ш. Шәкүрова инсц.), драма. 12+
**30 сентябрь "Йәш йөрәктәр"** (Ф. Бурнаш), мелодрама. 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**28 сентябрь "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00 0+
**29 сентябрь "Волшебная мельница"** (М. Кәрим), әкиәт. 11.00 0+
**30 сентябрь "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия. 12+
**1 октябрь "Үәт, исмаһам, ахырызаман!"** (М. Багаев), комедия. 18,00 6+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**28 сентябрь "Халыҡ-ара орган фестивале. Классиканан модернға тиклем"** (Мансур Йосопов). 6+
**29 сентябрь** Лев Франк. Фортепиано. 6+
**29-30 сентябрь "Ел тыуҙырған моң"** Халыҡ-ара этник музыка фестивале. 6+
**1 октябрь "В-А-С-Н"** 84-се иждад миҙгелен асыу. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**30 сентябрь "Кисер, мине, әсәй!"** (Р. Батулла), моңһоу комедия. 12+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**29-30 сентябрь Премьера! "Аҡ ҡалфаҡ"** (М. Фәйзи), драма. 12+
**1 октябрь "Эх, күгәрсенкәйҙәрем!"** (Ф. Бүләков), комедия. 18.00 12+
**2 октябрь "Наследники музыкальных традиций"**, музыкаль-әҙәби лекторий. 12.00 0+

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1444 һижри йыл.*

| Сентябрь - Октябрь (Сәфәр - Рабигел әүүәл) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 26 (30) дүшәмбе | 5:40 | 7:10 | 13:30 | 17:04 | 19:03 | 20:33 |
| 27 (1) шишәмбе | 5:42 | 7:12 | 13:30 | 17:02 | 19:00 | 20:30 |
| 28 (2) шаршамбы | 5:44 | 7:14 | 13:30 | 17:00 | 18:58 | 20:28 |
| 29 (3) кесе йома | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 16:57 | 18:55 | 20:25 |
| 30 (4) йома | 5:47 | 7:17 | 13:30 | 16:55 | 18:53 | 20:23 |
| 1 (5) шәмбе | 5:49 | 7:19 | 13:30 | 16:53 | 18:50 | 20:20 |
| 2 (6) йәкшәмбе | 5:51 | 7:21 | 13:30 | 16:51 | 18:48 | 20:18 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ХАЛЫҠ-АРА ТЫНЫСЛЫҠ КӨНӨНӘ




**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**37-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ябаға. Баренц. Ләм. Иген. Балтик. Тәпән. Әрем. Рәссам. Иҙмә. Тувыр. Сик. Япон. Елкә. Сама. Кастро. Көрәк. Тәүбә. Аҡыл. Ҡара. Сират. Арба. Март.

**Вертикаль буйынса:** Тәртешкә. Лаптевтар. Небраска. Биҙ. Ҡорған. Игәт. Беринг. Атлас. Ике. Имам. Намаҙ. Үнер. Акция. Анар. Биҙрә. Әкәмәт. Ярсыҡ. Трос. Карманьола.

*БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ!*

## ШАРТТАР ЯҠШЫРА...



**"Ауыл ипотекаһы" программаһы буйынса йылына 0,1-3 процент ставкаһы менән йорт һатып алыуға йәки төҙөүгә кредит алырға мөмкин.**

Рәсәй банкы бүлексәһе - Башҡортостан Республикаһы буйынса Милли банк мәғлүмәттәренә ҡарағанда, 2022 йылдың тәүге ярты йыллығында "Ауыл ипотекаһы" программаһы буйынса төбәктә 378 миллион һумлыҡ 142 кредит бирелгән. Программа 2020 йылдан эшләй. 2022 йылдың 18 авгусында Рәсәй премьер-министры Михаил Мишустин ауыл ипотекаһын срокһыҙ оҙайтыу хаҡында иғлан итте. Хәҙер тағы ла күберәк кеше торлаҡ шарттарын яҡшырта ала.

"Ауыл ипотекаһы" ярҙамында льготалы ставка буйынса түбәндәге эштәр өсөн кредит алырға мөмкин:

- һатыу - һатып алыу килешеүе буйынса әҙер торлаҡ йәки төҙөлөштә өлөшләтә ҡатнашыу килешеүе нигеҙендә төҙөлөп ятҡан йорттан фатир һатып алыу;
- ер участкаһы һатып алыу һәм унда торлаҡ төҙөү;
- әҙер шәхси йорт алыу;
- әҙер участкала торлаҡ төҙөү.

Шуныһы мөһим: программа ауыл ерендә һәм иң күбе 30 мең кеше йәшәгән ҡалаларҙа ғына эшләй.

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Сентябрь айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө ҡалаһынан** Сания Ишбулатова, **Белорет ҡалаһынан** Ансар Нуретдинов, **Мәсетле районы** Дыуан-Мәсетле ауылынан Мәүжиҙә Аллаярова, Наилә Ғәниева, **Өфө районы** Шамонино ауылынан Зәлиә Закирова, Зөлфиә Ҡаһарманова, Юлиә Мәзитова, Элеонора Мөләкова, Гөлсирә Иҙрисова, Вәлимә Шәһивәлиева, Зилиә Юлбирҙина, Альмир Байегетов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ҡоростай ныҡлы һаулыҡ, бәхет-ҡыуаныстарға мөлдөрәмә тулы оҙон ғүмер теләйбеҙ, рухи һәм матди байлыҡтар берҙәй килһен, һәр эшегеҙ уңыш менән ослanһын, тик изге күңелле һәм игелекле кешеләр менән бәхет һәм мөхәббәт сорналышында йәшәгеҙ!

**Иң изге теләктәр менән,**
**"Киске Өфө"ләр.**

*ҺОРАУ - ЯУАП*



# БАЛАҢ АУЫРЫҒАНДА...

**Һорау: "Ауырыу бала тәрбиәләү буйынса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы нисек түләнә?"**

- Эшләүсе ата-әсәнең береһе сирле баланы тәрбиәләү буйынса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы юллай ала. Уны электрон төрҙә асырға мөмкин, ә уның асылыуы, оҙайтылыуы, ябылыуы йәки түләнеүе тураһындағы белдереү "Дәүләт хеҙмәттәре"ндәге шәхси кабинетҡа ебәрелә.

Ғаиләнең ауырыу ағзаһын тәрбиәләгәндә ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса пособие былай түләнә:

***Сирле баланы 8 йәшкә тиклем ҡарау:*** Стационарҙа йәки амбулатор дауалауға ҡарамаҫтан, бала ауырыған осор уртаса эш хаҡының 100 проценты күләмендә түләнә. Уртаса эш хаҡына хеҙмәткәрҙең Социаль страховкалау фондына страховка иғәнәләре түләнгән бөтә түләү төрҙәре һәм бүләкләүҙәре инә. Ул страховка осрағы башланыр алдынан килгән ике календарь йыл өсөн билдәләнә. Ә бына 7 йәшкә тиклемге баланы ҡарау буйынса пособие түләүҙең оҙайлығы: сирле бала тәрбиәләүҙең бөтә осраҡтарында ла календарь йылда эшкә яраҡһыҙлыҡ буйынса 60 көн; әгәр инде баланың сире Һаулыҡ һаҡлау министрлығының ошо исемлегенә индерелгән булһа, календарь йылда 90 көн. Эшсенең алдағы ике календарь йылда килеме булмаған йәки килеме түбән булған осраҡта пособие минималь хеҙмәт хаҡынан сығып иҫәпләнәсәк, Башҡортостанда уның күләме, район коэффициентын иҫәпкә алып, 17 570 һум 85 тин тәшкил итә.

***8 йәшлек һәм унан олораҡ ауырыу бала тәрбиәләгән осраҡта түләү түбәндәге ҡағиҙәләр буйынса башҡарыла:***

- әгәр бала өйҙә дауаланһа, тәүге 10 көн өсөн ата-әсәгә пособие страховка стажынан сығып, ә артабанғы көндәр өсөн уртаса эш хаҡының 50 проценты күләмендә түләнә;
- бала стационарҙа дауаланһа, пособие хеҙмәткәрҙең страховка стажынан сығып иҫәпләнә. Страховка стажы - эш биреүсе хеҙмәткәр өсөн страховка иғәнәләре түләгән осор. Йәғни пособиеның күләме хеҙмәткәрҙең эшләгән ваҡытына бәйле. Әгәр страховка стажы 5 йылға тиклем булһа, ата-әсәгә уртаса эш хаҡынан - 60 процент, 5-8 йыл булһа - 80 процент, 8 йылдан ашыуыраҡ эшләһә, 100 процент түләнә. 7 - 15 йәшлек баланы тәрбиәләгән осраҡта түләү календарь йылда 45 көндән артмаҫҡа тейеш. Сирҙең бер осоро 15 көнгә тиклем дауам итеүе мөмкин.

***Сирле ғәрип бала тәрбиәләү:*** дөйөм ҡағиҙәләр буйынса түләнә. Эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса түләү осоро оҙайлығы бала ҡараған бөтә осраҡта ла календарь йылда 120 көндән артмай.

Ә бына ата-әсәһе вакцинан һуңғы өҙләгөүгә йәки яман шешкә дусар булған 18 йәшкә тиклемге балаһын тәрбиәләгәндә һәм 18 йәшкә тиклемге бала ВИЧ-инфекциялы булып, стационарҙа дауаланған осраҡта эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы сикләүһеҙ түләнә.

Бала аҡса түләнгән осорҙан оҙағыраҡ ауырыһа, ата-әсәләр һәм туғандар сиратлап эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙын юллай ала. Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ ҡағыҙы буйынса пособие түләүгә бәйле һорауҙар менән 8 (347) 262-70-10 номеры буйынса Социаль страховкалау фондының ҡыҙыу линияһына мөрәжәғәт итергә мөмкин.

**#Аңлатабыҙ_Башҡортостан**

*✓ Бала сағынан ата-әсәһе, мәктәп тарафынан һалынған илһөйәрлек, кешелеклелек, кеселеклелек сифаты әрме дәүерендә онотолоу түгел, киреһенсә, тик нығый ғына барғанға оҡшай.*



ПРЕМИЯҒА ТӘҠДИМ ИТЕЛДЕ...

# ИЛҺӨЙӘРЛЕК ҺӘМ...

## ғаилә тәрбиәһе һабаҡтары ул яҙғандарҙа



**Бишенсе тиҫтәһенә аяҡ баҫып, оҙайлы хәрби хеҙмәтен тамамлап ҡайтҡандан һуң ғына ҡулына ҡәләм алырға йөрьәт иткән Хәлил Һөйөндөковтың киң мәғлүмәт сараларындағы тәүге әҫәрҙәре менән таныша башлағанда, Сибай яҙыусылар ойошмаһын етәкләй инем. Төп һөнәре буйынса тел ғилеменән, әҙәбиәттән алыҫ булыуына ҡарамаҫтан, уның ифрат ҡыҙыҡлы итеп яҙылған проза әҫәрҙәре, тос мәҡәләләре төрлө гәзит-журналдарҙа бер-бер артлы сыға башланы. Яҙыусылыҡ кәсебенә әүҙем тотонған был авторҙың яҙмалары әҙәбиәт һөйөүселәрҙең күңеленә ятырын шунда уҡ тойомлағайным.**

"Кисә генә" шинелен һалып, матбуғатҡа әле килеп ишек шаҡыған был яҡташыма, әлбиттә, мөмкин тиклем файҙалы кәңәштәремде бирергә тырыштым. Бер аҙ ваҡыттан уға: "Гәзит, журналдарҙа баҫылып сыҡҡан повесть, хикәйәләрең бер китаплыҡ булып йыйылып китте бит инде, әйҙә уларҙы нәшриәткә бирәйек", - тигәс, "Шулаймы ни", - тип Хәлил хатта башта албырғап ҡалды. Балалар һәм үҫмерҙәр өсөн сыҡҡан шул тәүге йыйынтығына "Сыйырсыҡ ояһы" исемен бирергә лә тәҡдим иттем. Артабан да әүҙем яҙышҡан Хәлил Һөйөндөковтың ҡәләме көндән-көн тигәндәй үткерләнә, шымара барыуын күҙәттем. Үҙен әҙәпле, баҫалҡы, сабыр холоҡло кеше итеп һәм башҡа ыңғай яҡтары менән танытҡан, инде алтынсы тиҫтәһен ҡыуа башлаған был яҡташыма Башҡортостан Республикаһы яҙыусылар берлегенә инергә тәҡдим яһағас, был уның өсөн тағы бер яңылыҡ булды. 2014 йылда Яҙыусылар союзы ағзаһы булып та китте ул.

Уның республикабыҙҙың матбуғат сараларында бөгөнгәсә йыш сығып торған күп яҡлы, тәрән мәғәнәле әҫәрҙәре менән инде күптәр таныш тыр. Медицина темаһы, хәрби хеҙмәткә ҡағылышлы бай йөкмәтле яҙмаларын халыҡ яратып уҡый. "Киске Өфө" гәзитенең "Шифа" махсус битендә, "Йәшлек"тең "Сәләмәтлек" рубрикаһында һәр төрлө сирҙәр, уларҙы профилактикалау хаҡында үҙенсәлекле стиль менән яҙылған мәҡәләләре ифрат та уҡымлы. Бөтә донъяла, шул иҫәптән, илебеҙҙә лә киң таралған эскелек афәтенә ҡаршы үҙенең мәҡәләләре ярҙамында аяуһыҙ көрәшә Хәлил уҙаман.

Әрме мәлендә осраған ҡыҙыҡлы хәлдәр хаҡында ла мауыҡтырғыс итеп яҙа белә. Үҙем дә ҡасандыр медик һөнәрле, хәрби хеҙмәтте лә иңемдә татыған кеше булараҡтыр, Хәлил Һөйөндөковтың ошо юҫыҡтағы әҫәрҙәрен уғата ыңғай баһалау яғындамын. Һалдат һәм офицерҙар хаҡындағы ҡыҙыҡлы мәҡәләләре йәш быуынды, айырыуса малай халҡын илһөйәрлек рухында тәрбиәләүҙә ҙур роль уйнайҙыр. Тыуған иленән, милли мөхитенән алыҫ ерҙә сирек быуат йылдар ғүмер итеү сәбәплелер, әҫәрҙәрендә милләтебеҙҙе, туған телебеҙҙе һағынып, зар-интизар булып ҡайтҡанлығы ла тойола. Аллаһ ихтыяры менән бала сағынан ата-әсәһе, мәктәп тарафынан һалынған илһөйәрлек, кешелеклелек, кеселеклелек сифаты әрме дәүерендә онотолоу түгел, киреһенсә, тик нығый ғына барғанға оҡшай. Бына шул үҙенсәлеге лә, һис һүҙһеҙ, уның яҙған әҫәрҙәрендә сағылыш ала.

Туған телебеҙҙең именлеген һаҡлау, лөғәтебеҙҙәге диалекттар төрлөлөгө хаҡында иркенләп фекерләүе уның мәҡәләләрен тағын да уҡымлыраҡ итә. Ғаиләләр ныҡлығы, бала тәрбиәһе темаһы, ата-бабаларыбыҙ иң әүәл кәрәк тип һанаған иманлылыҡ, йәғни дин мәсьәләләре лә ситләтеп үтелмәй. Һуңғы йылдарҙа башлыса журналистика менән мауығыуының сәбәбен Хәлил Төхфәт улы түбәндәгесә аңлата: "Әлегә иҫән сағымда, көндәлек тормошобоҙ хаҡында замандаштарым менән киң мәғлүмәт сараларында даими сығып торған мәҡәләләрем аша фекерләшеп, уйхистәрем менән бүлешеп тороуҙан оло ҡәнәғәтлек кисерәм" - ти ул. Ул яҙыусы, журналист булып минең күҙ алдымда формалашҡанғамы, был кеше хаҡында шулай бер аҙ һөйләп алыуҙы кәрәк тип таптым.

Хәлил Һөйөндөковтың гәзит, журналдарҙа төрлө ваҡытта баҫылып сыҡҡан мәҡәләләрҙән төҙөлгән "Тормош һабаҡтары", "Иң әүәл кәрәк нәмә" тип аталған ике бүлектән торған йыйынтығы ла бер нисә йыл элек "Китап" нәшриәтенә тапшырылған. Планға ла индерелгән, оҙаҡламай китап булып, "донъя күрер" тип тә көтәбеҙ. Ҡәләмдәшебеҙҙең Шәһит Хоҙайбирҙин исемендәге республика журналистары премияһына тәҡдим ителеүе хаҡында ишеткәс, ысын күңелдән шатландым. Халҡыбыҙ тормошона, теленә, диненә битараф булмаған, милләтебеҙҙе тәрән хөрмәт иткән, тос фекерле журналист булып танылған был уҙаманды ошо юғары премияға лайыҡ тип һанайым. Уға артабан ижад уңыштары теләйем.

**Хәйҙәр ТАПАҠОВ,**
**Башҡортостан Республикаһы һәм Рәсәй Федерацияһының яҙыусылар һәм журналистар союзы ағзаһы, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Башҡортостандың атҡаҙанған уҡытыусыһы, Ш.Хоҙайбирҙин исемендәге премия лауреаты.**

*АФАРИН!*

# ЕҢЕҮ ЯУЛАЙ...

## рухы көслөләр генә



**Өфөнән 20 йәшлек Ильмира Сәлимова Санкт-Петербургта "Нева һылыуҡайы - 2022" халыҡ-ара матурлыҡ һәм талант конкурсында республика данын яҡланы. Унда коляскала йөрөгән инвалид ҡыҙҙар ҡатнаша. Ильмира башҡорт милли кейемендә сығыш яһаған. Селтәрҙе, баш кейемен ул әсәһе менән бергә эшләгән.**

Радий Хәбиров Өфө ҡыҙы Ильмира Сәлимованы "Нева һылыуҡайы - 2022" конкурсында еңеүе менән ҡотланы. "Өфө ҡыҙы Ильмира Сәлимова Санкт-Петербургта халыҡ-ара матурлыҡ һәм талант конкурсында еңде. Яҡташыбыҙ "Нева һылыуҡайы - 2022" исемен яуланы, - тип яҙҙы Радий Хәбиров социаль селтәрҙә. - Ильмира менән бер нисә ай элек таныштым, ул мине маҡсатҡа ынтылышы һәм көслө рухлы булыуы менән һоҡландырҙы. 20 йәшлек ҡыҙ ауыр тормош һынауҙары кисергән... Әммә ҡаршылыҡтарға ҡарамай, ул тормошто ярата, Башҡорт дәүләт университетының Тарих һәм дәүләт идаралығы институтында уҡый, Рима Баталова исемендәге Спорт әҙерлеге үҙәгендә коляскала фехтование секцияһында шөғөлләнә. Өҫтәүенә, бына шундай шәп сараларҙа ла ҡатнаша. Ильмира, мин һеҙгә ышандым, еңеүегеҙ өсөн бик шатмын! Һоҡланам һәм ысын күңелдән ҡотлайым!"

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӘКӘ ҺӨҘӨП...

## тауҙы ауҙара алмаҫ

Яҡшы ауыҙға аш тейер, яман ауыҙға таш тейер.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Ҡиәмәт көнөндә беҙҙән нимәләр уҡыуыбыҙ тураһында түгел, ә нимәләр ҡылыуыбыҙ тураһында һораясаҡтар. Әммә кешенең тормошонда ни ҡылыуы йыш ҡына уның нимә уҡыуына ла бәйле бит.

**(Фома Кемпийский).**

Ҡатын-ҡыҙ беҙҙең, ирҙәрҙең, гонаһына көнләшеп ҡарай. Әгәр ҙә улар беҙҙең кеүек үк боҙоҡ түгел икән, үҙҙәре шулай теләгәнгә түгел, уларға беҙ юл ҡуймағанға шулай.

**(Самюэл Джонсон).**

Үҙ ихтыярың менән етәкселек итә алмаһаң, башҡалар менән дә етәкселек итә алмаҫһың.

**(Гарриет Стоу).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Йософ исемле йәһүд крәҫтиәне йәшәгән. Уның бер эште эшләгәнсе, ниндәйҙер ҡарар ҡылғансы, иң тәүҙә оҙаҡ итеп уйлай, фәлсәфәүи һығымталар яһай торған ғәҙәте булған. Бер ваҡыт ул бойҙай һатырға тип ҡалаға баҙарға китергә йыйына башлай. Китер алдынан: "Бойҙайҙы һатып бөткәс тә мин һиңә телеграмма һуғырмын", - ти оҙатырға сыҡҡан ҡатынына. Бына ул баҙарға барып етә, бойҙайын уңышлы ғына һатып бөтә лә почтаға йүнәлә. Телеграммаға: "Бойҙайҙы һатып, арыу ғына аҡса эшләнем. Иртәгә ҡайтам. Яратам һәм үбәм. Йософ", - тип яҙа һәм... уйға ҡала. "Туҡта, ниңә мин "Бойҙайҙы һатып, арыу ғына аҡса эшләнем", тип яҙам әле? Бойҙайҙан башҡа тағы нимә һатайым мин, унан һуң, бойҙайҙы арыу ғына аҡса эшләү өсөн һаталар инде, быны ҡатыным былай ҙа белә..." - тип уйлай Йософ һәм телеграммалағы тап ошо һүҙҙәрҙе һыҙып ташлай. Шунан телеграммаға яҙған һүҙҙәрен яңынан ҡарап сыға һәм шулай тип фекер йөрөтә башлай: "Ниңә "иртәгә ҡайтам" тип яҙҙым әле? Мин шунан да һуңға ҡала алмайым да инде. Быны ҡатыным былай ҙа белә..." - ти ҙә, был һүҙҙәрҙе лә һыҙып ташлай. Тексты артабан уҡый һәм көлөп ебәрә: "Ни өсөн мин "Яратам һәм үбәм" тип яҙырға тейеш һуң әле? Ул бит минең үҙ ҡатыным, яратҡанды былай ҙа белә. Тыуған көнө булһа, шулай тип яҙғанда ла булыр ине..." - ти ҙә, телеграммалағы был һүҙҙәрҙе лә һыҙа. Телеграммала "Йософ" тигән генә һүҙ ҡала. "Һин нимә, ҡатының һинең Йософ икәнеңде былай ҙа белә бит инде..." - ти Йософ һәм был һүҙҙәрҙе лә һыҙып ташлап, телеграмманы йыртып, аҡсаны янында ҡалдырыуынан бәхетле булып, почтанан сығып китә..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

1 582218 911006 22038

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.**
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
ООО "СПУТНИК-ЮГ" нәшриәтендә баҫылды (453400, Башҡортостан Республикаһы, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури урамы, 4, офис 203).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |
| Матбуғат таратыу | 252-39-99 |

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
23 сентябрь 17 сәғәт 30 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44** телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3540
Заказ - 1204